ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

18-24 февраль (шаҡай) 2023

№6 (1048)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ҡаҙау ҡаға белмәгән ир...

ир түгел инде!



3

Яугир халыҡтың ғына тарихы һәм...



үҙенең йәшәйеш ҡиммәттәре була

8-9

Әрме яҙмалары



10-11

"Күңелем диңгеҙгә тартыла..."



12,13,16

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*21 февраль - Халыҡ-ара туған телдәр көнө.* ***Ошо Ер йөҙөндәге бар халыҡтарға: "Хоҙай һине милләт итеп яратҡан, туған тел биргән. Ошо хәҡиҡәтте онотма, үҙ туған телеңдә һөйләш, уны ҡәҙерлә, балаларыңды туған теленән мәхрүм итмә!" - тигән ишараны, саҡырыуҙы, өндәүҙе үҙ эсенә алған байрам менән бер-беребеҙҙе ҡотлайыҡ та, уның фәһемен, мәғәнәһен йөрәктәребеҙгә индерәйек. Туған телле булайыҡ, милләттәштәр!***

*АФАРИН!*

# УҠЫТЫУСЫЛАР...

## еңеүгә көйләнгән




**Ошо көндәрҙә "Башҡортостандың баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы -2023" һәм "Башҡортостандың баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2023" конкурстары үҙенең еңеүселәрен билдәләне. Был бәйгеләрҙә бөтәһе 58 кеше ҡатнашты, шуларҙың 18-е - йәш уҡытыусы.**

Өфөнөң "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурсында иһә 13 педагог үҙ көсөн һынаны. Ә 3 уҡытыусы "Педагогик өмөт" номинацияһында ҡатнашты, улар - эш тәжрибәһе 5 йылға тиклемге белгестәр. Араларында милләте менән ҡаҙаҡ егете, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамлап, бөгөн башҡорт теле буйынса белем биреп йөрөүсе Сағынбәк Ильяс Жарҡымбәк улы ла бар ине.

Әйткәндәй, Ильяс Жарҡымбәк улы ошо номинацияның еңеүсеһе булды ла инде. "Мин баш ҡаланың 9-сы мәктәбендә 1-9-сы кластарҙа белем бирәм, башҡорт телен башҡа төрки телдәр, йышыраҡ үҙемдең туған ҡаҙаҡ телем менән сағыштырып уҡытам. "Атанан күргән уҡ юнған, инәнән күргән тун бескән", тигән мәҡәл бар беҙҙең халыҡтарҙа. Мәктәптә лә ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ уҡытыусылар, белемдән тыш, йәш быуынға матур тәрбиә биреүҙе үҙ бурысы тип иҫәпләй. Мин дәрестәрҙә башҡорт халҡының Салауат Юлаев, Ҡаһым түрә, Шайморатов генерал кеүек батырҙары миҫалында башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнгән төрлө милләт вәкилдәрендә халыҡҡа, уның тарихи үткәненә, телгә ҡарата ихтирам, һөйөү тәрбиәләргә тырышам. Был уҡыусыларҙа илһөйәрлек тойғоһо уятыуҙың да бер ысулы һәм бик мөһим бурыс", - ти йәш педагог.

**(Дауамы 5-се биттә).**

*БАЛАЛАР ҠОРО*

# ЕҢМӘЙЕНСӘ ТУҠТАМАЙБЫҘ -

## беҙҙең холҡобоҙ шулай!



**Боронғоларҙың "Ир-егеттең күңелендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр", тигән тапҡыр һүҙе бар. Милләтебеҙҙең йөҙөн билдәләйәсәк йәш ир-егеттәр ниндәй һуң бөгөн, ниндәй уйҙар менән йәшәй, киләсәгебеҙҙе нисек итеп күрә? Ошо һорауҙарға яуап алмаҡ булып, Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының иң шәп, иң аҡыллы, иң укымышлы, иң уңышлы уҡыусылары - Ғайсар Мөхәмәтйәнов, Шаймурат Ҡарасов, Шамил Әхмәтшин, Дәүләт Ғәйнуллин менән әңгәмә ҡороп, батырлыҡ, ҡыйыулыҡ, егетлек тураһында һөйләштек.**

**➔ Гимназияла һеҙҙең һәләттәрегеҙҙе үҫтерергә шарттар бармы?**

**Д. Ғәйнуллин:** Шарттар бар, тип ышаныслы әйтә алам. Музыка йүнәлеше яҡшы үҫешкән, Н. Сабитов исемендәге 1-се балалар музыка мәктәбе филиалы беҙҙә урынлашҡан. Спорт секциялары күп. Волейбол, баскетбол, ҡаяға үрмәләү, еңел атлетика барыбыҙға ла оҡшай. Директорыбыҙ Ришат Марс улы Камалов милли көрәш һәм уҡ атыу түңәрәктәре асырға вәғәҙә итте, быларын беҙ айырыуса көтәбеҙ.

**Ш. Ҡарасов:** Түңәрәктәрҙән тыш, гимназия уҡытыусыларының тырышлығы һәм талапсанлығы беҙҙе үҫтерә. Бәләкәй саҡта үҙең өсөн нимә яҡшы, нимә насар икәнен бигүк аңлап та етмәйһең. Уҡытыусыларыбыҙ беҙҙе төрлө бәйгеләргә, олимпиадаларға йәлеп итергә тырыша - ошолар барыһы ла беҙҙе төрлө яҡлап аса. Уҡытыусыларыбыҙҙың эштәрҙе ваҡытында, аҙағына тиклем еткереүҙе талап итеүе мине тик яҡшы яҡҡа ғына үҙгәртә, дисциплина барлыҡҡа килә, киләсәктә лә был сифаттарым миңә ярҙам итәсәк, тип уйлайым.

**Ғ. Мөхәмәтйәнов:** "Гимназистар ҡоролтайы" советы, мәҫәлән, гимназияның уҡыуҙан тыш әүҙемлеге өсөн яуаплы. Был советта эшләү һәр кемебеҙгә яуаплы булырға, аралашырға өйрәнергә, социаль яҡтан үҫешергә ярҙам итә, лидерлыҡ сифаттарын аса. Ғөмүмән, гимназияла яҡшы кеше, киләсәктә халҡыбыҙҙы үҫтереүгә үҙ көсөн индерәсәк шәхестәр тәрбиәләнә. Күңелдәребеҙгә рух тойғоһо ла бында һалына.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# АТАЙҘАР ӨЛГӨ БУЛҺЫН!

*Булат ЗАРИПОВ, "Мин патриот" граждандыҡ-илһөйәрлек тәрбиәһе төбәк йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:* Тыуған иленде яратыу өсөн тарихты, мәҙәниәтте, халыҡтың йәшәйешен белергә һәм аңларға кәрәк. Балаларыбыҙ ошо хаҡта бер нәмә лә белмәй икән, илһөйәрлек тураһында һүҙ ҡуҙғатыу ҙа урынһыҙ. Уларға был өлкәләрҙәге белемде ғаилә, мәғариф учреждениелары, йәмәғәт ойошмалары бирҙәй үк өйрәткәндә, тәрбиәләгәндә генә ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килергә мөмкин.

Тәрбиәгә нигеҙ тәү ситратта ғаиләлә һалына һәм бында әсәйҙең генә түгел, атайҙың да әүҙем ҡатнашыуы мөһим. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, һуңғы йылдарҙа беҙ, өлкәндәр, матди байлыҡ, етеш тормош артынан ҡыуып, рухи донъяға ҡул һелтәберәк, тәрбиәне ситкәрәк этеп ҡуйҙыҡ. Ә был үҙ сиратында балаларыбыҙҙың, бөгөнгө йәштәрҙең Европаға йөҙ бороп, беҙҙең өсөн бөтөнләй ят ҡиммәттәрҙе үҙ итеүенә, интернет йоғонтоһона килтерҙе. Йәштәрҙең ҡайһылыр өлөшө, блогерҙарға эйәреп, еңел һәм күп аҡса эшләү, үҙҙәренең ниндәйҙер матди ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү теләктәрен генә өҫтөн ҡуя башланы. Ә берәй ун йылдан нисек булыр, ниндәй көн килер?

Нисек кенә дөрөҫ тәрбиә бирергә тырышмаһын, ҡатын-ҡыҙҙар баланы иркәләтеп, наҙлап, бәпләп үҫтерә - әсәй кеше шулай булырға тейеш тә. Беҙгә атайҙар тәрбиәһе етмәй бөгөн. Ир-егеттәр төрлө сәбәптәр табып, ваҡыт юҡлыҡҡа һылтанып, балаларына тейешле иғтибар бирмәй. Был ялҡаулыҡтан һәм теләк булмауҙан килә лер ул, тип тә уйлана. Сөнки тәрбиә йәһәтенән өлгө булырҙай күп балалы атайҙарҙы ла беләм: улар малай-ҡыҙҙары менән бергә ваҡытты файҙалы үткәрергә лә, уларҙы төрлө спорт түңәрәктәренә йөрөтөргә лә, башҡаһына ла өлгөрә. Улар кеше үҙ мәҙәниәтен, тарихын, шәжәрәһен, быуындан-быуынға тапшырыла килгән ғаилә ҡомартҡыларын яҡшы белгәндә генә тулы ҡанлы тормош менән йәшәй, эшләй алырын яҡшы аңлай.

Мин етәкләгән "Мин патриот" граждандыҡ-илһөйәрлек тәрбиәһе төбәк йәмәғәт ойошмаһы ла бына шул маҡсаттарҙа булдырылған. Беҙ ата-әсәләр, мәғариф учреждениелары күҙ уңынан ысҡындырған тәрбиәүи мәлдәрҙе улар менән берлектә башҡарабыҙ. Балалар тыуған яҡты өйрәнеү, тарих, шәжәрә, спорт өлкәләренә ылыҡһын өсөн саралар үткәрәбеҙ. Бына нимә мөһим беҙҙең киләсәк быуындар өсөн. Улар төрлө социаль селтәрҙәрҙә күргән теләһә ниндәй насар йоғонтоларға бирелеп, мауығып китмәһен, ялған ҡиммәттәрҙе үҙ итмәһен тиһәк, бөгөндән алып тәрбиә эше көндәлек шөғөлөбөҙгә әүерелергә тейеш. Ысын ир-егет, Ватанды һаҡлаусы, илһөйәр быуын үҫтереүҙә атайҙың роле баһалап бөткөһөҙ икәнен һис күҙ уңынан ысҡындырмайыҡ. Атай кеше тәү ситратта үҙе балаһына ҡарата битарафлыҡ тигән алама холҡонан арынһын, иғтибарлы һәм үрнәк алырҙай абруйлы булһын.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## УЙЛЫҒА - УЙ

# ТУҒАН ТЕЛЕМ...



● Туған тел - аралашыу ҡоралы ғына түгел. Туған тел - ул ин элек моң теле. Мондоң, йырҙың сәләмәтлеккә ыңғай тәьҫире, нервы күҙәнәктәрен дауалаусы сара икәнен профессиональ медицина ла иҫбат итә. Ә Тәбиғәт инә кешегә иҫ китмәле был мөғжизәне: мондо, йырҙы дауалау сараһы итеп бүләк иткән! Туған телһеҙ ҡалған кеше ниндәй телдә йырлап, йыр тыңлап, күңел тынысландыра алыр?

● Тел булмаһа, милләт юҡ. Туған тел - милләтте ҡурсалаусы төп сара. Халыҡ тигән бөйөк көстө туплап, бәйләп, берләштереп тотҡан ҡөҙрәт ул туған тел. Үҙ туған телен, халҡы традицияларын белмәгән кешенән дә наҙанырак, үҙ халҡына юғарынан ҡарап, түбәнһетеп маташҡан кешенән дә дорфараҡ кеше булмай. Өҫтәүенә, туған теленән яҙған кеше үҙенең дә, балаһының да төп йәшәү маҡсатының арҡа һөйәген ҡаҡшата. Бала күңеленә телем, илем, халҡым, киләсәгем тигән тойғо һәм яуаплылыҡ һалынһа, тормошта осрай торған һәр төрлө тайпылыштарҙан сығыу юлын таба аласаҡ. Сөнки был изге төшөнсәләр - оло маҡсат, ихтыяр көсө, рухи ныҡлыҡ нигеҙе.

● Шулай итеп, беҙ баланы туған теленән айырып, донъяны танып-белеүен, фекер йөрөтөү ҡеүәһен, аң үҫешен артҡа һөйрәйбеҙ. Туған телдә белем алыуға мөмкинлек, форсат юҡ икән, ни өсөн ғаиләлә, туған-ара, таныш-ара үҙ телендә аралашмаҫҡа? Ни өсөн баланы иҫ китмәле ҡиммәттәрҙән, халҡыбыҙҙың рухи хазинаһынан мәхрүм итергә? Ни өсөн фәҡәт туған тел аша бар була торған күңел яҡынлығын юҡҡа сығарырға? Кешегә тәбиғәттән бит гәжәп ҙур мөмкинлек бирелгән. Нисә тел теләһән, шул тиклем өйрән, һөйләш, аралаш. Тик рухи байлыҡ сығанағы булған туған тел иҫәбенә генә булмаһын. Ул - һинең күҙең, ҡолағың, танауың кеүек үк ағзаң, тик башҡа ағзалар кеүек күҙгә генә күренмәй. Шуның өсөн дә боронғолар туған телен белмәүҙе барыбер зәғифлеккә һанаған: күңеле һуҡыр, тип атаған.

● Нимә ул туған тел? Туған телдең нимә икәнен айырып ҡына әйтеүе ауыр, сөнки ул - тәбиғәттең кешелек донъяһына бүләк иткән иң мөғжизәле, иң серле бүләге. Ошо сер донъяһын байҡап ҡарайыҡ.

Ят мөхиттә туған телдә һөйләшкәндәрен ишетеп ҡалһаң, ҡолағың ҡарп итеп ҡала, шунда уҡ күңел йылынып китә, ҡараштарың шул яҡҡа төбәлә, туған телендә һөйләшкән кешене эҙләй башлайһың. Туған телдә әйтелгән бер нисә һүҙ йәки керпек ҡағып алған арауыҡта ҡолаҡты наҙлап үткән туған моң һирпендеһе күңел донъяңды ҡапыл нурландырып ебәрә. Нимә икән ул туған тел? Туған моң? Туған өн? Ниндәй мөғжизә ул?

Ошо хаҡта һәр кем уйланһын ине.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА яҙмаларынан.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Республикабыҙҙа бер нисә йыл инде "Ир-егеттәр ҡоро" төбәк йәмәғәт ойошмаһы эшләп килә. Ошо ойошмалар ир-егеттәрҙең статусын күтәреүгә, йәмәғәт эштәрен әүҙемләштереүгә булышлыҡ итәме?***

*Дим ЙОМАҒУЖИН, Белорет районы "Ир-егеттәр ҡоро" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе:* Беҙҙең районда ир-егеттәр былай әүҙем ул. Әйтәйек, ҡаралмаған зыяраттар юҡ беҙҙә, һәр ауылда һуғыш ветерандарына обелисктар ҡуйылған. Халыҡ үҙе лә дәррәү. Күптән түгел 25 йортлоҡ кына Сәфәрғол ауылында күмәк көс менән 250 мең аҡса йыйып, Бөйөк Ватан һуғышы һәм тыл ветерандарына обелиск ҡуйҙыҡ.

Бындай рәсми ойошма барлыҡҡа килгәс, унда эшлекле егеттәрҙе туплап, тәү ситратта, эш урындары булдырыу тураһында һөйләшергә ниәтләнеп торабыҙ. Эшҡыуар егеттәр байтаҡ, улар менән ауылдарҙа тағы ла ниндәй эш асырға булыуын ҡарарға кәрәк. Теләге булғандарға документ туплауҙа ярҙам да кәрәгер, улай ғына ла түгел, кешене һүҙ менән дә дәртләндереп ебәреү мөһим. Беҙҙең районда бит ҡул эшенә, төрлө кәсепкә оҫта халыҡ йәшәй. Йорт төҙөүҙе беҙ эшкә лә һынамайбыҙ, әлбиттә. Ауылдарыбыҙға ҡарағыҙ, ниндәй яҡшы йәшәй халыҡ, йорттары төҙөк, матур. Йәштәр ҙә ауылда төпләнергә тырыша хәҙер, ауылдар ҙурая. Малсылыҡ, йыҡлысылыҡ менән көн итҡәндәр күп. Ағас эше менән дә булышалар. Әле бына солоҡсолоҡ менән шөғөлләнә башланылар. Нуҡат ауылынан солоҡсо Азамат Заһиҙуллин был шөғөлдө тергеҙергә ниәт иткәндәргә оҫталыҡ дәрестәре күрһәтә алыр ине. Шуға ла советтың төүге йүнәлеше - эш урындары булдырыу, матур өлгәләр артынан башҡаларҙы ла эйәртеү. Аҡса таба башлай икән, ирҙең үҙенә ышанысы ла арта, тимәк, ғаиләһендә лә дәрәжәһе күтәрелеп китә.

Унан һуң, яңы ҡанун буйынса, хәҙер дәүләт ҡарамағында булмаған ерҙәрҙе ҡуртымға бирә башланылар. Ошо ерҙәр таралып бөтмәҫ элек уларҙы үҙебеҙ ҡуртымға алырға кәрәк. Юғиһә, Мәскәү яҡтарынан килеп, ерҙәребеҙҙе ҡуртымға алып, урмандарҙа браконьерлыҡ менән шөғөлләнә башламаҫтар, тимә. Үҙ еренең ҡәҙерен ошо ерҙә тыуып-үҫкән кеше генә белә. Үҙ егеттәребеҙгә хужа булып өйрәнергә ваҡыт етте.

Өлкән кешене тәрбиәләп булмаһа ла, йәш быуын менән эште әүҙемләштереү маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Элек беҙ мәктәптә уҡыған саҡта район буйынса ойошторолған ярыштарҙан ҡайтып инмәй инек. Йүгереү, саңғы буйынса район чемпионы исемдәре алып йөрөнөк. Спорт бит ул тәндә генә түгел, рухты ла ныҡыта. Рухы ныҡ булған кеше генә бирешмәй был тормошта. Шуға ла төрлө ярыштар үткәреп, унда атаһын да, улын да ҡатнаштырып, ошо рәүешле уларҙы берләштереп, күңелдәренә күперҙәр һалырға ине. Мин үҙем йәш саҡта бер аяғымды юғалттым, әммә бөләнөп, бирешеп ултырманым. Мотоцикл да йөрөттөм, техникум да, университет та тамамланым, эшләнем дә, ғаилә ҡороп, балалар ҙа үҫтерҙек. Үҙемдең атайым ғүмере буйы уҡытыусы булып эшләне, мин уның менән гел ғорурланып йәшәнем. Минең балаларым да улар өсөн йәнемде бүләп бирергә әҙер икәнемде белә. Былар барыһы ла ана шул рух ныҡлығы, үҙеңә ышаныс, тыйылғандан тыйылып йәшәүҙең һөҙөмтәһендә яуланған. Бөгөнгө атайҙар ҙа шундай абруйға өлгәшһен ине.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә Ватанды һаҡлаусылар көнөнә арналған саралар планын тикшерҙеләр. 22 февралдә хәрбиҙәрҙе бүләкләү тантанаһы, шулай уҡ "Торатау" конгресс-холында тантаналы йыйылыш була. 23 февралдә Еңеү паркында Советтар Союзы Геройҙары Александр Матросов һәм Миңлеғәле Ғөбәйҙуллин, Совет майҙанында Рәсәй Геройы Миңлеғәле Шайморатовтың һәйкәлдәренә сәскәләр һалынасаҡ. Муниципаль районлар һәм ҡала округтары башлыҡтарына ла Ватанды һаҡлаусылар көнөнә арналған тантаналы йыйылыштар һәм концерт программалары үткәрергә ҡушылды.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың указы менән республикала 2023 йылда Мәрхүмдәрҙе иҫкә алыу көнө билдәләнде. Республикала мәрхүмдәрҙең ҡәберҙәрен тәртипкә килтереү эштәре шәмбе, 6 майҙа, ойошторола. Бынан тыш, Башҡортостанда Мәрхүмдәрҙе иҫкә алыу көнө тураһында указға үҙгәрештәр индерелде. Хәҙер дата республика етәксеһенең айырым бойороғо менән билдәләнә.

✓Республика Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй Федерацияһының йыйылма командалары составында олимпия, паралимпия, сурдлимпия уйындары еңеүселәренә, призерҙарына, шулай уҡ уларҙың тренерҙарына Башҡортостан Республикаһының дәүләт спорт стипендияларын булдырыу тураһында указға ҡул ҡуйған. Чемпиондарға - 30 мең, икенсе урын өсөн - 25 мең, өсөнсө урын өсөн 20 мең һум күләмендә стипендиялар тәғәйенләнә. Тренерҙарға - тәрбиәләнеүселәренең стипендия күләменән 50 процент.

✓Вадимир Путин Башҡортостанда йәшәүселәрҙең ҡаҙаныштарын дәүләт наградалары менән билдәләне. Хәрби хәрәкәттәр инвалидтарының республика йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Әлфит Ниғмәтйәнов II дәрәжә "Ватан алдындағы ҡаҙаныштары өсөн" орденының миҙалына лайыҡ булды. Башҡортостандың "Акрополь" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең генераль директоры Хәйҙәр Ғайсинға һәм "АС-Проект" проект институты яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте директоры Гүзәл Яубаҫаровға "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған төҙөүсеһе" тигән маҡтаулы исем бирелде.

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ

**Талантлы медицина фәндәре докторы, профессор, операцияһыҙ дауалау ысулдары авторы Сергей Бубновскийҙың һәр яңы китабын уҡып ҡына ҡалмайым, әентекле өйрәнәм дә. Авторҙың ир-егеттәр һаулығына ҡағылышлы хеҙмәтен уҡығанда билдәле доктор яҡташыбыҙ, Венер Сәхәүетдиновтың ҙур үкенес менән: "Ҡустым, ни өсөн мине бер кем дә аңламай, бер генә бюрократ та тыңларға теләмәй икән?" - тигән һүҙҙәре ҡолағымдан китмәне. Венер Ғәзиз улын иң ныҡ борсоған мәсьәләләрҙең береһе - тик хәрби комиссариаттарға барыр ваҡыт еткәс кенә ир-егет һаулығына иғтибар ителеүе булды.**

# ҠАҘАУ ҠАҒА БЕЛМӘГӘН ИР...

## ир түгел инде!



Бына Сергей Михайлович Бубновский ҙа, ул осор, йәғни ир-егетте ир-егет итеп тәрбиәләү ваҡыты 6-8 йәшкә тиклем үк башланырға тейеш, ти. Үҙенең фекерен профессор күп һанлы кире ҡаҡҡыһыҙ миҫалдар менән иҫбат итә. Мин ул китапты уҡығанда ике-өс класс белемле атай-әсәйҙәребеҙ беҙҙе нисек дөрөҫ итеп тәрбиәләгәнен аңланым. Мәҫәлән, ауыл малайының һыуҙа йөҙә белмәгәне минең өсөн мәңгелек аңлашылмаған һорау булып ҡала. Беҙҙең ауыл ҙур йылға буйында ултырмай, әммә атай-әсәйҙәр бәләкәй генә шишмәне быуып, балаларға йөҙәрлек быуа булдырҙылар, уның өсөн өлкән быуынға беҙ тик рәхмәтле генә. Тимәк, улар ысынлап та баланың йөҙә белергә тейешлеген күҙ уңында тотоп эшләгән быны.

Бала саҡта тиҫтерҙәремдең хәтерендә ҡалған иң иҫтәлекле күренештәрҙең береһе - һыбай йөрөү. Совхоздың 70-80 аты - беҙҙең ауылда, һәр ат ҡараусының берәр улы - минең тиҫтер. Йәй көнө йылҡы малын көтөү - балалар елкәһендә. Беҙ, башҡа малайҙар, иртән иртүк яланға сығабыҙ, оҡшаған атты тотоп менәбеҙ, әйәр тураһында уйлау ҡайҙа ул! Бер нисә тапҡыр осоп ҡалғанымды бөгөн көлөп кенә хәтерләйем. Хәҙер рәхсәт булһа ла ауылдарҙа фермерҙарҙан башҡа йылҡы малы аҫраусы юҡ. Ат һөймәй үҫкән милләтебеҙ малайҙары быуыны арта. Ә бит, билдәле булыуынса, борон-борондан башҡорт улын өс йәштән атҡа атландырған, тимәк, шул осорҙан алып уларҙан ир-егет тәрбиәләгән. Өс йәштән! Ә беҙ мәктәпкә барғандарына ла "әф-әф" тип торабыҙ.

Бала саҡтағы бер ваҡиғанан алған һабаҡ ғүмерлеккә етте. Район гәзитенән яһаған пилоткама йондоҙ ҡаҙаным да һыу инергә юлландым. Түбән остоң биш-алты малайы ҡаршы сыҡты, сәбәп итеп йондоҙомдо тартып алырға йәбеште, һуғышып киттек. Быны тәҙрәнән күреп ҡалған әсәйем сыбыҡ тотоп йүгереп сыҡҡас, тегеләр ҡасты. Шунан ни булды тийәрһегеҙ? Сыбыҡ кемгә эләкте тип уйлайһығыҙ? Әлбиттә, миңә! "Нинә шуларға бирешеп тораһың!" - тине әсәйем.

Урамда һалдат ҡайыштары менән һуғышып, туҡмалып, бляханың йондоҙонан алған мисәт менән ҡайтҡанда ла атай-әсәйгә ошаҡлашыу ҡайҙа ти ул, хатта бер туған ағайым да белмәй торғайны. Әнғәм Атнабаевтың "Өйрәттеләр" шиғырындағы кеүек, "Туҡмап өйрәттеләр иламаҫҡа, кеше илағанда көлмәҫкә, ауыҙың тулы ҡара ҡан булһа ла, дошман алдында төкөрмәҫкә..."

Бөгөн малайҙарҙы ир-егет итеп тәрбиәләргә тейешле кешеләрҙең интернеттағы сығышын уҡыһаң, иҫтәрең китә. Мәҫәлән, мәктәптәрҙә башланғыс хәрби әҙерлек (НВП) дәресен тергеҙеү тураһында һүҙ күтәрелеү менән, шуны ғына көткән кеүек, ҡаршы булғандар геү итеп ҡалды. Малайҙарға, буласаҡ һалдаттарға, дәрестә автомат һүтеп-йыйыуҙан да күркәмерәк нимә бар? Ә уҡыу йылы аҙағында өйҙән ситтә аҙналыҡ хәрби йыйындар, автоматтан атыу үҙе ни тора!

Бөгөнгө закон буйынса, әгәр уҡыусыһы уҡыусыға бер аҙ тауышын күтәрһә - бөтә интернет киңлеге тула, бахырҙы нәмә тип кенә битәрләмәйҙәр. Ә һуңынан, үҫкәс, әлеге бешмәгән елғыуар әсәһе аҡса бирмәгәнгә бөтә ғаиләһен үлтерә, был осраҡта ниңәләр тәрбиә "бирмәгән" мәктәпте ғәйепләйҙәр...

Беҙҙең класты рәсем дәресенән Михаил Быков исемле талантлы педагог уҡытты. Дәрес буйы һөйләшеп ултырған Рафаэлде уҡытыусыбыҙ бер нисә тапҡыр иҫкәртеүенә ҡарамаҫтан, һуңғыһы ҡолағына ла элмәне, башҡаларға ҡамасаулауын тынырға теләмәне. Түҙемлеге бөткән Михаил Егорович уның елкәһенә биреү менән Рафаэль парта араһына һуҙылып төштө, башҡаса дәрестә тауышланып ултырманы. Иң ҡыҙығы, был ваҡиға класс бүлмәһенән тышҡа сыҡманы. Ә хәҙер йәмғиәтебеҙ малай түгел, мәмәй әҙерләй...

Мәктәп тураһында тағы бер фекерем менән уртаҡлашайым әле. Беҙҙә 5-7-се кластарҙа - ағас, 6-8-се кластарҙа тимер менән эшләргә өйрәттеләр. Шуға күрә бысыу, йышыу өсөн бер ваҡытта ла башҡа кешегә мөрәжәғәт итмәйем. Ошо тәжрибәмдән сығып, ейәнемә тәүге уйынсыҡ итеп ысын сүкеш һәм ҡул бысҡыһы алып бирҙем. Өйҙә ҡаҙау ҡаға белмәгән ир ир түгел инде.

Ир-егет тәрбиәләү мәктәптең генә эше түгел, ә, тәү сиратта, ғаиләнең бурысы. Үрҙә әйткәнемсә, атай-олатайҙар был бурысты өс йәштән башлаған, малайҙарҙы сүкеш-балта тотоуҙан тыш, Тыуған илен һаҡларға бурыслы итеп тәрбиәләү ҙә мөһим. Бының өсөн иң тәүҙә спортҡа ҙур иғтибар бирергә кәрәк. Кем әйтмешләй, ҡарт көнөнә байлыҡ түгел, ә һаулыҡ туплау кәрәк. Бының өсөн сәләмәт тәндә сәләмәт рух та булырға тейеш.

**Сәйфулла ӘМИРОВ.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Республикабыҙҙа бер нисә йыл инде "Ир-егеттәр ҡоро" төбәк йәмәғәт ойошмаһы эшләп килә. Ошо ойошмалар ир-егеттәрҙең статусын күтәреүгә, йәмәғәт эштәренә әүҙемләштереүгә булышлыҡ итәме?***

***Фәнис БИКТАШЕВ, Мәләүез районы "Ир-егеттәр ҡоро" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе:*** Һис шикләнмәйенсә, был ойошманың файҙаһы булыр, тип яуаплайым, сөнки мин инде байтаҡ йылдар оШондай йәмәғәт ойошмаларында эшләйем. Беҙҙең өсөн тағы ла матур бер үрнәк бар - ул "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһы. Ниндәй матур эшләйҙәр улар, ниндәй проблемалар күтәрәләр! Ирҙәрҙең әлегә тиклем ундай ойошмаһы булманы, хәҙер бына шул "Ир-егеттәр ҡоро" эшмәкәрлеге аша ир-егеттәрҙең, атайҙарҙың абруйы күтәрелеп, уларҙың йәмғиәттә лә, ғаиләлә лә роле артыр, тигән өмөттәбеҙ. "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары ла беҙгә ярҙам итер, тип уйлайым.

Ойошма, тигәс тә, кемгәләр барып, "Һин, әйҙә, йортондо, ихатаңды бөтәйт", "Ауылыңды тәртипкә килтер", тип эш ҡушып булмай. Быларҙы эшләү кешенең үҙенең ихтыярында. Әммә беҙ уларға өлгө күрһәтә алабыҙ. Әйтәйек, минең тыуған ауылым Әбет эшләгән һәм йәшәгән еремдән 30 саҡрым йыраҡлыҡта, форсатын табып, ҡайтып, шәмбе өмәләре үткәреп, байрамдарҙа ҡатнашып торам. Шәжәрә төҙөп, ҙур итеп байрам ойошторҙоҡ, әле бына яҙыусы Фәнил Күзбәков менән ауыл тарихы буйынса китап яҙып йөрөйбөҙ. Беҙ, йәмәғәт ойошмалары, ошо үҙебеҙҙең үрнәк менән башҡаларҙы тәрбиәләйбеҙ, уларға өлгө күрһәтәбеҙ.

Ғөмүмән, ирҙәр тәбиғәте менән ярҙамсыл, миһырбанлы, көслө зат, уларға, бәлки, саҡырыу ташларға ғына кәрәктер. Беҙҙең төбәктә күптәр Себер тарафтарында эшләй. Әле бына махсус хәрби операция башланғас, күп егеттәребеҙ хеҙмәттә йөрөй. Хәҙер төрлө һөнәр эйәләре булған шәп ир-егеттәрҙе ҡоробоҙға тупларға ниәтләнеп торабыҙ, халыҡ үҙенең яҡлаусылары бар икәнен күрһен, тибеҙ. Кеше араһына сығып, матур эштәре менән күренә башлаһа, ғаиләләрендә лә абруйы бермә-бер артып китер ине ирҙәрҙең. Ир баш булһа ла, ҡатын муйын, ул ҡайҙа бора, баш шунда борола, тигән булалар ҙа ул. Ләкин ғаиләлә ир-егеттең һүҙе барыбер өҫтөн булырға тейеш. Ғаиләлә ирегеҙ ҡарарҙар ҡабул итеп, яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алһа, үҙегеҙгә еңелерәк бит, тип өндәшкем килә гүзәл заттарға. Алдан йүгермәгеҙ, сөнки үҙегеҙ өйрәтһәгеҙ бит уларҙы еңел-елпегә. Шунан ирҙәрҙе яҡларға, һаҡларға кәрәк, тигән лозунг ташлайһығыҙ...

Шулай уҡ абруйлы атай булыу өсөн дә үҙең өлгө булырға тейешһең. Улым, спиртлы эсемлек эсмә, тәмәке тартма, тип әйтер өсөн үҙеңдең айыҡ булыуың кәрәк. Һәр беребеҙ матур өлгө күрһәтһәк, берләшеп, матур эштәр ҙә атҡарырбыҙ әле.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республика Башлығының 2019 йылдың 18 мартындағы "Башҡортостан Республикаһы Башлығы стипендиялары тураһында"ғы Указына тейешле үҙгәрештәр индерелде. 2023 йылдың 1 сентябренән республика етәксеһе стипендияһы аспиранттарға - 8050 һум, юғары уҡыу йорттары студенттарына - 6000 һум, урта махсус уҡыу йорттары студенттарына 5000 һум тәшкил итәсәк.

✓Рәсәй Президентының матбуғат секретары Дмитрий Песков белдереүенсә, Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа мөрәжәғәтнамә менән шишәмбе, 21 февралдә, сығыш яһай. Журналистарға рәсми рәүештә ТАСС хәбәр итте. Песков һүҙҙәренсә, сара Мәскәүҙең "Кунаҡһарай"ында үтә. Дәүләт башлығы үҙенең мөрәжәғәтендә ағымдағы хәлгә баҫым яһай, тине ул. Унда илдең махсус хәрби операцияһында ҡатнашыусылар саҡырыла. Әле сит ил журналистарын аккредитациялау мәсьәләһе хәл ителә.

✓Башҡортостанда Китап йәрминкәһе үткәрелә. Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика етәксеһе Радий Хәбиров ошо турала белдерҙе. "Май аҙағында Совет майҙанында Китап йәрминкәһе үтергә тейеш. Китапҡа ҡарата һөйөү тәрбиәләргә кәрәк", - тине Радий Хәбиров. Аҙна буйына йәрминкәлә яңы китаптар һатыуҙан тыш, күренекле яҙыусылар менән осрашыуҙар, йәш әҙәбиәтселәрҙең ижады менән таныштырыу күҙаллана.

✓Республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы яңы наградаға - "Миһырбанлыҡ һәм хәйриәлек өсөн" билдәһен булдырҙы. Наградаға социаль өлкәлә бағымсы, йылына кәмендә ике тапҡыр саралар ойоштороуҙа матди һәм матди булмаған хәйриә ярҙамын күрһәткән, министрлыҡ ҡарамағындағы учреждениеларға финанс яғынан һәм башҡа йәһәттән булышлыҡ иткән, халыҡтың социаль яҡланмаған ҡатламына ярҙам программаларын әҙерләүҙә һәм тормошҡа ашырыуҙа ҡатнашҡан меценаттар тәҡдим ителә.

✓Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән республикала күп фатирлы йорттарҙа дөйөм мөлкәтте капиталь ремонтлауға иғәнәнең минималь күләме билдәләнде. Документҡа ярашлы, алты ҡатҡа тиклемге йорттарҙа капиталь ремонт өсөн түләүҙең минималь күләме бер квадрат метрға - 7,46 һум, ә алты ҡаттан бейегерәк йорттарҙа 8,1 һум була.

*ҠЫҪҠАСА*

# ЯҠТАШЛЫҠ КӨСӨ

**Республикала "Атайсалға - файҙалы гәмәлдәр" йылы сиктәрендә "Яҡташлыҡ көсө" форумы уҙғарыла.** Радий Хәбиров тейешле указға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, форум 5 майҙа Өфөлә була. Сараға әҙерлек һәм уны уҙғарыу өсөн ойоштороу комитеты төҙөлә, етәксеһе - Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе Максим Забелин. Шулай уҡ комитет составына уның беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев, Федерация Советының фән, мәғариф һәм мәҙәниәт комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова, Дәүләт Думаһы депутаты Эльвира Айытҡолова, республика министрлыҡтары һәм ведомстволары, шулай уҡ баш ҡала хакимиәте вәкилдәре инде.

✔ **Республикала бейә һөтөнән косметика етештерә башлайҙар. Рәсәйҙең Иҡтисади үҫеш министрлығы "Благзавод" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтен "Благовещен" йылдам үҫеш биләмәһе вәкилдәре реестрына индерҙе.** Компания - йылдам социаль-иҡтисади үҫеш биләмәһенең 35-се ағзаһы. Благовещен районы хакимиәте башлығы Олег Головтан билдәле булыуынса, проектты ғәмәлгә ашырыуға яҡынса 3 миллион һум һалына. Аҡса етештереү бинаһы һәм технологик ҡорамалдар һатып алыуға йүнәлтелә. Производствоны асыу ун яңы эш урыны булдырырға мөмкинлек бирә. Компания хужаларының йылына 6500 тауар етештереп сығарыу планы бар. Улар- ҙы сауҙа селтәрҙәрендә, шулай уҡ күргәҙмәләрҙә һәм йәрминкәләрҙә һатырға ниәтләй. Продукцияла бейә һөтөнән тыш, тәбиғи үҫемлек һәм мал компоненттары файҙаланыла.

✔ **Мәсәғүттә Өфө медицина колледжының филиалы асылды. Уны асыу тантанаһында Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин ҡатнашты.** "Республика Башлығы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса республикала медицина колледждарының дүрт филиалын астыҡ. Был беҙҙең өсөн ҙур ярҙам булып тора, сөнки бөгөн кадрҙарға ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Бөгөн Мәсәғүттә 25 кеше "Шәфҡәт туташы эше" һөнәренә уҡый", - тине министр. Өфө медицина колледжының яңы филиалы поликлиникала һәм Мәсәғүт муниципаль-ара үҙәктә урынлашҡан. "Дөйөм дисциплиналарҙы - урындағы педагогия колледжы, медицина дисциплиналарын дауахана хеҙмәткәрҙәре уҡытасаҡ. Ҡайһы бер лекцияларҙы Өфө медицина колледжы уҡытыусылары ситтән тороп уҡыясаҡ. Студенттар квартал һайын бер аҙнаға Өфөгә киләсәк. Сығымдарҙы үҙ өҫтөбөҙгә алабыҙ, шулай уҡ уларға ятаҡ бирәбеҙ", -тип белдерҙе Өфө медицина колледжы директоры Илдар Ғиләжев. Быға тиклем Октябрьский, Учалы, Нефтекама ҡалаларында медицина колледждарының филиалдары асылғайны.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# МОРТАЗА РӘХИМОВ ИСЕМЕНДӘГЕ...



**Радий Хәбиров Башҡортостандың Беренсе Президентының исемен мәңгеләштереү тураһында указға ҡул ҡуйҙы.**

Документта билдәләнеүенсә, Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов - Башҡортостандың социаль һәм иҡтисади үҫешенә ҙур өлөш индергән күренекле сәйәсмән һәм йәмәғәт эшмәкәре. 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернатына һәм Мораҡ ауылындағы Башҡорт гимназияһына уның исеме бирелә. Бынан тыш, республика Хөкүмәте - белем биреү учреждениеларының береһенә, ә Өфө хакимиәте баш ҡаланың үҙәк урамына Мортаза Рәхимовтың исемен биреү буйынса тәҡдимдәр индерергә тейеш. Өфөлә шулай уҡ Башҡортостандың Беренсе Президентына һәйкәл һәм Мортаза Рәхимов йәшәгән йортҡа - мемориаль таҡтаташ, тыуған яғында - Күгәрсен районының Тәүәкән ауылында музей асыу күҙаллана.

Республиканың Милли музейында Башҡортостандың Беренсе Президентының эшмәкәрлеге хаҡында материалдар туплап, тыуыуына 90 йыл тулыуға ҡарата (2024 йылда) уның тураһында биографик энциклопедия баҫтырып сығарыу бурысы тора, тип хәбәр иткәйне "Башинформ".

# БОРОНҒОНОҢ ЗАМАНСА МУЗЕЙЫ



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Евразия күсмә цивилизациялар музейын булдырыу буйынса юл картаһын әҙерләргә ҡушты. Был хаҡта ошо музейҙы булдырыу мәсьәләләренә арналған кәңәшмәнән һуң төбәк етәксеһенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр.**

Радий Хәбиров музейҙың концепцияһын уҙған йылдың июлендә тәҡдим иткәйне. Музей комплексын Шишмә районындағы Турахан кәшәнәһе биләмәһендә асыу күҙаллана. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар төҙөлөш майҙансығын әҙерләү, уны транспорт һәм инженер инфраструктураһы менән тәьмин итеү, шулай уҡ музей комплексын төҙөү этаптарын һәм уның артабанғы эшмәкәрлеге өсөн ғилми база булдырыуҙы тикшерҙе.

Башҡортостандың Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин хәбәр итеүенсә, республиканың бер нисә районында археологик ҡаҙыу эштәре башҡарылып, күсмә цивилизация осорон һәм уларҙың республикабыҙ халыҡтары тарихындағы ролен артабан тикшереүгә этәргес биргән. "Беҙ һанлы тикшереү алымдары өсөн заманса ҡорамалдар һатып алдыҡ, уларҙы эҙләнеүҙәрҙә ҡулланабыҙ, - тип һөйләне Дамир Ғәйнуллин. - Быйыл Бойондороҡһоҙ илдәр эксперттары ҡатнашлығында дүрт археологик экспедиция ойоштороға йыйынабыҙ. Беҙҙең менән эшләүгә Үзбәкстандың һәм Әзербайжандың Фәндәр академиялары ла ҡыҙыҡһыныу белдерҙе".

2023 йылдың мартында музей биләмәһендә майҙаны 200 квадрат метрлыҡ визит-үҙәк төҙөлөүе башлана. Унда тарихи артефакттарҙың мини-экспозицияһы, лекция амфитеатры, кафе һәм ҡарау майҙансығы була.

Бынан тыш, музей комплексы эргәһендә рекреацион зоналы ҡунаҡхана төҙөү, шулай уҡ Башҡорт аты үҙәге биләмәһен ат сабыштары өсөн манеждар, глэмпинг, һөнәрселәр ауылы һәм башҡа этно-тарихи майҙансыҡтар менән йыһазландырыу күҙаллана.

# ФӘН КӨНӨНДӘ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ғалимдарҙы һөнәри байрамы - Рәсәй фәне көнө менән ҡотлағанда, Башҡортостан хаҡлы рәүештә үҙенең көслө академик һәм университет традициялары, ғилми мәктәптәре, уларҙың эш һөҙөмтәләрен иҡтисадтың реаль секторына индереү менән дан тота, тип билдәләгәйне. Ул шулай уҡ республиканың Төбәктәрҙә фәнни-технологик үҫтереүҙең милли рейтингында тәүге бишәү иҫәбенә инеүе тураһында ла әйтеп үткәйне.**

Әйткәндәй, Рәсәй Президенты Башҡортостан ғалимдарының ҡаҙаныштарын дәүләт наградалары менән билдәләне. Фәнде үҫтереүгә индергән өлөшө һәм күп йыллыҡ намыҫлы хеҙмәте өсөн Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Өфө химия институты лабораторияһының баш ғилми хеҙмәткәре Ғүмәр Ишморатов II дәрәжә "Ватан алдындағы ҡаҙаныштары өсөн" ордены миҙалына, профессор, физика-математика фәндәре докторы, Р.Мәүлетов исемендәге Механика институты лабораторияһының баш ғилми хеҙмәткәре Владислав Шаһапов "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған фән эшмәкәре" тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды. Рәсәй Президенты Владимир Путин иғлан иткән Фән һәм технологиялар ун йыллығы ғалимдар, тикшеренеүселәр, юғары мәктәп уҡытыусыларының үҙ һәләттәрен үҫтереү, университет һәм академияларҙың ғилми коллективтары эшмәкәрлеген популярлаштырыу, йәштәргә йәлеп итеү өсөн киң мөмкинлектәр аса, тип билдәләне Радий Хәбиров.

# БЫНДАЙ МӘКТӘП КӘРӘК!

**Республика милләттәренең тыуған телдәренә нигеҙләнгән полилингваль мәктәптәр беренселәрҙән булып Башҡортостанда асылды. Әлеге ваҡытта республикала бындай мәғариф учреждениелары - 4-әү, унда балалар рус һәм инглиз телдәренән тыш, башҡорт һәм татар телдәрен дә ныҡлап өйрәнә. Өфөлә, Нефтекамала, Стәрлетамаҡта урынлашҡан был мәктәптәрҙә 4800 уҡыусы белем ала.**

Өфөнөң "Сағыу" микрорайонындағы 2-се "Смарт" Республика полилингваль күп профилле гимназия 2019 йылда асылғайны. Микрорайондың бөтөн балаларына ла өс тел өйрәнергә мөмкинлек тыуған. Уның директоры Наил Әминев әйтеүенсә, башҡорт, рус, инглиз телдәрен беренсе кластан өйрәнгән уҡыусылар лингвистика кластарында француз һәм немец телдәрен өҫтәмә рәүештә уҡый. Шулай уҡ ҡайһы бер фәндәр төрлө телдәрҙә бара, мәҫәлән, башланғыс кластарҙа предметтар башҡорт һәм рус телдәрендә булһа, өлкән кластар биологияны инглиз һәм рус телендә өйрәнә.

Ошо уҡ микрорайонда полилингваль балалар баҡсаһы ла бар. Быйылғы уҡыу йылында беренсе класҡа 216 бала килгән, башланғыс звенонЫң өлкәнерәк кластарына 150-200 уҡыусы белем ала. "Полилингваль мәктәптәрҙең төп бурыстарының береһе - ошо тел мөхитенә, ошо тел мәҙәниәтенә яҡынлыраҡ булыу. Әгәр ҙә балалар 5 тел өйрәнә икән, мәктәптә улар был халыҡтарҙың мәҙәниәте, йолалары менән дә танышырға тейеш", - ти Наил Әминев. Киләсәктә бындай белем усаҡтары Учалыла, Аҡъярҙа, Мишкәлә, Асҡынла, Үргә Тәтешле һәм Бишбүләктә асыласаҡ. Тимәк, белем биреү эшмәкәрлеге Башҡортостандың милли һәм этномәҙәни үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып ойоштороласаҡ.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔БР Башлығы Радий Хәбиров быйыл йәй Башҡортостан Яҙыусылар берлеге бинаһын йүнәтеү эштәрен башларға ҡушты. Дүшәмбе Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә ул шундай күрһәтмә бирҙе. Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, бөгөн тарихи бина ҡот осҡос хәлдә. Ул шулай уҡ бинаның 1984 йылда уҡ республиканың ул саҡтағы етәксеһе Миҙхәт Шакировтың ҡарары буйынса Яҙыусылар берлегенә тапшырылғанын билдәләне. Шул ваҡыттан бирле унда бер ҡасан да ремонт башҡарылмаған.

✔Киләһе йылдың яҙында Өфөлә Шаляпин музейын асыуҙары ихтимал. Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, музей өсөн Валериан Альбанов исемендәге ҡотопсолар музейы янындағы бина һайланған. "Быйыл беҙ мөһим юбилей - бөйөк рус йырсыһы Федор Шаляпиндың тыуыуына 150 йыл тулыуҙы билдәләйбеҙ. Уның ижад юлының байтаҡ өлөшө Өфөлә үткән. Һәр ваҡыт, ул бында башлаған", - тине Радий Хәбиров.

✔Башҡортостан фехтовальщиктары Ҡазанда Волга буйы федераль округы беренселегендә алтын миҙал яуланы. Республиканың Спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Элиза Нагаева, Арина Сәлихова, Дарья Сафина һәм Анастасия Старцева команда ярыштарында еңеүсе булды. Йәш спортсылар 2008-2010 йылғы йәш категорияһында сығыш яһаны. Татарстан спортсылары көмөш миҙал алды, Свердловск өлкәһе спортсылары иһә - өсөнсө урында.

✔Рәсәйҙең Спорт көрәше федерацияһын Ҡытайға Азия уйындарына саҡырғандар. Саҡырыуҙы ҡабул иттек, тип белдерҙе федерация президенты, олимпия чемпионы Михаил Мамиашвили. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 2023 йылдың 23 сентябренән 8 октябренә тиклем Ҡытай Халыҡ Республикаһының Ханчжоу ҡалаһында йәйге Азия уйындары ойоштоpола. Яңыраҡ Михаил Мамиашвили Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың саҡырыуы буйынса Өфөлә грекрим көрәше буйынса Рәсәй чемпионатын асыу тантанаһында ҡатнашты.

✔Республика пенсионерҙары "Башҡортостанда оҙон ғүмер" программаһы сиктәрендә Беларусь Республикаһына барып ҡайтырға мөмкин. Башҡортостан Башлығы оператив кәңәшмәлә бер аҙна эсендә ошо проектты бойомға ашырыу идеяларын әҙерләргә ҡушты.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ "Башҡортостандың баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2023" конкурсында "Айырым предметтарҙы тәрәнәйтеп өйрәнеүсе 114-се белем биреү үҙәге" педагогы Яҙгөл Сирбаева еңеүсе тип табылды.



АФАРИН!

# УҠЫТЫУСЫЛАР...

## еңеүгә көйләнгән



(Башы 1-се биттә).

Йылдан-йыл дәүләт теле булараҡ башҡорт теле дәрестәренең ҡыҫҡара барыуы тураһында күп һөйләнелә, шундай шарттарҙа йәштәр мәктәпкә эшкә киләме һуң, тигән һорау тыуыр ошо урында. Өфө ҡала хакимиәтенең Мәғариф идаралығындағы милли мәғариф бүлеге етәксеһе Сәриә Рәхмәтуллина әйтеүенсә, Өфө ҡалаһында йәш уҡытыусылар күп, ғөмүмән, баш ҡаланың башҡорт теле уҡытыусыларының уртаса йәше - 45 йәш. Бөгөнгө заман технологиялары әүҙем ҡулланылған ваҡытта тап йәш уҡытыусы балалар менән уртаҡ телде тиҙерәк таба ла инде. Етмәһә, ошондай бәйгеләр ҙә уларға тәжрибә тупларға булышлыҡ итә.

Билдәләнеүенсә, ярыш 5 этаптан торған, уҡытыусылар педагогик визитка менән сығыш яһаған, үҙенең эшендә әүҙем ҡулланған методик алымдары тураһында ла һөйләгән, дәрес тә күрһәткән, педагогик мәсьәләләр ҙә сискән. "Түңәрәк өҫтәл" тип аталған этапта уларҙы төрлө яҡлап асырға һәм ғәҙел баһаларға ярҙам итте. Баш ҡала шарттарында башҡорт телен уҡытыуға бәйле уңыштарҙы ла, проблемаларҙы ла уртаға һалып һөйләшеү бик йәнле килеп сыҡты һәм, йылдағыса, унда беҙҙең журналистар ҙа ҡатнашты. Конкурстың жюри рәйесе, "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналы баш мөхәррире Салауат Кәримов хаҡлы билдәләүенсә, бик яуаплы был этапта мәғариф, уҡыу-уҡытыу, белем биреүҙе ойоштороу, закондар буйынса уҡытыусыларҙың белеме асыҡлана, уларҙың фекерләү ҡеүәһен тойомларға мөмкинлек була. Сөнки алдағы этаптарҙа уҡытыусының ярҙамсылары булһа, түңәрәк өҫтәлгә алдан әҙерләнеп булмай. Ике сәғәт дауамында барған сарала аҙ һөйләп тә фекерле һәм белемле икәнен күрһәтә алыусылар байтаҡ булды. Бигерәк тә дәүләт теле булараҡ уҡытылған башҡорт теле методикаһы менән уҡытыусыларҙың ҡәнәғәт булыуҙарына шатландыҡ. "Әммә ни өсөн йәмғиәттә башҡорт теле дәрестәренә, методикаһына, дәреслектәренә ҡарата кире ҡараш формалашҡан, ни өсөн инде нисә йылдар бер үк проблемалар ҡалҡып сыға?" тип һорауыбыҙға ла, былар дөрөҫлөккә тап килмәй, тип яуапланы улар. Уҡытыусыларҙың фекеренсә, телде белеүселәр әҙерәк булыуы һәм ошо арҡала ата-әсәләрҙең балаһына өйгә эш эшләтерлек тә белеме булмауы быға бер сәбәбе булып тора. Тик нисек кенә булмаһын, башҡорт теле уҡытыусыларының да абруйы ҙур роль уйнай. Шулай уҡ уларҙың милли әҙәбиәткә, милли баҫмаларға яҡыныраҡ булыуын, жюри ағзаларының: "Һуңғы арала ниндәй яҙыусыны уҡының?"- тигән һорауына Дауыт Юлтыйҙан тыш, тағы ла бөгөнгө заман яҙыусыларын миҫал итеп килтереп яуаплауҙарын бик тә теләр инек. Ошоларҙың барыһынан да туҡыла бит ул туған тел уҡытыусыһының күңеле, ошоно тоя тәүҙә уҡыусы һәм уның ата-әсәһе.

Йомғаҡтар буйынса, "Башҡортостандың баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2023" конкурсында "Айырым предметтарҙы тәрәнәйтеп өйрәнеүсе 114-се белем биреү үҙәге" педагогы Яҙгөл Сирбаева еңеүсе тип табылды. Ул 17 йыл уҡыта һәм был һөнәри ярышта икенсе тапҡыр үҙ көсөн һынай. "2016 йылда иң яҡшы бишәү исемлегенә ингәйнем, бөгөн еңеү тәтене. Конкурс бик көсөргәнешле генә барҙы. Шулай ҙа коллегаларым менән замандан ҡалышмауыбыҙҙы, үҫешебеҙҙе күрһәтә алдыҡтыр, тим", - тине Яҙгөл Айрат ҡыҙы.

Баш ҡаланың рус теле уҡытыусылары араһында 45-се мәктәптән Эмиль Сәғитов еңеүсе булһа, быйыл тәүге тапҡыр ойошторолған "Танылыу" номинацияһында М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейының башҡорт теле уҡытыусыһы Альбина Бикташева менән 96-сы лицейҙың тарих һәм йәмғиәтте өйрәнеү уҡытыусыһы Дмитрий Мерклин "Бәйләнештә" селтәрендә иң күп тауыш йыйған. "Башҡортостандың баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы" конкурсында 93-сө физика-метематика лицейының немец теле уҡытыусыһы Алена Кнауб еңде. Ә бына А. Фәйзуллин исемендәге 39-сы гимназияның математика уҡытыусыһы Артем Баянов бөтә һынауҙарҙы лайыҡлы үтеп, был конкурстың абсолют еңеүсеһе тип танылды. Өфө намыҫын республика кимәлендәге һынауҙа яҡлау тап был ир уҡытыусы иңдәренә һалынды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баш ҡала педагогтарының һөнәри конкурстарында йылдан-йыл ир-егет уҡытыусылар йышыраҡ һәм һөҙөмтәлерәк ҡатнашыуын күреп-белеп торабыҙ. Тимәк, баш ҡала мәғариф системаһында уларға эш шарттары яйлап булһа ла яҡшыра, ылыҡтырғыс була бара. Быйылғы Педагог һәм остаз йылында быға айырыуса иғтибар бүленер, моғайын. Быны уҡытыусылар үҙҙәре лә түҙемһеҙлек менән көтә һәм тик ыңғай үҙгәрештәргә, үҫешкә, һөнәри үрҙәргә көйләнгәндәр.**

**Ләйсән ВӘЛИЕВА.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# БАЛА ТЫУҒАНДА...

**Былтыр республикала 28 260 ғаилә бала тыуғанда бер тапҡыр бирелә торған пособие алған, тип хәбәр иттеләр Социаль фондтың Башҡортостан буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтенән.** Бала тыуғанда пособие илдәге бөтә ғаиләләргә түләнергә тейеш, килеме һәм балалар һаны мөһим түгел. Аҡсаны эшләгән һәм эшләмәгән ата-әсәләр ҙә алырға мөмкин. Әйтәйек, эшләп йөрөгән ата-әсәгә пособие бала тыуыу тураһында ЗАГС реестры мәғлүмәттәре нигеҙендә автоматик рәүештә тәғәйенләнә. Эшләмәгән ата-әсәгә аҡса юллау өсөн Социаль фондтың клиент хеҙмәтенә йәки ошондай хеҙмәт күрһәткән күп функциялы үҙәккә ғариза бирергә кәрәк. Ғариза дәүләт хеҙмәттәре порталында ла ҡабул ителә. Ғәмәлдәге ҡағиҙәләргә ярашлы, пособиеға опекун, уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алыусы йәки баланы тәрбиәгә алған ата-әсә лә хоҡуҡлы. 2023 йылдың 1 февраленән бала тыуғанда бер тапҡыр бирелә торған пособиеның күләме 26 345 һум тәшкил итә.

✓ **1 февралдән Рәсәйҙә магазиндарҙа тәжрибә рәүешендә ҡулланыу ваҡыты сыҡҡан аҙыҡ-түлек һатыуға юл ҡуймаусы система индерелә башланы.** Бында һүҙ һөт ризыҡтарының айырым төрҙәре, шул иҫәптән балалар аҙығы, шешәләрҙәге эсәр һәм минераль һыу, һыра, аҙ алкоголле айырым эсемлектәр тураһында бара. Бынан тыш, инициатива әйләнешкә законһыҙ индерелгән тәмәке һәм никотинлы продукцияға ла (тартыу, сәйнәү, еҫкәү өсөн ҡулланылған тәмәке, кальян өсөн тәмәке булмаған тартыу ҡатнашмалары, электрон сигареттар) ҡағыла. Тәжрибә ирекле рәүештә үтә һәм 1 авгусҡа тиклем дауам итә.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың сәнәғәт, инновацион үҫеш, сауҙа, эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса комитеты аттракциондарҙың хәүефһеҙлеген арттырыуға ҡағылышлы закон проектын хупланы.** Документ ғинуар аҙағындағы пленар ултырышта тәүге уҡыуҙа ҡабул ителеүе мөмкин, тип хәбәр иттеләр республика Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәтенән. "Закон проектында юридик шәхестәрҙең һәм эшҡыуарҙарҙың аттракциондарҙың техник торошона һәм уларҙы файҙаланыуға мотлаҡ талаптарҙы үтәүен дәүләт күҙәтеүенә алырға тәҡдим ителә, - тип асыҡлыҡ индерҙе Башҡортостан парламенты рәйесе Константин Толкачев. - Аттракциондарҙың хәүефһеҙлеген арттырыуға йүнәлтелгән закон проектын Башҡортостандың Дәүләт техник күҙәтеү инспекцияһы мөрәжәғәте буйынса әҙерләнек".

✓ **Башҡортостандың бер нисә шифаханаһына махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яҡташтарыбыҙҙы дауалау өсөн республика ҡаҙнаһынан субсидия йүнәлтелә.** Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы ошондай субсидия алырға теләк белдергән шифахана-курорт учреждениеларын конкурс буйынса һайлап алыу һөҙөмтәләрен иғлан итте. Документҡа ярашлы, конкурсҡа 12 шифахана ғариза биргән, уларҙың барыһы ла хупланған. Махсус операцияла ҡатнашыусыларҙы дауалауға бюджеттан бүленгән субсидиялар алыусылар иҫәбендә "Асы", "Йәшел сауҡалыҡ", "Яҡтыкүл", "Янғантау", "Ҡарағай", "Красноусол", "Танып", "Йоматау", "Йәйғор" шифаханалары, "Ҡайынҡай" ял йорто һәм "Энергетик" дауалау-һауыҡтырыу үҙәге бар.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡан баҫымы

❖ Ҡан баҫымы күтәрелгәндә 1 лимон һығырға һәм 1 стакан керән, ярты стакан бал ҡушып бутарға. Дауаны ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә.

❖ Ҡан баҫымы күтәрелгәндә ябай слива бик ярҙам итә. Уның 3-4 бөртөк киптерелгән емешен 10 минут эҫе һыуҙа ебетергә. Тик ҡайнатмағыҙ һәм шәкәр ҡушмағыҙ. Шунан ҡара емештәрҙе ашап, һыуын эсеп ҡуйырға.

❖ Балан емешен бешекләргә, иҙергә һәм бал ҡушырға. Дауа еңелерәк һеңһен өсөн һыу ҡушып шыйыҡлатырға кәрәк. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ашарға.

❖ Йөрәк ауыртҡанда 2 ҡалаҡ балан емешен килелә төйөп, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм төрөп, 4 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда эсергә. Был рәүешле 3-4 аҙна дауаланырға кәрәк.

## Ҡаталаҡ

❖ Сөгөлдөрҙө бешереп ҡырғыс аша үткәрергә, көнбағыш майы ҡушырға һәм ас ҡарынға 100 грамм ашарға. Был рәүешле хәл яҡшырғансы туҡланырға. Шулай уҡ ҡаталаҡ булғанда күберәк шыйыҡса эсергә, йәшелсә һәм емеш-еләк ашарға кәңәш ителә. Бигерәк тә сөгөлдөр һәм кишер иҙмәһе файҙалы. Шулай уҡ һөт ризыҡтары, тары һәм ҡарабойҙай бутҡаһы ла килешә.

❖ 1 кг кишерҙе таҙартып, ваҡ ҡырғыстан үткәрергә. Шуға 3-4 ҡалаҡ бал ҡушырға. Шәкәрләнгән бал булһа ла ярай, ул барыбер кишерҙең һутына ирейәсәк. Яҡшы болғатып, 1 литрлыҡ банкаға күсереп һалырға һәм һыуытҡысҡа ҡуйырға. Кискеһен йоҡларҙан алда 2-3 ҡалағын ашарға, шунан артыҡ кәрәкмәй, юғиһә, төндә лә тороп йөрөргә тура килер. Бер нисә көндән үк файҙаһы беленер, шулай ҙа тағы бер тапҡыр ошо рәүешле дауа эшләп ашағыҙ. Бынан тыш, һәр иртәне һоло бутҡаһы менән башлау ашҡаҙанға файҙалы. Уға алма, күрәгә, йөҙөм ҡушып ашарға була.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



## БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

### Селтәр

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары тағып йөрөгән биҙәүестәрҙең бер төрөн белдереүсе "Селтәр" атамаһы республиканың Хәйбулла, Йылайыр, Баймаҡ, Күгәрсен, Күмертау, Бөрйән, Мәләүез, Бүздәк, Федоровка, Стәрлебаш, Әбйәлил, Ишембай, Стәрлетамаҡ һәм Ауырғазы райондарында теркәлгән. С.Н. Шитова ул таралған территорияны республиканың көньяҡ-көнсығышы менән бәйләп, түбәндәге үҙенсәлектәрен һыҙыҡ өҫтөнә ала: түште тулыһынса ҡаплап билдән аҫҡа 15-20 см тиклем төшөп тора. Өҫкө өлөшө түңәрәктәр, ярымтүңәрәктәр йәки ромбтар формаһында мәрйен менән һырыла. Шунда уҡ мәрүәт, аҡыҡ һәм көмөш тәңкәләр урын ала. Аҫҡы өлөшө иһә мәрйендән теҙелгән селтәрҙән тора. Уның өҫтөнән ике-өс сулпы беркетелә. Өҫкө һәм аҫҡы өлөштәре араһында бер нисә рәт тәңкәләр урын ала. Биҙәүесте тағыу өсөн өҫкө яғында таҫма тегелә. Шулай уҡ билдән быуыу өсөн дә таҫмаһы бар. Светлана Николаевнаның мәғлүмәттәрен тулыландырып, тағы шуларҙы әйтергә кәрәк: төрлө сығанаҡтарҙан күренеүенсә, ҡатын-ҡыҙҙар биҙәүестәрҙе эшләгәндә уның элементтарына исем ҡушҡан. Быға тиклем үҙенсәлекте "тамъян һаҡалы" миҫалында ҡарап киткәйнек. Был традицияның селтәрҙә лә асыҡ сағылыш табыуы күренә. Әбйәлил районы Археология һәм этнография музейында һаҡланған был селтәрҙең өлөштәренә тап шул атамалар бирелгән дә инде: 1. Биҙәнеү әйберен тағыу өсөн тегелгән таҫма - һапма. 2. Өс бағанаға теҙеп тегелгән тәңкәләр рәте - бүлмә. 3. Билдән быуыу өсөн тегелгән таҫма - билдек. 4. Биҙәнеү әйберенең өҫкө өлөшөн ситләтеп, ҡайып тегелгән тимер сылбыр - ҡыйыу. 5. Селтәрҙең өҫкө һәм аҫҡы яғын бүлеп торған тәңкәләр рәте - ҡор. 6. Мәрйендәрҙән теҙелгән аҫҡы өлөшө - селтәр. 7. Селтәрҙең нигеҙенән аҫҡа һалынып төшөп торған суҡтар - тояҡ. Әлбиттә, селтәр ҙур территорияла таралыу алғанға күрә, уның тәҙәлөшөн аңлатыусы атамаларҙың икенсе төрләрәк варианттары ла булыуы мөмкин. Үкенескә күрә, был өлкәгә ҡараған мәғлүмәттәр аҙ һаҡланған.




Азат ҒАРИПОВ,
этнограф.
"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре"
китабынан.

БАЛАЛАР ҠОРО

# ЕҢМӘЙЕНСӘ ТУҠТАМАЙБЫҘ -

## беҙҙең холҡобоҙ шулай!



(Башы 1-се биттә).

**➔ Буйың менән маҡтанма, аҡылың, эшең менән маҡтан, ти халыҡ. Әйҙәгеҙ, үҙегеҙҙең уңыштарығыҙ менән аҙыраҡ маҡтанып алығыҙ әле. Башҡа тиңдәштәрегеҙ ҙә уҡып, һеҙҙән өлгө алһын...**

**Ғ. Мөхәмәтйәнов:** Егет кеше уҡыуҙа ла алдынғы булырға, спортта ла һынатмаҫҡа тейеш, тип иҫәпләйем. Яҡшы уҡыйым, гимназияның "Гимназистар ҡоролтайы" советы президентымын. 11 йыл каратэ менән шөғөлләндем, Башҡортостан чемпионы исемен дә яулағанмын, әммә был спорт төрөн ҡалдырырға тура килде. Шашка буйынса шулай уҡ республика чемпионымын, Илгизә һеңлем иһә шашка буйынса Европа чемпионы. Баскетбол, волейбол миңә оҡшаған спорт төрҙәре. Музыка мәктәбенең баян класын ҡыҙыл дипломға тамамланым, төрлө конкурстарҙа ла ҡатнашам, 2022 йылда "Тамсылар" башҡорт йырын башҡарыусылар ҡала фестивалендә Гран-при яуланым. Шиғыр һөйләргә яратам, быйыл "Йөрәк һүҙе"ндә ҡатнашырға ниәтләп торам.

**Ш. Ҡарасов:** Мин дә мәктәп тормошонда әүҙем ҡатнашам, төрлө кимәлдәге конкурс, олимпиадаларҙа сығыш яһайым. Шулай уҡ баскетбол, волейбол, шашка спортын үҙ итәм. 2019 йылда Мәскәү халыҡ-ара мәғариф салонында гимназиябыҙҙа презентацияны мин үткәрҙем. Былтыр "Мостай уҡыуҙары" фәнни-ғәмәли конференцияһында Мостай Кәримдең әҫәрҙәрен рэп итеп уҡып, 1-се урын алдым. Гимназияның "Кендектәр" КВН командаһы капитанымын. Былтыр "Большая перемена" Бөтөн Рәсәй бәйгеһендә финалға үттем, "Больше, чем путешествие" проекты буйынса Саранск, Санкт-Петербург ҡалаһына сәйәхәт ҡылдым.

**Ш. Әхмәтшин:** Мин бында иң бәләкәйе, 7-се класта ғына уҡыйым, шиғыр һөйләргә яратам. Милли көрәш буйынса ярыштарҙа ҡатнашам, республика кимәлендә сығыш яһағаным булды, әле урындар яуларға таҫыллыҡ туплайым.

**Д. Ғәйнуллин:** Мин күп нәмә эшләй беләм. Төрлө спорт менән шөғөлләндем, тарихи һәм урта быуат көрәше, фехтование, грек-рим көрәше, милли көрәш. Ҡурай, гитара, ирен гармунында уйнай беләм. Тарих фәне миңә ныҡ ҡыҙыҡ, төрки телле халыҡтарҙың тарихын да ҡыҙыҡһынып өйрәнәм. Былтыр "Башҡорттар 1812 йылғы Ватан һуғышында" Бөтөн Рәсәй олимпиадаһында 1-се урын яуланым. Быйыл "Тархан" Бөтөн Рәсәй конкурсында 1-се этапты үттем, ошо арала икенсе этапҡа барам.

**➔ Байрам темаһына әйләнеп ҡайтҡанда, 23 февраль - ул барлыҡ ир-егеттәрҙең байрамыма, әллә хәрби хеҙмәткә мөнәсәбәте булғандарҙыҡымы?**

**Д. Ғәйнуллин:** Минеңсә, 23 февраль - үҙ ғүмерен хәрбиә хеҙмәткә бағышлағандарҙың байрамы. Сөнки улар үҙ ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйып, тыуған илде һаҡлайҙар. Әлеге мәлдә илдә барған ваҡиғалар менән был байрам бөтөнләй икенсе төҫ алды. Хәҙер күпселек ирҙәр ил һаҡында, шуға ла беҙ бында өйҙә йәки хатта сит илдә ултырғандарҙы был байрам менән ҡотлаһаҡ, уларға оҡшамаҫ ине.

Ә ир-егеттәр көнө, әйҙә, башҡа берәй көндә билдәләнһен. Әйткәндәй, ундай көн дә кәрәктер ул. Минең өсөн ир-егет - ул һәр ваҡыт үҙенең һүҙе, эше өсөн яуаплылыҡ тотҡан, уларҙың ниндәй һөҙөмтәгә килтереүен аңлаған кеше. Уның мотлаҡ амбициялары булһын. Маҡсат ҡуйһын, уға өлгәшһен, сөнки ир-егет үҙенең генә түгел, ғаиләһенең, йәмғиәттең яҡшы йәшәүе өсөн яуаплы. Малайҙарҙы ла атай тәрбиәләһен, улы атаһына ҡарап, киләсәктә ниндәй ир булырын һәм нимә эшләргә тейешлеген күреп үҫергә тейеш. Әле бына үҙен ҡулға ала алмаған, ихтыяр көсө булмаған ебек ирҙәр күп, былар атай тәрбиәһе булмауҙан килә, тип уйлайым. Бысаҡ та үткерләй алмаған ир буламы инде...

**Ш. Әхмәтшин:** Мин дә ир кеше көслө, ҡыйыу булырға тейеш тип уйлайым. Иң мөһиме, ул һәр ситуациянан сығыу юлын таба белһен. Әммә ғаиләлә атайҙың да, әсәйҙең дә роле бер. Бына атайыма эйәреп, фермаһында уға ярҙам итеп, уға ҡарап эшләргә өйрәнһәм, өйҙә һеңлем менән икебеҙҙең бүлмәләрҙе лә йыйыштырып ҡуйыуҙан тартынмайым, таҙалыҡ яратам.

**➔ Элек әрмелә хеҙмәт итмәгәндәргә ғәжәпләнеп, кәмһетеберәк ҡарай торғайнылар, хәҙер әрмегә барғандарға шулай ҡарайҙар. Һеҙ әрмелә хеҙмәт итергә әҙерһегеҙме?**

**Д. Ғәйнуллин:** Ирмен тигән һәр кеше хеҙмәт итергә тейеш. Әрме - ул дисциплина, бөтөнләй икенсе тормош һәм унда алған һөнәрҙәрҙең киләсәктә кәрәге теймәһә лә, әрме биргән һабаҡтарҙы башҡа бер ҡайҙа ла алып булмай, тип иҫәпләйем.

**Ғ. Мөхәмәтйәнов:** Ир-егеттең холҡон нығытыуҙа әрменең роле ҙур тип уйлайым һәм әрмелә хеҙмәт итергә теләр инем. Әммә минең өсөн бер йыл ваҡыт нығ йәл. Минең төп маҡсатым - донъяны яҡшы яҡҡа үҙгәртеү, шуға ла йыл буйына әлләә күпме нәмәләр эшләп булыр ине, тип уйланам.

**Ш. Ҡарасов:** Әле яңынан ике йыллыҡ әрме хеҙмәте тураһында һүҙ ҡуҙғата башланылар бит. Миңә үҙемдә бөтөнләй икенсе шарттарҙа һынап ҡарау, яңы яҡтан асыу ҡыҙыҡ булыр ине. Әрме рухын үҙем тойғом килә, шуға, бик теләп барыр инем. Ғөмүмән, әрме хеҙмәтенә ҡараш шулай уҡ ғаиләнән килә, ҡайһы берәүҙәр был хеҙмәттән бөтөнләй баш тарта, ундайҙар тураһында шаяртыу ҡатыш, әсәһе ебәрмәгән, тип әйтергә була. Ҡайһы бер ғаиләләрҙә, киреһенсә, хеҙмәт итеү мотлаҡ, тигән ҡараш йәшәй, ул ысынлап та егетлек күрһәткесе.

**Д. Ғәйнуллин:** Бер йыл ғына хеҙмәт иткәс, хәҙер һағынышып та өлгөрмәйҙәр, күрәһең, ҡайҙалыр барып ҡайтҡан һымаҡ ҡына. Элек берәй һалдат ҡайтһа, ниндәй байрам була торғайны. Әрменең абруйы ҡайта бара былай, ошоноһо мине нығ шатландыра. Ә бына борон башҡорттар 25-шәр йыллап әрме хеҙмәтендә йөрөгән.

**➔ Ысынлап та, башҡорттар яугир халыҡ, үҙегеҙ һиҙмәһәгеҙ ҙә, ҡан хәтере тигән нәмә бар, һеҙҙең һүҙҙәрегеҙҙән, теләктәрегеҙҙән, әйтәйек, уҡ атыу түңәрәге асылыуын көтөүегеҙҙән мин быны тойоп ултырам. Тағы ла нимәләр һеҙҙе рухлыраҡ итә?**

**Д. Ғәйнуллин:** Бөгөн, ысынлап та, уйын рәүешендә булһа ла, ошо уҡ атыу кеүек шөғөлдәрҙең тергеҙелеүе беҙҙе асылыбыҙға ҡайтара, тип уйлайым. Башҡорт ир-егетенең характерын "Ылаҡ" уйыны ҡалай аса - ул сәмле, таһыллы, көслө, ҡурҡыу белмәҫ, ат менән бер йәнгә әйләнеп, маҡсатына өлгәшә.

**Ғ. Мөхәмәтйәнов:** Башҡорттар яугир ғына түгел, хисле лә милләт, тәбиғәт балаһы. Быны мин баянда уйнай беләм. Тик был йәһәттән фекерем шундай: әгәр ҙә музыкант өйҙә бикләнеп кенә уйнап ултырһа, унан ниндәй ҡыуаныс булһын инде. Шуға ла баянды урамда уйнау дөрөҫөрәк, тип иҫәпләйем һәм мин гел генә уны гимназиябыҙ янындағы паркта уйнайым. Һәм кешеләр башҡорт сәнғәте менән таныштын тип, мотлаҡ башҡорт көйҙәрен уйнайым, Башҡорт сәхрәлә йырлап ятҡан тип кенә уйлау хата бит ул, беҙҙең профессиональ композиторҙарыбыҙ, профессиональ балериналарыбыҙ, профессиональ артистарыбыҙ булған, беҙ белемле, мәғрифәтле, мәҙәниәтле халыҡ. Һәр хәлдә, иң ҙур мәҙәниәт тип баһаланған сәнғәт төрҙәре башҡорт өсөн ят булмаған.

**Ш. Әхмәтшин:** Мин атайымдың олатайымдың ниндәй көслө, уҡымышлы булыуы, ниндәй ауыр замандарҙа ла бирешмәүе, киреһенсә, башҡаларға ярҙам итеүе тураһында һөйләүенән рухланам. Берәй байрамда милли көрәштә еңеп, үҙемә бүләк ителгән тәм-томдо башҡаларға таратһам да шатланам, олатайым минең менән ғорурлана алыр ине, тип уйлайым. Әйткәндәй, милли көрәш - ул бит башҡорттоң холҡона тап килеп кенә торған спорт төрө. Мин дзю-до менән шөғөлләнәм, унда аяҡтан тартып йығып та еңергә була. Милли көрәштә ҡулың, көсөң, аҡылың менән генә еңәһең. Ул - ҡатмарлыраҡ, әммә асығыраҡ, ғәҙелерәк.

**Д. Ғәйнуллин:** Шамил менән килешәм, көрәш беҙҙең халыҡтың булмышын асып бирә лә ҡуя. Унда башҡорттоң еңмәйенсә туҡтамай торған холҡо сағыла. Кем беренсе булып сигенә, артҡа бер аҙым яһай, кем ҡурҡа, шул еңелә.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Аңлағанһығыҙҙыр, был балалар күпте һәм, иң мөһиме, үҙҙәре өсөн нимә кәрәклеген белә. Бөгөндән маҡсат ҡуйып, бәләкәй аҙымдар менән булһа ла ошо хыялдарына яҡынайырға тырышып ятҡан мәлдәре менән дә бәхетле улар. Ир затынан булғас, әрмеһенә лә барып ҡайтырҙар, донъяны яҡшы яҡҡа үҙгәртергә лә тура килер үҙҙәренә - киләсәк улар ҡулында. Шағирә Гөлнара Хәлфетдинова әйтмешләй, намыҫтары аҡтан булһын да, ата-баба рухын тотоп, малай, егет, атай һәм олатай булғанда ла эйәрҙә ҡалһындар.**

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Өсөнсө бүлек. Иртә тимер эпохаһы



Бында ата-бабалар һәм бут культына бағышланған яңынан тереләүсе тәбиғәт байрамы - Науруз (Наурыз) кеүек иң ныҡ хөрмәт ителгән бөтөн халыҡ байрамдары уҙғарылған. Зороастризм дине үҙенсәлектәренең береһе сифатында һәр бер тәбиғи күренеште ҡурсалаусы баш илаһтың дөйөмләштерелгән кеше һыны (образы) йөҙөндә кәүҙәләндерелеүен атарға була. Быны, мәҫәлән, Урта Азия кешеләре Науруз байрамын ҡурсалаусыны йәш егет рәүешендә күҙаллаһа, бөтөн тереклек һәм ҡоштар донъяһын яҡлап-һаҡлап торусы затты боронғо төркиҙәрҙең эпик геройы Хуми итеп һүрәтләгән. Боронғо ирандарҙың мифологияһында уға "бай мал көтөүҙәре менән балҡып торған" Иима, ә башҡорттарҙа - Һөмәй (Һомай) тап килә. Тикшеренеүселәр әүәлерәк үк Хуми-Иима - Һөмәй мифик образдарының һәм уларҙың башҡа варианттарының бер үк дини ҡараштар нигеҙендә барлыҡҡа килеүе хаҡында уртаҡ фекергә килгән ине. Иҫкә алынған Науруз һәм Хуми эпик персонаждарының икеһе лә сак-массагет дәүерендәге Урта Азия халыҡтары хаҡындағы яҙма сығанаҡтарҙа теркәлеп ҡалған: улар борон-борондан башҡорттарға ла билдәле булған. Мәҫәлән, Һөмәй (Һомай) алиһәһе төбәктең мал аҫраусы ҡәүемдәре тормошонан алынған сюжеттарға бай булған "Урал батыр" героик эпосының һәм башҡа күп риүәйәттәрҙең төп персонаждарының береһе булып тора.

Әле бәйән ителгән мәғлүмәттәр Көньяҡ Уралдың дах-массагет, исседон ҡәбиләләренә һәм уларҙың күршеләренә зороастризм пантеонына ҡараған төп илаһтарҙың таныш булыуын раҫлай. "Урал батыр" эпосының һәм Урта Азияның боронғо халыҡтары мифологияһы сюжеттарындағы персонаждарҙың ғәжәп яҡын параллеллеге лә ошо хаҡта һөйләй. Идея-композиция яғынан башҡорттарҙың "Урал батыр" эпосы Азия һәм Европаның боронғо халыҡтарының мифологияһынан бер нисек тә айырылып тормай. Сюжет нигеҙендә тормоштоң барлыҡҡа килеүе һәм үҫешенең ике ҡапма-ҡаршы башланғыс көрәше берлегенән: изгелек һәм яуызлыҡтан, яҡтылыҡ һәм ҡараңғылыҡтан тороуы хаҡындағы дуалистик дини-фәлсәфәүи ҡараштар ята. Ошо тема башҡорт эпосында бер туған булған ике заттың - Урал һәм Шүлгәндең ҡапма-ҡаршылығы аша бирелә. Изге көстәр башында торған Урал, тере һыуҙы эҙләп табып, ерҙә үлемде еңеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Ошо һыуҙы эҙләп, донъя гиҙгән сағында яуызлыҡ эйәһе булған бер туғаны - Шүлгән менән бер нисә тапҡыр осраша. Һуңғыһы менән яуыз заттар яғынан кеше ашаусы Ҡатил батша, аждаһаларҙың ҡот осҡос батшаһы Ҡәһҡәһә һүрәтләнә. Улар бер нисә мәртәбә Урал батырҙы үлтерергә теләй - йә иләмһеҙ ҙур үгеҙҙе, йә күп башлы аждаһаны уға ҡаршы сығара. Әммә Урал батырҙы яҡлаусылар ҙа була. Уға Һомай - ҡояш ҡыҙы, ҡоштар һәм йәнлектәр алиһәһе ярҙамға килә. Ул Урал батырға ҡанатлы ат - Аҡбуҙатты бүләк итә, тере һыуҙы табырға булышлыҡ итә. Кешеләргә бәхет килтерергә теләп, ул тере һыуҙы барса тирә-яҡҡа бөркә, һәм ер сәскә атыусы йәшеллек менән ҡаплана. Урал батыр айырым кешеләрҙе түгел, ә тәбиғәтте, ерҙе үлемһеҙ итә. Ул үҙен дә үлемдән ҡурсалай алмай һәм Шүлгән менән көрәштә һәләк була, Урал батырҙың үлеменән һуң Уралда Һомай һәм уның улдары ҡала. Улар менән тауҙарға ҡоштар һәм йәнлектәр эйәләшә. Уралдың улдары булат ҡылыс менән тауҙарҙы яра һәм бынан тулы һыулы йылғалар - Яйыҡ, Ағиҙел, Нөгөш һәм Һаҡмар йылғалары ағып сыға.

Үрҙә күрһәтелгән персонаждарҙан Һарай һаҡлаусы - үгеҙ һәм йыландар батшаһы - аждаһа Ҡәһҡәһә образдарында Урта Азия һыҙаттары бар. Урта Азияның боронғо халыҡтары мифологияһында уларға Һарайҙы, йәғни власты һаҡлаусы шул уҡ үгеҙ һәм Даххака тура килә, уларға бер үк сифаттар хас. Персонаждарҙың идея йөкмәткеһенең тап килеүе һәм исемдәренең оҡшашлығы нигеҙендә "Урал батыр" эпосы персонажы Ҡәһҡәһәнең исеме Даххак исеменең башҡортса варианты булыуы хаҡында фараз итергә була; тикшеренеүсе С.П. Толстов фекеренсә, ул зороастр дине персонаждарының береһе булған Аж-Дахак исеменә барып тоташа. Эпоста аталып киткән, йәнлектәр, ҡоштар һәм йылан-аждаһалар менән бәйле персонаждар төбәктең иң боронғо халыҡтарының тотемистик ҡараштарын асыҡлау мөмкинлеген бирә. "Урал батыр" эпосының иртә тимер быуатындағы Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең идеологик ҡараштары хаҡында фекер туплау өсөн тарихи сығанаҡ булараҡ мөһим булыуы айҡанлы уның яҡынса ҡасаныраҡ ижад ителеүен билдәләү актуаль булып тора. Б.э. тиклем VI-I быуаттарҙа Урта Азия халыҡтары мифологияһы сюжеттары һәм персонаждары менән үрҙәрәк билдәләп кителгән параллелдәрҙән башҡа шул уҡ моменттар буйынса иртә урта быуаттарҙағы (VI-X бб.) Дала Евразияһы халыҡтарының эпик ҡомартҡылары менән киҫкен айырмалар булыуын мөһим критерий итеп ҡарау фарыз. Һуңғылары иртә феодал дәүләттәр һәм иртә ислам эпохаһында барлыҡҡа килгән дини-фәлсәфәүи ҡараштарҙың асыҡ сағылышы булып тора (Төрки ҡағанаты, иртә урта быуаттарҙағы Хорезм, Соғд һ.б.). Ошо ике ҡапма-ҡаршы булған аргумент "Урал батыр" эпосының б.э. VI быуатынан һуңыраҡ ижад ителмәүен, һәм, моғайын, дах-массагет һәм исседон ҡәбиләләре дәүерендә, йәғни иртә тимер быуатында уҡ өлгәрәп еткән рәүештә ҡулланыла башлауын раҫлау мөмкинлеген бирә.

Мифология, рухи мәҙәниәттең специфик өлкәһе булараҡ, күрше йәшәүсе халыҡтар тарафынан, мәҫәлән, техник ҡаҙаныштар кеүек, еңел генә үҙләштерелә алмай. Мифты ҡабул итеү һәм таратыу өсөн тейешле шарт - уны яңы быуындарға һәм яңы кешеләр төркөмдәренә тапшырыусы сифатында этностың үҙенең мотлаҡ ҡатнашыуы фарыз. Бынан ошондай һығымта яһарға була: б.э. тиклем V - I быуаттарҙан бирле (киңерәк алғанда, б.э. тиклем VI быуат - б.э. V быуаты арауығында) Көньяҡ Уралда "Урал батыр" эпосында сағылыш тапҡан дини-фәлсәфәүи һәм космогоник ҡараштарҙы тыуҙырыусы этнос йәшәгән. Ошо йәһәттән ул дәүерҙәге дах-массагет, исседон ҡәбиләләрен, боронғо башҡорт этносы формалашыуында мөһим урын биләп, уның иң боронғо компоненттарының береһе рәүешендә ҡарарға була.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*МУЗЕЙ ҠОМАРТҠЫҺЫ*

# ҠУЛЫМДА - ҠУШ БЕЛӘҘЕК...



**Һүрәттәге үҫемлек биҙәкле, ҡара ҡаптырмалы пластинкалы көмөш беләҙек Башҡортостандың Милли музейына 1985 йылда ҡабул ителгән һәм аҫыл металдар фондының иң ҡиммәтле экспонаттарының береһе һанала.**

Ул 1889 йылда Шишмә районы Уҙытамаҡ ауылында тыуып үҫкән Мөхәмәтшина Фатима Исхаҡ ҡыҙыныҡы. Улар ире Мөхәмәтшин Харис Зәкир улы менән ғүмер буйы үҙенең тыуған ауылында йәшәгән, 5 балаға ғүмер биреп тәрбиәләп үҫтергән. Уның беләҙегенең уртаһында йондоҙ һәм ярым ай төшөрөлгән, диаметры 6 сантимер, киңлеге 2 сантимер. Бөгөнгө көндә Башҡортостан Милли музейында 50-нән ашыу беләҙек һаҡлана.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

58-се гв. кавалерия полкының пулемет взводы командиры Петр Федотовҡа ла (Ростов өлкәһенең Сингиновский утарынан) Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Ул үҙенең взоды яугирҙары менән 29 сентябрҙә, Галки ауылына һөжүм иткән саҡта, тиңһеҙ батырлыҡ күрһәтә. Дошман пехотаһы контрһөжүмгә күтәрелә, уларҙың алдынан, туҡтауһыҙ ата-ата, танкылары ла килә. Шул мәлдә взводтың бер пулемет расчеты, снаряд шартлап, сафтан сыға. Гв. лейтенанты Петр Федотов, тиҙ арала пулеметын эләктереп алып, окоп төбөнә ята, немец танкыһы окоп өҫтөнән үтеп китә. Ҡыйыу командир арттан йүгерешеп килгән немец автоматсыларын пулемет уты менән ҡаршылай. Әммә яҡында ғына шартлаған икенсе бер снаряд уның пулеметын зарарлай, ә Федотов, автоматынан мәргән атып, дошман һалдаттарын ергә һырығырға мәжбүр итә. Ул үҙе лә яралана, патрондары ла бөтә. Окоптан атыу туҡталғас, немецтар яңынан атакаға ташлана. Алған яраларының ауыртыуын еңеп, батыр командир танк шартлата торған ике гранатаһын бер-бер артлы дошман өҫтөнә ырғыта. Иптәштәре уға ярҙамға килеп еткәндә гв. лейтенанты, иҫен юғалтып, окоп төбөндә ята. Һуғыштан иҫән-һау ҡайта, Мәскәү ҡалаһында йәшәй.

Нивки ауылын азат иткәндән һуң 62-се гв. атлы полкы Усохи һәм Галки ауылдары йүнәлешендә һөжүмен дауам итте. 29 сентябрҙә Усохи ауылы янындағы алышта ошо полктың гв. сержанты Миңдеғолов Тәфтизән Таһир улы иҫ киткес батырлыҡ өлгөһө күрһәтә. Ул Баймаҡ районының Күсей ауылында тыуып үҫкән. Тәфтизән Миңдеғолов дивизия ойошторола башлаған тәүге көндәрҙән хәрби хеҙмәттә була, Брянск һәм Көньяҡ-Көнбайыш фронттарында барған алыштырҙа үҙен батыр яугир итеп таныта. Ә 1943 йылдың 21 сентябрендә Чернигов өлкәһенең Черныш ауылы өсөн барған яуҙа ул 18 немец һалдатын юҡ итә. 29 сентябрҙә Усохи ауылы янында барған бәрелештә беҙҙең яугирҙарыбыҙҙы яҡын уҡ килеп еткән дошман танкыһы утҡа тота. Шул мәлдә миномет расчеты командиры, комсомолец Миңдеғолов, тиҙ генә автоматын һәм танкыға ҡаршы өс гранатаһын алып, яҡында үҫкән ҡыуаҡтар артынан ышыҡланып барып, немецтарҙың баш ҡалҡытырға ла ирек бирмәгән "тигр" танҡыһын юҡ итергә була. Әммә ул ағаслыҡта йәшеренеп тороп, беҙҙең эскадрондар өҫтөнә миналар яуҙырған дошмандың миномет батареяһы янына килеп сыға. Батыр башҡорт яугиры һис ҡаушап ҡалай, бер-бер артлы ике гранатаһын немец миномётсылары өҫтөнә ырғыта, 20-нән ашыу минометсыны сафтан сығара. Әммә дошман һалдаттарының ҙур ғына бер төркөмө Миңдеғоловты уратып ала. Батыр егет, автоматынан ут асып, тағы ла байтаҡ ҡына фашистты йығып һала. Тик дошман асҡан уттан ул үҙе лә һәләк була. Уға СССР Юғары Советы Президиумының 1944 йылдың 15 ғинуарындағы указы менән Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Баймаҡ ҡалаһының бер урамы уның исемен йөрөтә, Күсей ауылында Тәфтизән Миңдеғоловҡа бюст ҡуйылған.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

***✓ Беҙҙең тел Евразия халыҡтары араһындағы иң боронғо телдәрҙең береһе. Лексик яҡтан ҡарағанда ла телебеҙҙә ҡыпсаҡтан башлап, фарсыға тиклем әллә нисәмә төрлө компонент бар. Улар халҡыбыҙҙың бик боронғо икәнен дәлилләй.***

# ЯУГИР ХАЛЫҠТЫҢ үҙенең йәшәйеш

**Яңыраҡ бер ханымдың ауыҙынан шундай һүҙҙәр ишетергә тура килгәйне: "Ҡатын-ҡыҙ һәр йәһәттән әүҙемлек күрһәтеп, ирҙәрҙең позицияларын яулап бөткәс, беҙ көслө зат тормошта кәрәге ҡалмаған енескә әүерелде, тип яңылышҡанбыҙ икән. Украиналағы хәлдәр килеп тыуғас ҡына беҙ ир-аттың ни өсөн кәрәк булғанлығын аңланыҡ..." Ватанды һаҡлаусылар көнө алдынан беҙ "Башҡортостан хәрби хәрәкәт ветерандары союзы" БР төбәк йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Тимерйән Рәжәп улы РӘЖӘПОВ һәм Башҡортостан Миграция үҙәге дауаханаһы баш табибы Раян Нурулла улы МИҺРАНОВ менән осрашып, ир-ат тәрбиәһе, әрме хеҙмәте хаҡында әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Рәхимовты һуңғы юлға оҙатырға килгәндә башҡорт халҡының ватаныбыҙҙы яҡлау һәм һаҡлау буйынса тарихтағы ваҡиғаларға һәм хәҙерге заманда күрһәткән хәрби ҡаһарманлығына ҙур баһа бирҙе. Уның һүҙҙәре халҡыбыҙға бирелгән баһа ла булды, беҙҙең турала ысын һүҙҙе әйтте ул. Был һүҙҙәрҙе бар донъя ишетте. Һеҙ уның был баһаһын нисек ҡабул иттегеҙ?**

**Тимерйән Рәжәпов:** Был һүҙҙәр самолетҡа ултырыр алдынан әйтелһә лә һәм беҙҙең өсөн ҡапыл яңғыраған һымаҡ тойолһа ла, осраҡлы әйтелмәне улар. Рәсәй Президентының был осраҡта 1812 йылғы Ватан һуғышын, Бөйөк Ватан һуғышын, хәҙерге махсус хәрби операцияны миҫал итеп килтереүе бик урынлы яңғыраны. Беҙ былар хаҡында барыһын да беләбеҙ, әммә уларҙың ил башлығының ауыҙынан яңғырауы бөтөнләй икенсе мәсьәлә. Путиндың был һүҙҙәре, ысынлап та, беҙгә, башҡорттарға бирелгән хаҡ баһа булып яңғыраны. Бар донъя алдында ул тағы ла беҙҙең дәрәжәне күтәрҙе.

**Раян Миһранов:** Рәсәй Президентының юҡтан-барҙан бер һүҙҙе лә әйтмәгәнен яҡшы беләбеҙ. Һәр һүҙе уның әллә нисә тапҡыр уйланылып әйтелә. Икенсенән, ул ватан өсөн ауыр ваҡытта башҡорт ҡаһарманлығын миҫал итеп килтереп, бының менән күптәргә ишара ла яһаны. Өсөнсөнән, шундай ҡаһарман тарихы булған башҡорт халҡының үҙенә лә үҙ ҡәҙеребеҙҙе үҙебеҙ белер өсөн ишара булды. Әйтәйек, беҙ Наполеонға ҡаршы һуғышҡан башҡорт яугирҙарының исемдәрен яҡшы белһәк тә, граждандар һуғышы осоронда илебеҙ өсөн көрәшкән ата-бабаларыбыҙҙың исемлеген әле булһын тергеҙә алмайбыҙ. Тарихи арауыҡ бирерәк ятыуына ҡарамаҫтан, был осорҙоң ҡара таптары байтаҡ.

Беҙҙең ата-бабалар Рәсәйгә ҡушылып, оло ватаныбыҙҙы һаҡлап ҡалыр өсөн көрәшеп яңылышмағандыр тием. Сөнки ул саҡта Рәсәйҙе яҡлау һәм һаҡлау Башҡорт илен дә яҡлауға һәм һаҡлауға тиң булған. Рәсәй һәр заманда ла халыҡтар дуҫлығы һәм берҙәмлеге менән ныҡ булған. Шул ныҡлыҡҡа әле лә һынау килде.

**Билдәле тележурналист, тарихсы Салауат Хәмиҙуллин үҙенең киң билдәле "Тарихи мөхит" программаһында шундай фекер әйткәйне: "Яугир халыҡтың ғына тарихы бар..." Бының менән ул шуны аңлатырға теләй: яугир булмаған халыҡ элек йәшәмәгән, сөнки тик яугир булып ҡына улар һаҡлана алған, йә булмаһа, ул халыҡ һуңғы осорҙа ғына формалашҡан. Был фекергә һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек?**

**Тимерйән Рәжәпов:** Салауат бик дөрөҫ әйткән, тарих алдында беҙҙең оялыр бер генә мәлебеҙ ҙә юҡ. Әммә икенсе бер мөһим мәсьәлә: үҫеп килгән быуын, балаларыбыҙ шул тарихыбыҙҙы беләме-юҡмы? Белгән хәлдә лә, ниндәй кимәлдә белә? Икенсенән, беҙгә тарих һабаҡ алыр өсөн дә кәрәк.

**Раян Миһранов:** Тимерйән ағайҙың әйткәндәренә шуны өҫтәр инем: хәҙерге заманда ҡулына ҡорал тотоп һуғышып йөрөгән кеше генә яугир түгел. Сөнки был быуатта иң ҙур һуғыш мәғлүмәт яланында бара. Улай ғына ла түгел, хәҙерге тормош һәр халыҡтың булмышы, киләсәге йәһүд тип һаҡлап алып ҡалған. Йәһүҙи диненән алыҫлашҡан йәһүдтәр бер-ике быуын үтеүгә йәһүд булыуҙарынан туҡтай. Беҙҙе, асылда, тарихыбыҙ, милли рухыбыҙ, яугирлығыбыҙ һаҡлай, тибеҙ. Ата-бабаларының халҡыбыҙҙың киләсәге, хәҙерге көндәге үҙе өсөн йәнен аямай һуғышҡанын белгән башҡорт балаһы хатта туған телен белмәгән көйө лә үҙен киләсәктә башҡорт тип танырмы? Бөгөн туған телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу менән бер рәттән, ошо мәсьәлә лә беҙҙе борсорға тейештер тип уйлайым. Тарихты онотоуҙоң милләттең юғалыуына килтереү ихтималлығын да аңлау мөһим. Яңыраҡ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров "Бәйләнештә" селтәрендәге сәхифәһендә бер мәктәптәге осрашыуы хаҡында яҙғайны. Ул бала-

рата булған мөнәсәбәтен яҡшы аңлайһың. Ул саҡта беҙҙе әрмегә нисек оҙата, нисек ҡаршылай инеләр. Беҙ ул саҡта Совет Армияһында хеҙмәт итеүебеҙҙе оло ғорурлыҡ менән әйтә инек. Әрме хеҙмәтен үткәндәргә юғары уҡыу йортона уҡырға ингәндә лә өҫтөнлөк бирелде. Ул заманда армияға бармау өсөн ауырыуҙар уйлап сығарыу, башҡа һылтауҙар эҙләү егеттәрҙең уйында ла булманы. Беҙҙең Баймаҡ районы Буранбай, Сыңғыҙ, Таулыҡай ауылдарында икешәр-өсәр кеше генә әрмегә бармай ҡалғандыр ул саҡта. Хәтереңдәме, беҙ Ташкит башына автобусҡа сыға торғайныҡ. Автобус килмәһә, йә урын ҡалмаһа, военкомат саҡыртты, тип, Баймаҡҡа, Сибайға йәйәүләп атлай торғайныҡ. Әрмегә бармай, оятҡа ҡалмаҫ өсөн. Военкоматҡа ла ауылдан йәйәү барып, әрмегә китеүселәр булды.

Хәҙер иһә донъя ҡапма-ҡаршы яҡҡа үҙгәрҙе, йөҙ ҙә һикһән градусҡа боролдо. Хәҙер әрмегә бармаҫ өсөн ниндәй генә ауырыуҙар уйлап сығармайҙар. Ҡала урамдарында "Законлы юл менән хәрби билет алырға ярҙам итәм" тигән яҙыулы машиналар йөрөй

Билдәләрҙе, ҡиммәттәрҙе беҙ үҙебеҙ ҙә булдыра алабыҙ. Бына беҙ Өфөнән Баймаҡҡа ҡайтҡан саҡта Белорет районы территорияһын өс сәғәткә яҡын ваҡытта үтәбеҙ. Әммә юл буйына ошо районда тыуып үҫкән Советтар Союзы Геройының, исмаһам, һүрәте төшөрөлөп, исем-шәрифе яҙылған бер генә баннерҙы күргәнебеҙ бармы? Чечняла, мәҫәлән, юл ситтәрендә геройҙарының фотолары, исем-шәрифтәре яҙып ҡуйылған.

**Раян Миһранов:** Совет власы бөткәндә мин туғыҙынсы класта уҡый инем. Мәктәбебеҙҙә пионер ойошмаһының һуңғы дружина советы рәйесе булдым. Комсомолға инергә әҙерләнеп йөрөгәндә беҙгә комсомолдың бөтөүе хаҡында еткерҙеләр. Маркерҙарға килгәндә, совет кешеһенең әхлаҡ кодексы төп ҡиммәт булды. СССР тарҡалған осорҙа ла үҙенең ҡиммәттәре булды. Әлегә мәлдә иһә йәштәр менән эшләү насар ҡуйылған. Беҙ уларҙың нимә уйлағанын, нимә теләгәнен бөтөнләй белмәйбеҙ. Үҙебеҙ "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһына, ирҙәр ҡорона берегеп, бер-беребеҙгә ярҙам итергә тырыша-



ларҙан: "Үҙегеҙҙең районда Советтар Союзы Геройҙарынан кемдәрҙе беләһегеҙ?"- тип һораған. Берәүҙе лә атай алмағандар. Башҡортостандан ундай геройҙарҙан кемдәрҙе беләһегеҙ, тигән һорауға бер бала ғына тороп Муса Гәрәевтың фамилияһын атай алған. Ысынлап та, мәктәп балалары Боронғо Рим, Греция, Вавилон тарихын Рәсәй, Башҡортостан тарихына ҡарағанда яҡшыраҡ белә...

**Совет осоронда егет кеше мотлаҡ әрмелә булырға тейеш ине. Унда бармағандарға ҡыҙҙар**

хатта. Минеңсә, законлы юл менән хәрби билет алыуҙың бер генә юлы бар: ул да булһа, үҙ теләгең менән әрмегә барып, намыҫлы хеҙмәт итеп ҡайтыу. Ул осраҡта һиңә, ысынлап та, законлы рәүештә хәрби билет бирелә. Ошо көндәрҙә Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай ундай хеҙмәттәр күрһәткән ойошмаларҙы сикләү, уларға штрафтар һалыу тураһында закон проектына тәҡдим менән

быҙ, ә йәштәр үҙ ихтыярына ҡуйылған. Шуға күрә, Рәсәй кимәлендә йәштәр ойошмаһын булдырыу ихтыяжы күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә.

Беҙҙә әле ҡиммәттәр баҙар иҡтисадына көйләнгән. Хәҙер кемдә аҡса бар - шул батыр, уның һүҙе дөрөҫ. Әрмегә бармау мәсьәләһендә лә шул уҡ хәл. Кем әрмегә бармау шартын һатып ала икән, тимәк, батыр. Ә инде әрмегә барыусылар бөтөнләй икенсе төркөмдә, уларҙы хуплаған кешеләр әҙ. Мәктәпте бөтмәҫ борон машина йөрөтөүгә таныҡлыҡ һатып алып, дәрескә машина менән килде икән - ул текә, был уңышлы кеше маркеры.

***Әле иһә донъя ҡапма-ҡаршы яҡҡа үҙгәрҙе, йөҙ ҙә һикһән градусҡа боролдо. Хәҙер әрмегә бармаҫ өсөн ниндәй генә ауырыуҙар уйлап сығармайҙар. Әле әрмелә хеҙмәт итеү мөҙҙәтен тәүҙә йыл ярымға, артабан элекке кеүек ике йылға еткереү тураһында закон ҡабул ителә. Мин быға бик шатландым, сөнки бер йыл ғына хеҙмәт итеү бик аҙ. Махсус хәрби операцияға барыусылар араһында бер йыл әрме хеҙмәтен үтеүселәр был ваҡыт эсендә хатта автомат тотоп та ҡарамауҙары хаҡында әйтә.***

өсөн яу. Тел өлкәһен алайыҡ. Беҙҙең тел Евразия халыҡтары араһындағы иң боронғо телдәрҙең береһе. Лексик яҡтан ҡарағанда ла телебеҙҙә ҡыпсаҡтан башлап, фарсыға тиклем әллә нисәмә төрлө компонент бар. Улар халҡыбыҙҙың бик боронғо икәнен дәлилләй, сөнки шул телдәрҙә һөйләшкән халыҡтар, ҡәүемдәр менән башҡорттар тығыҙ аралашып йәшәгән. Башҡорт булып һаҡланыр өсөн халҡыбыҙ туҡтауһыҙ көрәшкән. Телебеҙ был ваҡытта үҙгәреш тә кисергән, әммә башҡорт башҡорт булып ҡалған. Мәҫәлән, йәһүдтәр хәҙерге заманда ниндәй генә телдәрҙә һөйләшмәй, уларҙың бик аҙы ғына ивритты белә. Әммә уларға айырым диндә булыуҙары ярҙам итә. Шуға улар үҙҙәрен

**икенсел ҡараштa булды. Хәҙер иһә кемдәр әрмегә бармай тороп ҡала ала, улар иғтибар үҙәгендә. Был хәл ниндәйҙер кимәлдә "Ватан һуғышы бәйете"ндәге ошо юлдарҙы хәтерләтә:**

**Һалдат итеп алдылар,**
**Билгә ҡайыш һалдылар.**
**Бай-бетсәнең балалары**
**Өйҙә тороп ҡалдылар.**

**Совет осоронда ысын ир-егеттән тәмәке, араҡы еҫе сығып торорға тейеш тигәнерәк тә ялған маркер йәшәне. Нисек уйлайһығыҙ: хәҙерге ҡыҙҙар ысын ир-егетте ниндәй билдәләренә ҡарап баһалай?**

**Тимерйән Рәжәпов:** Әхмәр ағай, һин үҙең дә Совет Армияһында хеҙмәт иткән кеше булараҡ, ул саҡта ҡыҙҙарҙың һалдаттарға ҡа-

сығыш яһаны. Бик ваҡытлы ҡарар.

Әле әрмелә хеҙмәт итеү мөҙҙәтен тәүҙә йыл ярымға, артабан элекке кеүек ике йылға еткереү тураһында закон ҡабул ителә. Мин быға бик шатландым, сөнки бер йыл ғына хеҙмәт итеү бик аҙ. Махсус хәрби операцияға барыусылар араһында бер йыл әрме хеҙмәтен үтеүселәр был ваҡыт эсендә хатта автомат тотоп та ҡарамауҙары хаҡында әйтә.

Ә ҡыҙҙарға килгәндә, уларҙың күбеһе хәҙер егеттәрҙе иң тәүҙә кейгән туфлийына, ҡулындағы смартфонына, йөрөгән машинаһына ҡарап баһалай. Мин бындай баһалау алымын ваҡытлыса күренеш тип иҫәпләйем. Бигерәк тә махсус хәрби операция барған ошондай ҡатмарлы заманда.

Ни өсөн беҙҙә суицид осраҡтары күп? Берҙән, йәмғиәт дини тәрбиә бирмәй. Сөнки дин юлына баҫҡан кеше шундуҡ ниндәйҙер секта вәкиле тип иҫәпләнә. Шуға күрә йәштәр үҙҙәренә ут яуҙырмаҫ өсөн диндән алыҫыраҡ торорға тырыша. Ҡиммәттәрҙе беҙ үҙебеҙ ғаиләлә тәрбиәләргә тейешбеҙ. Сөнки йәштәр хәҙерге донъяла нимә уңайлы, шул яҡшы тип аңлап өйрәнгән. Был хатта үҙ милләтеңде билдәләүгә лә ҡайтып ҡала. Халыҡ иҫәбен алған ваҡытта бер йәш кешенән ниндәй милләт вәкиле булыуын һорағандар икән, ул: "Ә нисек кәрәк?" - ти икән. Бында ҡулайлашыу килеп сыға. Ҡиммәттәрҙе, йәғни билдәләрҙе беҙ тәрбиәләргә бурыслыбыҙ. Совет осоронда күптәр үҙаллы фекер йөрөтөргә, ҡарар ҡабул итергә өйрәнмәгән. Күберәген район, республика етәкселәренән көтәбеҙ. Әйҙә, шулай итәйек, былай итәйек, тип күмәкләшеп кәңәшләшеп эшләргә онотҡанбыҙ. Шул

*✓ Афғанда күп тапҡырҙар иптәштәремдең һәләк булыуҙарын күреү ғүмерҙең фанилығын аңларға, ғүмерҙең ҡәҙерен белергә ярҙам иткәндер. Ҡайтҡас, иптәшем урынына мин һәләк булырға тейеш инем бит, тигән уйҙарға төшәһең.*



йолаларҙы тергеҙһәк, үҙ ҡиммәттәребеҙ барлыҡҡа киләсәк.

**Кемдәндер өҫтән, командирҙан көтөп ултырыу һалдатҡа хас. Был беҙҙең яугирлыҡтың кире һөҙөмтәһе түгелме икән?**

**Раян Миһранов:** Минеңсә, улай түгел. Яуҙа командирҙар стратегик ҡарар ҡабул итеү өсөн кәрәк. Һалдат дошманға атмаһа, үҙе һәләк була. Эргәһендәге яуҙашына дошманды ут менән ҡаплап ярҙам итмәһә, иң тәүҙә яуҙашын, шунан үҙен атасаҡтар.

Беҙҙең халыҡ инициативалы булған. Исмәғил Тасимовты ғына алайыҡ. Ул берәүҙән дә фарман көтөп ултырмаған. Үҙенең аҡсаһын һалып, тау эштәре буйынса уҡыу йорто асҡан. Килешеү буйынса унда илле башҡорт балаһы уҡырға тейеш булған. Тәүҙә был шарт үтәлгән, аҙаҡ онотҡандар, уныһы инде башҡа мәсьәлә. Элек барлыҡ мәсьәләләрҙе тәүҙә ырыу ҡоронда, аҙаҡ дөйөм халыҡ ҡоронда хәл иткәндәр. Бер ваҡытта ла өҫтән көтөп ултырмағандар.

Ә инде райондарҙа батырҙарҙы мәңгеләштереү мәсьәләһенә килгәндә, беҙ тыуған ауылыбыҙ Ма-

"черпак", "дед", "дембель" баҫҡыстарын үттек. Афғанстандағы бачалар (бала-сағалар) беҙҙең ниндәй баҫҡысҡа ҡарауыбыҙҙы төҫһынибыҙға ҡарап билдәләй инеләр хатта. Был үҙенә күрә әрме һынауын нисек үтеүеңде күрһәтә торған билдә-маркер.

Әрме күп кенә һабаҡ биргәндер тием. Афғанда күп тапҡырҙар иптәштәремдең һәләк булыуҙарын күреү ғүмерҙең фанилығын аңларға, ғүмерҙең ҡәҙерен белергә ярҙам иткәндер. Ҡайтҡас, шул-шул иптәшем урынына мин һәләк булырға тейеш инем бит, тигән уйҙарға ла төшәһең. Холҡомда ла үҙгәрештәр барлыҡҡа килде.

**Раян Миһранов:** Мин әрмегә университеттан һуң лейтенант званиеһында хәрби табип булып барҙым. Ғаиләбеҙҙә етенсе төпсөк бала булараҡ, атай-әсәй, өлкән туғандарым нимә әйтә, шуны тыңлап йөрөгән кеше инем. Интернат мәктәптә уҡыным, университетта уҡығанда йәштәр иттифағында йөрөнөм. Ә әрме иң тәүге сиратта миңә ҡыйыулыҡ бирҙе, үҙ-үҙемә ышанысты арттырҙы. "Бабайлыҡ" офицерҙар араһында ла булды. Беҙҙә һин әрмелә хеҙмәт итергә тейешһең, тип, бөтәһен дә бер тараҡ менән тарарға ярамайҙыр. Бөтә егеттәр ҙә әрмелә хеҙмәт итергә тейеш тә түгелдәр. Сөнки халыҡта "Инә һөтө менән инмәгән, тана һөтө менән инмәй" тигән мәҡәл бар. Психологик тикшереү үткәреү мөһим. Шуның өсөн дә кемдәрҙелер ашнаҡсы итеп ҡуялар, сөнки ундайҙар коллективта йәшәй алмай. Йәки булмаһа күҙлекле китап яратыусы "ботаник"тарҙы штаб тирәһенә алалар, һис юғы, хат ташыусы, мунса яғыусы йә киномеханик итеп ҡуялар. Ҡыҫҡаһы, һәр кем әрмелә хеҙмәт итмәһә лә, кәрәк саҡта үҙенең тыуған илен, тыуған ерен һаҡлар өсөн әрме әҙерлеге үтергә бурыслы.

**Ирҙәр ҡорон ойошторғанда уларҙың алдына маҡсатты дөрөҫ итеп ҡуйырға кәрәктер. Ир-ат, ғәҙәттә, үҙҙәренә ҡыҙыҡ йә кәрәк булған урынға ғына йыйыла. Шулай түгелме?**

**Тимерйән Рәжәпов:** Элек-электән ауылды тотоп торған аҡһаҡал булған. Аҡһаҡалдар ауыл халҡы менән етәкселек итеп кенә ҡалмаған, ирҙәрҙең дәрәжәһен һаҡ- булмайынса, бер нәмә лә эшләп булмай.

Беҙ Инйәрҙә 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан ҡатай ырыуы вәкилдәренә стела ҡуйҙыҡ. Дәүләт бында бер тин дә аҡса бүлмәне, үҙебеҙ йыйҙыҡ. Стәрлетамаҡ районының Айыусы ауылында ҡуйылған һәйкәлдән тыш, бындай стелалар бүтәнсә юҡ та шикелле. Үҙебеҙҙең геройҙарҙың исемдәрен беҙ трассаларға ҡуя алмайбыҙ, сөнки улар федераль ведомствоға ҡарай. Тыуған ауылыбыҙҙа турнир үткәрҙек. Шул саҡта юл сатына "Манышты. Турнир" тип яҙыр өсөн генә лә күп кәртәләр аша үтергә тура килде.

**Ир-ат тәрбиәләү халҡыбыҙҙа тәрбиәнең төп өлөшө һаналған. Ир-ат яуҙа, мал табыу юлында йөрөгәс, күберәк был ғәмәлде әсәйҙәр башҡарған. Һеҙ үҙегеҙ атайығыҙҙан ниндәй тәрбиә алдығыҙ, улдарығыҙҙы нисек тәрбиәләйһегеҙ?**

**Тимерйән Рәжәпов:** Беҙҙең ғаиләлә, мәҫәлән, атайыбыҙ ғүмерҙә лә беҙгә ҡысҡырып һүҙ әйткәне, әрләгәне булманы, ҡайыш тотоп та ярманы. Атайыбыҙ тырҙың барыһын да атайыбыҙ исеменән башҡарҙы. Улым да хәрби темаға арналған фестивалдәр үткәргәндә минең урынбаҫарым булырға теләге барлығын белдерә. Уны дөрөҫ юлда баралыр тип иҫәпләйем, сөнки командир юҡ саҡта уны урынбаҫары алмаштыра.

**Раян Миһранов:** Башҡорттарҙа балаларҙы атҡа ултырыр хәлгә еткәнсе ҡатын-ҡыҙ тәрбиәләй тигәнде яңыраҡ ҡайҙалыр уҡыным. Шунан һуң ғына ир балалар - атай, ҡыҙ балалар әсәй тәрбиәһенә күскән. Беҙҙә ғаиләлә әсәйебеҙ ҙә, атайыбыҙ ҙа тәрбиәләне. Улар беҙҙе үҙҙәренең өлгөһөндә тәрбиәләргә тырышты. Беҙҙең затта бер кем дә эсмәне, береһе лә тәмәке тартманы, ә шулай ҙа был насар ғәҙәттәрҙән киҫәтеү һәр ваҡыт яңғырап торҙо. Йәки беҙҙең затта бөтәһе лә юғары белемле, һин нишләп юғары белемле булырға тейеш түгелһең? Беҙ әле лә үҙебеҙҙең өлгөлә үҙ балаларыбыҙҙы тәрбиәләргә бурыслыбыҙ тип уйлайым.

Беҙҙең Маныштыла ир-егеттәр ҡорон ойоштороу буйынса байтаҡ саралар үтте. Күп кенә ир-егеттәр унда үҙҙәренең балала-

# ҒЫНА ТАРИХЫ ҺӘМ...

## ҡиммәттәре була

ныштыла ҙур обелиск ҡуйҙыҡ. Унда репрессияға дусар булыусыларҙың, һуғышҡа китеүселәрҙең, яу яланында һәләк булыусыларҙың, тыл ветерандарының исемлеген төҙөргә булғас, урындағы военкоматҡа мөрәжәғәт иттек. Унда исемлек булманы. Шунан һуң ғаилә архивтарынан, архивтарҙан, сайттарҙан эҙләнек. Унда ла бер үк фамилиялар төрлөсә яҙып бөтөлгәйне. Ауылдан күсеп китеүселәр, яугирҙарҙың ҡайһыларының туғандары ҡалмаған, уларҙы ла табырға тырыштыҡ. Әгәр ҙә быны дәүләттән көтһәк, килеп сыҡмаҫ ине. Был, ысынлап та, ҡиммәттәрҙе булдырыу йүнәлешендәге эш булды.

Хәҙерге йәштәрҙең байтағы, нисек булһа ла, үҙҙәренең исемдәрен яңғыратырға тырыша. Уның заманса атамаһы ла бар - хайп.

**Әрмелә хәрби устав, уставтан тыш мөнәсәбәттәр, казарма иерархияһы, ҡырҡ телдә аралашыусы ҡырҡ ата балалары менән һыйышып йәшәү шарттары үҫмергә, әйтәйек, ун-егерме йылда ала торған тормош һабағын ике йылда бирә. Йәғни, әрмелә булыусылар тиҙерәк ир ҡорона тулыша. Миңә, мәҫәлән, әрме күңел кирелегемде, тәкәбберлегемде еңергә, сама белергә өйрәтте. Ә бына һеҙҙе әрме нимәгә өйрәтте?**

**Тимерйән Рәжәпов:** Беҙ алдан уҡ әрмегә барырға тейешлегебеҙҙе белә инек. Учебкаға эләктем, хәрби әҙерлектең муштраһы тап унда икәнлеген хеҙмәт иткәндәр белә. Автомат та тоттоҡ, ҡар ҙа көрәнек, иҙән дә йыуҙыҡ. Тулы кимәлдә рәсми булмаған "дух", унда "пиджәк", "двугодичник" баҫҡыстары бар ине. Разведрота командиры менән эләгешеп китеп, мин өҫтән сыҡҡас, мине "пиджәк", "двугодичник" тип әйтмәй башланылар, "иптәш лейтенант", "Раян Нуруллович" йә "Раян" тип кенә өндәшә башланылар. Ошо ваҡиғанан һуң үҙемдән күп нәмә торғанын да аңлай башланым. Тағы ла үҙемдең нимә һәм нисек теләгәнемде ҡыҫҡа һәм тура итеп, кеше аңларлыҡ итеп еткереп әйтергә лә өйрәтте миңә әрме. Атайыбыҙ менән әсәйебеҙ уҡытыусы булараҡ, беҙгә өс кимәлдә маҡсат ҡорорға өйрәтә торғайны, йәғни ҡыҫҡа ваҡытҡа, урта ваҡытҡа һәм ғүмерлек маҡсат. Әрмелә мин уларҙың хаҡлығын аңланым. 25 йәшемдә 35-кәсә пландарым төҙөп ҡуйылғайны инде. Әрме артабанғы тормошомдоң пландарын кәштәләргә һалырға булышлыҡ итте. Унда байтаҡ аҡса туплау мөмкинлеге лә булды. Ҡайтҡас, өйләнгәндә, туйҙың ярты сығымын үҙем күтәрҙем.

Кеше нимәнелер тапһа, нимәнелер юғалта ла. Был - философия ҡануны. Мин әгәр ҙә әрмегә бармаған булһам, фән юлынан китеп, был өлкәлә лә үҙемде күрһәтә алыр инем. Йәштәрҙе лә, лау буйынса ла эш башҡарған. Хәҙер инде ауылдарҙа төрлө ирҙәр ҡорҙары ойоштороп ҡарайҙар, ысынлап та, дәррәү ҡуҙғалыш юҡ, бигерәк тә егеттәрҙе туплай алмайҙар. Әлбиттә, уларҙы туплау тигән маҡсат бар, әммә ул маҡсат һәр бер егеттең тормош маҡсаты менән тап килмәгәс, уларҙы трактор менән һөйрәтеп тә ир-аттар ҡорона алып килеп булмай.Ҡайҙандыр аҡса табып, күңелләнеп алырға тигән маҡсат менән йөрөүселәр хаҡында әйтеп тә тормайым инде.

**Раян Миһранов:** Ҡараһаң, ауылдарҙа күп кешеләр яныП-көйөп йөрөгән һымаҡтар, ә ысынында, бер нәмә лә эшләнмәгән һымаҡ. Үткән быуаттың туҡһанынсы йылдарында беҙ нисек итеп республикабыҙға иҡтисади үҙаллылыҡ яуларға өлгәшә алдыҡ? Сөнки ул ваҡытта көллө халыҡ бер маҡсат менән эш итте. Аҙаҡ башлыҡтар күбәйеп киткәйне, халыҡ яйлап кире тарҡала башланы. Бөгөн ир-аттың ғына өс ойошмаһы бар: ир-егеттәр ҡоро, аҡһаҡалдар ҡоро һәм атайҙар ҡоро. Иң ҡыҙығы: уларҙың өсөһөндә лә бер үк кешеләр йөрөй. Мин ир-егеттәр ҡоронда икәнмен, аҡһаҡалдар ҡорона инер өсөн һаҡал үҫтерергә, атайҙар ҡорона инер өсөн атай булырға тейешмен. Был хәл берҙәмлектең юҡлығын күрһәтә. Берҙәмлек тә булыр ине, бер-беребеҙгә ышаныс юҡ. Берҙәмлек һәм ышаныс холҡло ине, ғүмер баҡый тракторҙа эшләне. Беҙҙе күбеһенсә әсәйебеҙ тәрбиәләне. Атайым: "Ғәлиә, малайҙарынды ҡара", - тип әйтер ҙә эшкә китер ине. Ҡайыш та, прәник тә әсәйебеҙҙән эләкте. Өйҙәге барлыҡ эштәрҙе лә үҙебеҙ башҡарҙыҡ, шул уҡ ваҡытта йылғаға төшөп, сәкән һуғырға ла өлгөрҙөк. Хатта атайым менән нимәлер хаҡында һөйләшеп ултырғанды ла хәтерләмәйем. Әрмегә китер алдынан ғына: "Ярар, имен-аман барып ҡайт", - тип кенә фатиха бирҙе. Афғанстанда өс айлыҡ хәрби заданиела йөрөп, хатлаша алмаған мәлдәрҙә лә әсәйем мине эҙләп тапты. Военкоматҡа барып таптырған. Хәрби часты табып, командирыма сыҡҡандар.

Ни тиһәк тә, беҙҙе әсәй тәрбиәләне, кеше итте. Әммә ул былары алып килеп, турнирҙарҙа бергә йөрөнөләр. Ауылыбыҙҙың әүҙем ойоштороусыһы Руслан Асҡаров һөңгө ырғытыу этабында балалары менән бергә ҡатнашты. Ғайса Мәғәфуров һөңгөләр яһаны, малайы уға ярҙамлашты. Мылтыҡтан атыу этабында Айбулат Абдрахмановтың ҡустыһы эргәһендә ярҙамлашып йөрөнө. Вилдан ағай септә һуҡҡанда малайы септәне тотоп торҙо. Мәҫәлән, Асҡын боҙ мәмерйәһенә барғанда һәр атай кеше үҙенең малайын, ҡыҙын эйәртте. Бындай саҡтарҙа малайҙар аталарын өйҙән тыш шарттарҙа үҙҙәрен нисек тотоуҙарын күрә.

Балаларҙы дөрөҫ тәрбиәләр өсөн әсәһе тураһында - атаһы, атаһы тураһында әсәһе насар һүҙ әйтмәҫкә тейеш. Хатта ки әйтерлек сәбәптәре булған хәлдә лә. "Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә ҡатын, ҡатынды фәрештә иткән дә, фәхишә иткән дә ир" тип әйтелә халыҡта.



***Башҡорт булып һаҡланыр өсөн халҡыбыҙ туҡтауһыҙ көрәшкән. Телебеҙ был ваҡытта үҙгәреш тә кисергән, әммә башҡорт башҡорт булып ҡалған. Ата-бабаларының халҡыбыҙҙың киләсәге, хәҙерге көндәге үҙе өсөн йәнен аямай һуғышҡанын белгән башҡорт балаһы хатта туған телен белмәгән көйө лә үҙен киләсәктә башҡорт тип танырмы? Бөгөн туған телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу менән бер рәттән, ошо мәсьәлә лә беҙҙе борсорға тейештер тип уйлайым. Тарихты онотоуҙоң милләттең юғалыуына килтереү ихтималлығын да аңлау мөһим.***

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Был ике уҙамандың ир-егетлек тураһындағы әңгәмәһенән ниндәйҙер һабаҡ алғанһығыҙҙыр, үҙегеҙ тураһында ла ниндәйҙер һығымталар яһағанһығыҙҙыр, моғайын. "Башҡорт булып һаҡланыр өсөн халҡыбыҙ туҡтауһыҙ көрәшкән", тине Раян Нурулла улы. Эйе, был көрәш ҡулға ҡорал алып, ниндәйҙер яуҙарҙа һуғышып йөрөүҙе түгел, ә беҙҙең ҡәҙимге тормоштағы ғәмәлдәребеҙ - туған телебеҙҙе һаҡлау, мөхитебеҙҙең, йолаларыбыҙҙың, эшләгән эштәребеҙҙең үҙебеҙҙең асылыбыҙға тап килеүе өсөн көрәште аңлата булыр. Шул турала уйланһын ине һәр милләттәш.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Муйыл ағасы бында үҫмәй. Әрһеҙлеге менән иҫте китергән кесерткәнде лә таба алмаҫһың бында. Ә сәскәләре һуң? Беҙҙәгенең йөҙҙән бер өлөшө лә юҡ. Бында ерҙең һәр буш киҫәге, һәр осмото һөрөп сәселгән.***



**Уҡыусыларыбыҙ хәтерләйҙер: гәзитебеҙҙә бер нисә йыл дауамында бер нисә авторҙың бик үҙенсәлекле, шул уҡ ваҡытта ысын илһөйәрлек, ир-егетлек мәктәбе һабаҡтары тураһында һөйләгән Әрме яҙмалары баҫылып сыҡты. Әбйәлил районының Ҡырҙас ауылында йәшәгән яҙыусы авторыбыҙ Иҙрис (Ринат) НОҒОМАНОВ (2005 йыл, 30-41-се һандарҙа) башлап ебәргән әрме хәтирәләрен уҡыусыларыбыҙ бик йылы ҡабул иткәйне. Бигерәк тә әрме хеҙмәтен үтәп ҡайтыусы ир-ат автор яҙмаларына ҡарата битараф булмауын белдерҙе. Хатта бер ҡатын-ҡыҙ: "Әрме" яҙмаларын уҡығас, һалдат булғы килеп китте", - тип яҙҙы. Күптәр үҙҙәренең дә әрме хәтирәһен яҙыу теләген белдерҙе. Гәзитебеҙ биттәрендә ошондай яҙмаларҙың тағы ла дауам итеүен теләп, әрмелә хеҙмәт иткән ир-егет уҡыусыларыбыҙҙың матур иҫтәлектәрен, сәмен, рухын уятыу маҡсатында Иҙрис Ноғомановтың әрме яҙмаларынан өҙөктәр тәҡдим итергә булдыҡ.**



# ӘРМЕ ЯҘМАЛАРЫ

* * *

...Асҡарға Ҡырҡтыны артылып килеп төштөк. Саҡҡа өлгөрҙөк. Сафҡа теҙеп ҡуйҙылар ҙа, ҡулыбыҙға хәрби билет тотторҙолар. Ошо көндән башлап ике йыл буйы ул минең түш кеҫәлә, йөрәк янында йөрөйәсәк.

Һәммәбеҙ егерме биш егет булдыҡ. Барыбыҙ ҙа унынсыны бөткән. Барыбыҙҙың да өҫтөбөҙҙә иҫке кейем. Шулай кейенергә әрмене күреп ҡайтҡандар өйрәтте. Шулай ҙа минең баштағы күн кәпәс менән аяҡтағы кирза итектәр өр-яңы ине. Күмәк ғәм алдында мине иҫке кейемдә күргеһе килмәгәндер атайымдың. Саф алдына үҙебеҙҙең хәрби комиссар, майор Өмөтбаев сығып баҫты.

- Хөрмәтле яҡташтар! Һеҙ барығыҙ ҙа белемле, ошо критерийға ҡарап һайлап алындығыҙ һәм туп-тура Германияға барасаҡһығыҙ. Үҙегеҙҙе әҙәпле, лайыҡлы тотоғоҙ. Башҡорттоң, Башҡортостандың исемен һатып, әҙәм көлдөрөп йөрөмәгеҙ. Беҙ һеҙгә ышанып ҡалабыҙ, хәйерле юл, матур хеҙмәт һеҙгә!

Ғәжәп, майорҙың ошо ҡыҫҡа ғына телмәре барлыҡ болоҡһоуҙарҙы онотторҙо, дәрт-дарман өҫтәп ебәрҙе. Оҙатыусылар араһынан да сығыш яһаусылар табылды. Автобус килеп туҡтағас та хушлашыуҙар башланды. Кемдер дәртле итеп гармунда уйнап ебәрҙе. Икенсеһе таҡмаҡ әйтеп, тегене күтәреп алды. Ҡалғандар күмәкләшеп "Өс таған"ға төштө. Уларға буласаҡ һалдаттар ҙа ҡушылды. Илаусы-һыҡтаусы табылманы. Ғүмерлеккә хәтеремә уйылғаны - атайым менән әсәйемдең хәсрәт тулы йөҙө булды. Тәҙрә аша ҡул болғаным, яуап бирҙеләр.

* * *

...Нужа һурпаһы һемереп, ыҙа сигә торғас, ниһайәт, килеп еттек шикелле. "Витшток" полигоны тинеләр аяҡ баҫҡан еребеҙҙе. Был инде Германия биләмәләре. Оҙон сафҡа теҙеп ҡуйҙылар. "Дед" тип аталған, әүәл ишетеп кенә белгән "дәжжәлдәрҙе" тәүләп ошонда күрҙек. Кәпәстәрен ҡырын һалып, бил ҡайыштарын һәлберәтеп, теш араһынан сырт төкөрөп, әллә кем булып йөрөгән булалар. Йылтыр әйбергә ҡаныҡҡан ҡарғаларҙай, беҙҙең тирәлә ураңғылана улар. Күҙҙәре нәфселе, ҡараштары әле таушалып та өлгөрмәгән өр-яңы кәпәстәрҙе, шинелдәрҙе, ҡайыштарҙы ҡапшай. Хәлдәренән килһә, шундуҡ ябырылырҙар ине лә...

Ҡыйыуыраҡтары, яҡын килеп, ҡылдарыбыҙҙы тартып ҡарарға баҙнат итте шунда ла. Тиҙ генә һөйләшеп алдыҡ та, теге оңҡоттарға бер нәмәбеҙҙе лә бирмәҫкә ҡарар иттек. Ныҡ торабыҙ. Тегеләрҙең береһе, ахыры, түҙмәне, ҡапыл уҡталды ла, мин иҫемде йыйып өлгөргәнсе, әллә ни арала билемдәге ҡайышты ысҡындырып та алды. Йәһәтләп китмәксе итте. Әммә мин дә йүкәнән һуғылмаған: бесәй сослоғо менән хәләл әйберемдең бер осонан эләктереп алдым. Тартҡылаша башланыҡ, көрмәкләшеүгә күстек. Шунда ғына аңшайышып ҡалған иптәштәрем, йоҡоларынан уянып киткәндәй, һиҫкәнешеп, теге һөмһөҙҙө уратып, ҡыҫымға алды. Ер аҫтынан ҡалҡып сыҡҡандай, шул арала "стариктар" байтаҡ ҡына йыйылып китте. Эш етди төҫ алды, бына-бына һуғыш сығасаҡ. Әммә беҙ ҡаршы яҡҡа ҡарағанда һан яғынан артыҡ, шул сәбәпле, күпкә көслөрәк тә инек. Тегеләр асыҡтан-асыҡ алышҡа сығырға ҡыйманы. Тәүҙә юхалап-өгөтләп торҙолар ҙа, ахырҙа ҡапаҡлап-ҡурҡытып китеп барҙылар. Шулай һемәйттек яуыздарҙы. Күмәкләгән - яу ҡайтарған...

* * *

...Тиҙҙән бөтә батальон алдында тантаналы рәүештә ант ҡабул иттек. Ҡулыбыҙға тәүге тапҡыр ысын автомат тотҡан ошо көн хәтергә ныҡ уйылып ҡалды. Мин легендар 2-се гвардия танк армияһының 8-се бригадаһына ҡараған 34-се айырым көсәйтелгән батальонының 1-се ротаһында хеҙмәт итә башланым. Минең призывтан йәнә биш кеше бында эләкте. Башҡортостандан өсәү булһаҡ та, бер үҙем башҡорт. Ғөмүмән, бөтә ротала берҙән-бер башҡорт булдым.

Беҙҙең 3-сө взвод командиры лейтенант Кравченко тыныс, һапалы кеше. Ерле-юҡҡа асыуланып, көйөп бармай. Кемдең-кемлегенә ҡарамай, барыһы менән дә тигеҙ күреп, ғәҙел мөғәмәлә итә. Тырышҡанды, ынтылып ятҡанды күтәреп алырға әҙер тора. Мине, ярты йыл да хеҙмәт итмәгән "салаганы", "Совет Армияһы отличнигы" билдәһенә тиктәҫкә генә тәҡдим итмәгәндер ул. Шөкөр, политик әҙерлек буйынса ла, физик әҙерлек буйынса ла, ҡоралды өйрәнеүҙә лә, тактикала ла һуңғыларҙан түгелмен. Яңынан бер йылдан көс гимнастикаһы буйынса гарнизон беренселеген яулаясаҡмын.

Татлы телле, йомшаҡ йәйеп ҡатыға ултыртыусы капитан Ершов тәүге йылды рота менән командалыҡ ҡылды. Миңә нимә генә вәғәҙә итмәне: өйгә рәхмәт хаты ебәрҙе, ҡалаға алып барып фотоға төшөрҙө, кесе сержант дәрәжәһенә күтәреп, танк командиры итеп ҡуйҙы. Йәнәһе... Ошо вәғәҙәләренең береһен дә үтәмәне. Сәбәбе: мине рота кәнсәләренә писарь итеп ултыртмаҡсы итте. Баш тарттым. Ефрейтор Турчиндың ҡараңғы бүлмәлә нисек яфа сиккәнен беләм бит мин.

Старшинабыҙ өлкән сержант Хлыстов ротабыҙҙа иң кеше йәнле командир. Тап уның арҡаһында ҡәһәрле "дедовщинаны" тулы мәғәнәһендә үҙ елкәбеҙҙә татыуҙан ҡотолдоҡ, тиһәм дә хата булмаҫ. Ул яңы килгән йәш һалдаттар өсөн күкрәген ҡуйып, йәберләргә бирмәне. Армиябыҙҙа Хлыстов һымаҡтар күберәк булһа, "бабайсылыҡ" тигән ҡот осҡос күренеш тә булмаҫ ине, бәлки.

Танк командирым сержант Машаров та баштан уҡ мине үҙ итте. Торғаны бер әүлиә ул. Ике йыл хеҙмәт итеү осоронда мин уның ауыҙынан бер һүгенеү һүҙе ишетмәнем. Ғөмүмән, беҙҙең 306-сы танк экипажы ла, өсөнсө взвод та, рота ла ғәжәп татыу. Ошо арҡала "Отличная рота" исемен йөрөтәбеҙ. Әммә мискәләге балға ла бер ҡалаҡ дегет табыла. Наводчигыбыҙ ефрейтор Пашкевичты бөтә хеҙмәт осоронда барлығы ике тапҡыр ғына күреп ҡалдым. Ике йылды госпиталь койкаһында өйгәҙәп үткәрҙе ул. Ундайҙар һуңынан нимә тип өйҙәренә ҡайталарҙыр, белмәйем. Ҡайһы берәүҙәр бармаҡтарын да йәлләп тормай, ҡайһылары күҙенә тәмәке саңы һибә. Ҡайһылары тирләп-бешеп йөрөгәндән һуң, күрәләтә һалҡын бетон иҙәнгә ятып, үпкә сире йоҡтора.

Икенсерәк, аяныслыраҡ хәлдең шаһиты булырға тура килде миңә. Күрше 58-се батальондың бер һалдаты көтмәгәндә ҡаты ауырып, иң тәүҙә санчаҫка, аҙаҡ госпиталгә эләкте. Һалдаттың ашҡаҙанында язва таптылар. Күҙ йәштәренә мансылып, илап ҡайтып китергә мәжбүр булды ул. Мөҙҙәтенән алда ҡайтырға теләмәгәйне. Ошоноң менән үҙенә ҡарата йылы хистәр ҡалдырҙы.

Минең өсөн ҡәҙимге һалдат тормошо башланды. Сәғәт алтыла - подъем, иртәнге күнекмә, тикшереү. Иртәнге аштан һуң төрлө занятиелар, төштән һуң тактик күнегеүҙәр, ФИЗО, химик һаҡланыу буйынса уҡыуҙар, аҙнаһына бер ТСТ (танковая стрельба) була. Киске аштан һуң һалдатҡа иртәнге көнгә әҙерлек өсөн буш ваҡыт бирелә. Ошо мәл кем өҫ-башын ҡараштыра, кем хат яҙа, кем телевизор ҡарай, гәзит уҡый, футбол тибә. Иртәнге тикшереүгә кейемең ялтырап торорға тейеш. Һалдат тәүлектең ун алты сәғәтен аяҡ өҫтө үткәрә. Отбойҙан һуң барыһы ла ятырға тейеш. Йоҡлайһыңмы, уйланып ятаһыңмы - үҙеңдең эш.

* * *

...Ғәжәп тиҙ ышанып барыусан, хатта бер ҡатлыраҡ та икән немецтар. Йөҙҙән туҡһан бишенә ҡарата ошолай тип әйтергә була. Нужаны күп күргән, донъяның әсе-сөсөһөн байтаҡ татыған урыҫты, ғөмүмән, рәсәйлене, тиҙ генә алдай ҙа, юҡ-барға әүрәтә лә алмаҫһың. Ҡағылып-һуғылып үҫкән үгәй бала ише әрһеҙ рәсәйле. Һәр нәмәгә шикләнеп ҡарау уның ҡанына һеңешкән. Ул Сталин кеүек ҡаты ҡуллыларға күнеккән. Ә немец иркәләп-наҙлап үҫтерелгән яңғыҙ балалай. Ул саманан тыш етди, ҡайсаҡ шаярҡанды, юрый алдағанды аңлап етмәй. Тап шуның өсөн дә Гитлерға матур-матур һүҙҙәр һөйләп, яҡты киләсәккә өмөтләндереп, үҙенә ҡаратыу мөмкин булғандыр.

Эйе, иҫ инер-инмәҫ саҡтан һәр ҡараған кинобыҙ, һәр уҡыған китабыбыҙ һуғыш тураһында булды. Ә һуғыш ул - Германия, немец. Һәр хәлдә, беҙҙең быуын өсөн шулай. Күбебеҙҙең атайҙарын, олатайҙарын шул һуғыш йотто, немец һәләк итте. Сабый саҡтан аңға һеңгәнде тиҙ генә юйып ташлап та булмай...

Тәү ҡарауға был ер беҙҙекенән бер ние менән дә айырылмаған һымаҡ. Шул уҡ һауа, шул уҡ болоттар, тауҙар, урмандар, йәшел үлән, сәскәләр. Беҙҙәге ҡоштар, кейектәр бында ла бар. Әммә былар тәү ҡарашҡа ғына шулай. Күңел күҙенән үткәрә башлаһаң, айырма күк менән ер араһы. Герман еренең тауҙары күпкә тәпәшерәк, ҡайындарының аҡлығы беҙҙекенән ҡайтышыраҡ. Ялбыр ботаҡлы ҡарағайҙарҙы беҙҙеке менән сағыштырырлыҡ түгел. Имән-тирәктәре бейек булһа ла, беҙҙекенә етмәй. Үләне бейек, ҡуйы, әммә үтә йәшләүек, ыуыҙ, тапалып-йығылып бара.

Һаҡмар, Ҡыҙыл буйында муйыл ашап үҫкәнгәме, иң әүәл ҡараштарым менән ошо баш әйләндергес, иҫерткес, үҙенсәлекле еҫ бөркөп торор ағастарҙы эҙләнем. Таба алманым. Муйыл ағасы бында үҫмәй. Әрһеҙлеге менән иҫте китергән кесерткәнде лә таба алмаҫһың бында. Ә сәскәләре һуң? Беҙҙәгенең йөҙҙән бер өлөшө лә юҡ. Бында ерҙең һәр буш киҫәге, һәр осмото һөрөп сәселгән. Уның ҡарауы, баҡсаларҙа кеше ҡулы менән үҫтерелгән сәскәләр күп. Тик яҙ хәбәрсеһе умырзаяға, урман хушбуйы - кәкүк ҡатаһына, витамин ояһы - кәзә һаҡалына, бәпембәләргә, болон сәскәләренә, туғай гөлдәренә етә буламы һуң?

Беҙҙә осраған бәшмәктәрҙең күпселеге бында ла бар. Шулай уҡ сәтләүек ағасы, алмағас, груша, һары сейә, ҡара көртмәле, гөлйемеш ҡыуаҡлыҡтары һәм башҡа эреле-ваҡлы, әскелтем-сөскөлтөм емеш биреүсе үҫемлектәр менән донъя тулған. Тәү башта уҡ мине һоҡландырғаны, иҫте алғаны өйҙәр, кәртәҡура, бигерәк тә ҡәберлектәр тирәләй ултыртылып, дүрткелләп киҫелеп, һылап-һыйпап үҫтерелгән акация, әлморон һәм башҡа ҡыуаҡлыҡтар булды. Улар үҙҙәре үк энәле тере кәртә. Тығыҙ итеп ултыртылған ҡыуаҡтар араһынан ҡуян да үтеп инә алмаҫ. Ҡуян тигәндән, ул ҡылый күҙ, шеш ҡолаҡ бында юҡ иҫәбендә. Һирәк-һаяҡ ҡына күҙгә салынып ҡалғылай. Уның ҡарауы, ҡырағай кролик көтөүе менән йөрөй. Иң ғәжәбе шул - уларға иғтибар итеүсе лә юҡ. Ҡоралай, ҡабан, марал ише тояҡлылар ауылдар янында терәлеп үк йөрөй, хатта гарнизонға килеп ингеләй. Бүреләрҙең ни икәнен дә белмәйҙәр. Һунар ҙа ҡәтғи тыйылған. Беҙҙең ауыл урамдарында эттәр нисек йөрөһә, бында ерән тейендәр шундай иркенлектә.

***✓ Йәш ҡыҙҙарға еткерер һүҙем шул: әрмеләргә киткән егетегеҙҙе ышандырып, көтәм, ҡайт, тип шәмәреп ҡалғанһығыҙ икән - көтөгөҙ. Яҙмыш ҡосағына япа-яңғыҙын ташламағыҙ һалдатты. Көтә алмаһағыҙ - вәғәҙә итмәгеҙ.***



Диңгеҙ өҫтәрендә, тыныс ҡултыҡтарҙа ҡаҙ-өйрәктәр болот булып осоп йөрөй. Бер һүҙ менән әйткәндә, кейек, ҡош-ҡорт өсөн хөрриәт бында. Ике йыл эсендә бер тапҡыр ғына браконьерҙарҙы күрҙем. Улары ла карабин тотҡан совет офицерҙары ине.

Урындағы халыҡтың иғтибарға, хөрмәткә лайыҡ сифаттары күп. Шуларҙың күҙгә ныҡ ташланғаны: таҙалыҡҡа, бөхтәлеккә, теүәллеккә даими ынтылыш, уғрылыҡты күрә алмау. Яңылыш кикереп ебәреү немец өсөн хурлыҡ, үлемгә тиң. Шул уҡ ваҡытта күмәк кеше араһында "һауаны боҙоу" уларға бер ни тормай, әҙәпһеҙлеккә һаналмай. Урам уртаһында ҡараусыһыҙ ҡалдырылған сумаҙан, башҡа әйбер - ғәҙәти күренеш.

Ике-өс өйҙән генә торған, һәр береһенә айырым асфальт юл үткән ауылдарҙа халыҡтан һөт йыйыу өсөн феләгеләр махсус эстакадаларға ҡуйылған. Һәр кем килтергән һөтөн үҙе үлсәп, шуларға ауҙара, күләмен шунда ятҡан журналға теркәп китә. Арттырып яҙыу, һыу өҫтәү берәүҙең дә башына ла инеп сыҡмай. Беҙҙә булһа, иртән тороуға, һөтөн түгел, феләген дә таба алмаҫ инек, шөт.

Кеше ихлас бында, эскерһеҙ. Юл ситендә үҫкән ағастан өҙөп, һары сейә ашап торғанбыҙҙа оло ғына немец, ҡулындағы таяғын болғай-болғай, беҙгә ҡысҡырып килә башланы. Уғрылыҡта, һөмһөҙлектә ғәйепләргә итә был Гитлер тоҡомо, тип хафаға ҡалдыҡ башта. Бабай килеп етте лә, юлға яҡын үҫкәнен ашарға ярамағанлығын аңлатты, үҙенең баҡсаһына инеп һыйланырға саҡырҙы. Бына һиңә Гитлер тоҡомо!

Пунктуаль немец ашау яғынан да теүәл. Әҙләп-әҙләп көнөнә алты тапҡыр тамаҡ туйҙыра ул. Иртәнге аш сәғәт етелә, 9-10 тирәһендә еңелсә ҡапҡылап ала. Һәр ауылда тиерлек сирена ҡуйып бөтөлгән. Ул көндөҙгө бер тулыуға әсе тауыш менән төш мәле еткәнен хәбәр итә. Ошо саҡ ҡаҙаҡ ҡағыр өсөн сүкешен күтәргән немец, был эшен кисектереп, төшкө ашҡа тотонор. Үҙ һаулығын шулай ҡайғырта камрад. Киске аш теүәл сәғәт киске һигеҙҙә. Уға тиклем эш араһында йәнә ике тапҡыр тамаҡ ялғап өлгөрә немец. Ашағандары күберәген ҡатыҡ менән арыш икмәге, өтөлгән картуф менән сосиска. Эсемлектәрҙән "Бавария" һыраһына өҫтөнлөк бирелә. Химик буяуҙар ҡушылмаған лимонадты ла яраталар.

Немецтың тәмәкеһе - торғаны ҡыу үлән. Ни ҡатылығы, ни тәме, ни еҫе юҡ. Үҙҙәренең фильтрлы сигареттарын тикмәгә генә беҙҙең тәмәкеләргә алмаштырып тартмайҙар. Шулай уҡ шнапстарына ҡарағанда урыҫ араҡыһын яҡыныраҡ күрәләр. Эсеүҙәре лә шартлы ғына. Рюмкалары уймаҡтан артыҡ түгел. Иҫереп, болғанлап йөрөгән кешене бында күрмәҫһең.

Беренсе тапҡыр ҡалаға сыҡҡандағы тәьҫораттар хәтергә уйылып ҡалған. Йәйге эҫе көн ине. Урамдар самаһыҙ тар, ныҡ ҡыҫып торған купальниктар, күкрәксендәр кейгән ҡыҙ-ҡатын менән тулы. Ир-аттар шортикта. Әбей-бабайҙар ҙа бында өйҙәрендә бикләнеп ултырырға яратмай. 80-90 йәшлегенә ҡәҙәр велосипедта елдерә. Бер ауыҙ менән ҡәберҙә булғандар велосипедта елдереп барһын әле. Матур ғына итеп биҙәлгән, төрлө-төрлө уттары балҡылдап янып торған гаштетҡа инеп барабыҙ бер. Ҡайһыбыҙҙыр ишек төбөнә тартылып бөтмәгән тәмәкеһен ырғытты. Уның юлына 70 йәштәр тирәһендәге ханым арҡыры төштө. Ике ҡулына ла ауыр сеткалар тотҡан ҡатынҡай бер быҫҡып янған төпсөккә, бер егеткә ҡарап ҡатып ҡалды. Тегеһе урап үтмәксе иткәйне, ҡаршыһына баҫа һалды. Шулай бер нисә тапҡыр ҡабатланды. Тәмәкесегә төтәп ятҡан төпсөгөн күтәреп, йәнәшәлә торған урнаға ырғытыуҙан башҡа сара ҡалманы. Бер һүҙ өндәшмәй, барыбыҙға ла оло һабаҡ бирҙе немец әбейе.

* * *

Хеҙмәтенең һуңғы йылында ғәжәп хәйләләргә өйрәнеп, мутлашырға оҫтарып, һәр эшкә маһирланып ала һалдат. Шул мутлыҡтың, хәйләнең береһе - итек алмаштырыу. Сит илдә хеҙмәт итеүселәргә бирелә торған итектәр ауыр, ялҡыта. Ә немец һалдаттарының кирза итеге еңел дә, уңайлы ла. Складта тулып ята ундай итектәр, әммә форманы боҙорға ярамай, тип һәр кемгә тоттора һалып бармайҙар.

Нәмә ҡәҙерен белеп үҫкәнлектән, үҙем кейемде ифрат һаҡсыл кейәм. Тәүге йылдан һуң алмаштырылған итектәрем шул көйө тиерлек ине. Әле лә минең менән бергә хеҙмәткә алынғандар, йәғни "ҡарттар" төрлө һылтау табып, иҫке итектәрен ҡыҫҡа ҡуныслы немецтыҡына алышып бөттө. Ә мин һаман да шул яловыйҙы һөйрәп йөрөйөм. "Итектәрең бөп-бөтөн, дембелгәсә етәсәк", тип әйтә лә ҡуя прапорщик, был турала һүҙ ҡуҙғатһаң. Бер кис ултырып, йәл булһа ла, бергә утты-һыуҙы кискән, еҙ торбалар аша бергә үткән ҡәҙерле итектәремдең табанын көс менән айырып, "тештәрен" йәмһеҙ итеп ыржайтып ҡуйҙым.

Иртәгеһенә иртә менән кейем складына барып, уның мөдиренә мөрәжәғәт иттем. Ул табаны бер-ике сөйҙә генә эленеп торған итектәремде күреп, өр-яңы итектәр тоттторҙо. Прапорщик киске тикшереү ваҡытында яңы итектәремде шәйләп ҡалды.

\- Быларҙы ҡайҙан алдың? - тип һораны ул ғәжәпләнеп.

\- Складтан...

\- Кем бирҙе?

\- Мөдир. Прапорщик Зайцев ҡушты, тине.

Ул йыбанмаған, барып белешкән.

\- Ну и хитрец же ты, Нугманов! - тип көлдө ул аҙаҡ. - А за порчу государственного имущества я тебя накажу, - тип тә иҫкәртте. Ҡапағы һүҙҙә килеш ҡалды. Ә мин иһә дембелгәсә еңел итектәр кейеп, рәхәтләнеп йөрөнөм. Башҡалар ыңғайына.

* * *

...Һау кешегә нимә, йыл ярым ваҡыт күҙ асып йомған арала тиерлек артта ҡалды. Беҙ ҙә ҡарт һалдатҡа әйләнеп, рота көнитмеше теҙгенен ҡулға алдыҡ. Нисек кенә тырышһам да, ҡыҙыма ебәрерлек фото юҡ ине. Рота командиры итеп Боюнов ҡуйылғас, ул был хаҡта ишетергә лә теләмәне. Ул беҙгә килер алдынан подвалдағы "фотоателье" япып китте. Ательеның ишегенә ат башындай йоҙаҡ элдертте Буйный. Беҙҙең һорауҙарҙы, үтенеп-ялбарыуҙарҙы ишетергә лә теләмәне. Ә ҡыҙ һаман көтә...

Дембелгә ике ай ҡалып, мажаралар менән тулы Нейбранденбургта йөрөп ятҡанда, ҡыҙымдан хат килеп төштө. "Ике йыл буйына мине алдап йөрөттөң, бер фото ла ебәрмәнең. Башҡа ҡыҙҙар егеттәренән матур-матур кәртешкәләр алып һөйөнгәндә, миңә уңайһыҙ. Һин мине яратмайһың! Был хаҡта әйтә алмаһаң, үҙем әйтәм. Ошо хат һиңә һуңғыһы булыр, яуап яҙып аҙапланмаһаң да була. Хуш!"

Шундай йөкмәткеле ине һөйгәнемдең һуңғы хаты. Күңелем ҡырылды, хәтерем ҡалды, төшөнкөлөккә бирелдем. Эскерһеҙ мөхәббәтеңде, ҡайнар һөйөүеңде ус аяһындай ҡағыҙ киҫәгенә тиңләһендәр, ҡатырға остоғона алыштырһындар әле. Ҡалмаҫ ерҙән ҡалыр хәтерең. Күп уйлап тормаҫтан, ҡыҙыулыҡ менән яуап яҙып ебәрҙем: "Ярай, йәнкиҫәгем, ҡағыҙға төшөрөлгән йәнһеҙ һүрәт минән ҡәҙерлерәк икән, артабан һөйләшеп торорға ла түгел, барыһы ла аңлашыла, һүҙһеҙ ҙә. Йәл, ҡыҫҡа ғүмерле булды мөхәббәтебеҙ. Ҡайтҡас, фото урынына үҙемә туйғансы ҡарар инең дә бит. Бәлки фото - һылтау ғыналыр, уныһы миңә, әлбиттә, ҡараңғы. Әгәр шулай икән, тураһын әйтһәң дә, үпкәләмәҫ инем. Һөймәгәнгә - һөйкәлмә, тиҙәр. Һинең яҡтан һөйөү булмаған, тимәк. Ваҡытлыса мауығыу, ялтырауыҡ һүҙҙәр, буш вәғәҙәләр генә булған. Үкенес. Шулай ҙа ике йыл ағышында йылы хаттар яҙып, ауыр мәлдәрҙә терәк-таяу булып, рухымды күтәреп, киләсәккә өмөтләндереп торғаның өсөн һиңә рәхмәтлемен. Тиңһенмәүең генә йәнде әрнетә. Ярай, тиңеңде тап, хуш! Бәхил бул, бәхетле бул!"

Бына шулай итеп һөйгән кешемде юғалттым. Белмәйем, әлеге хатты ул алып уҡынымы, уҡыһа, ниндәйерәк хис-тойғолар кисергәндер? Тик шуныһын ғына әйтә алам: "фото һылтауына" ҡағылышлы фаразым дөрөҫкә сыҡты. "Көтөрмөн, ҡайт!" тип ҡалған ҡыҙҙың башын инде күптән бирле бер түрә йораты әйләндергән икән. Миңә һуңғы һалдат хаты һалған мәлдә үк кейәүгә сыҡҡан булған ул. Ярай, көтмәне ти мине, икенсене һайланы, иш итте. Тик бәхетлеме икән?

Бәхет төшөнсәһе шартлы нәмә. Берәү һөйгәне менән тиң йәшәп бәхетле булһа, икенсегә - тоҡ тулы аҡса, өсөнсөгә - дәрәжә, биләгән урын бәхет килтерә. Һәр хәлдә, һуңғылары шулай уйлай. Бәлки, мине ташлаған ҡыҙ ҙа шулар ҡатарындалыр, бәлки, юҡтыр. Нисек кенә булмаһын, Герман еренән һағыныу хаттары яҙып ятҡан һалдатты (фотоһы булмағанлыҡтан, күҙ алдына килтерә алмаһа ла) төштәрендә күреп-һаташып, бер тапҡыр ғына һиҫкәнеп уянмағандыр. Әле килеп, ваҡыт үтеүҙән һарғайып-тоноҡланып бөткән берҙән-бер фотоһүрәтте ҡулыма алып ҡарайым да, хәтирәләргә бирелеп, йылмайып ҡуям. Их, хәйләһеҙ, бер ҡатлы саҡ. Ошо йәнһеҙ ҡағыҙ киҫәген тейешле кешеһенә ебәрһәң ни була? Бәлки шул кеше менән ул фото ла һиңә кире әйләнеп килер, өйөңә инер ине. Ул сағында тормошоңдағы киҫкен боролоштар, яҙмышыңдағы һикәлтәләр ҙә әҙерәк булыр ине, бәлки...

Йәш ҡыҙҙарға еткерер һүҙем шул: әрмеләргә киткән егетегеҙҙе ышандырып, көтәм, ҡайт, тип шәмәреп ҡалғанһығыҙ икән - көтөгөҙ. Яҙмыш ҡосағына япа-яңғыҙын ташламағыҙ һалдатты. Көтә алмаһағыҙ - вәғәҙә итмәгеҙ. Хыянат һалдаттың рухын һындыра, киләсәккә өмөтөн өҙә. Ә өмөтһөҙ йәшәүҙәре, ай-һай... Көн дә хат яҙ, фото ебәр, тип быуыныңыҙ ерендә бысаҡ һалмағыҙ. Ҡайһы урынға, ниндәй шарттарға эләгә бит - шуныһы бар. Һаҡлағыҙ, ҡыҙҙар, һалдаттарығыҙҙы! Һеҙ һалдатҡа тоғро булһағыҙ, һалдат тыуған иленә тоғро ҡалыр! Мөхәббәт кешене йәшәтә, ҡанат ҡуя, асмандарға ашыра! Бөйөк эштәргә этәрә! Шуны онотмағыҙ, һылыуҙар!

ӘЙҘӘГЕҘ...



# АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

**Кеше йәмғиәттән ситләшеп йәшәй алмай. Һәр кемебеҙ эргә-тирәһендәгеләрҙең йәшәйешен белеп тора. Дуҫтар, күршеләр, хеҙмәттәштәр, ауылдаштар, бер подъезда йәшәүселәр һәм башҡалар - барыбыҙ ҙа теләйбеҙме-юҡмы уларҙың нимә менән шөғөлләнгәндәре хаҡында хәбәрҙарбыҙ. Бөгөн "Киске Өфө"нөң ошо рубрикаһына үҙемдең күршем хаҡында яҙып үткем килә.**

Беҙ Өфөнөң Нуғай ҡасабаһында йәшәйбеҙ. Күрше булыуыбыҙға ла 10 йылдан ашты. Ошо йылдар эсендә күршем Сәлихтең сослоғона, ниндәй эшкә тотонһа ла уның рәт-сиратын белеүенә, бөтә өлкәлә лә таныштарының күплегенә аптырап та, һоҡланып та ҡарайым. Мәҫәлән, ул аҡса эшләүҙең әллә ниндәй юлдарын белә һәм уларҙы уңышлы тормошҡа ашыра. Үҙе эшләп алған бәләкәй генә тракторы менән ҡышын ҡар таҙарта, яҙын ер һөрә, көҙөн шул уҡ тракторын бәрәңге ҡаҙыу өсөн ҡулайлап эшләп ала ла ауыл буйлап йөрөп аҡса эшләй. Ихатаһындағы өс ҙур теплицала иртә яҙҙан еләк-емеш өлгөрә башлай, кинәнеп һата. Йәйгеһен ике малайын ултыртып ала ла урмандан еләк йыйып алып ҡайта, ҡатыны варенье, ҡаҡ итеп етештереп, ҡышын һатыуға сығара. Шул уҡ баҡсаһындағы емеш-еләкте лә эшкәртеп тәҡдим итә. Сифатлы ла, тәмле лә булған продукцияны һатып алыусылар сиратҡа теҙелә хатта.

Әле яңыраҡ ҡына тәҙрәгә тыштан беркетеп ҡуйып, ҡоштарға ем ашатыу өсөн эшләгән ҡулайламаһын күрһәтте. Тәү ҡарашҡа ябай ғына эшләнгән - тәҙрәне лә бысратмай, балалар өсөн әүрәр әйбер ҙә, ҡоштарға ла файҙа. Урындағы интернет төркөмгә һалған ине, ике көндә 10 заказ алды. Һәр береһе 1000 һум, бына һиңә 10 мең һум аҡсаны эшләне лә.

Сәлих күршегә миндек артынан да баралар, сөнки унда һәр ваҡыт төрлө сортлы миндек етерлек була. Аҡ шыршы төнәтмәһе кәрәкме? Әлбиттә, Сәлихтә бар. Төнөн аэропорт, тимер юл вокзалына барырға йәки ҡалаға сығырға кәрәкме? Күрше һәр саҡ әҙер. Әле бына барыһы ла Яңы йылға әҙерләнеү мәшәҡәттәре менән йөрөй. Ул был ваҡытты ла аҡса эшләп ҡалыу өсөн ҡуллана: кемгәләр исемле шыршы уйынсыҡтары яһап бирә, икенселәр бүләккә тип футболкаға ниндәйҙер яҙмалар яҙҙыра (махсус ҡоролма һатып алған күптән), ҡатынына байрам өҫтәленә ҡуйырға төрлө тәм-том бешереүгә күптән сират торалар, балалар буяуы өсөн 2023 йыл символы булған ҡуян һындарын гипстан эшләп теҙеп ҡуйған (әйткәндәй, йығылышып китеп алалар) һәм башҡалар.

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, тағын берҙе ҡабатлаһам да яҙыҡ булмаҫ - күршемдең һәр төрлө аҡса эшләү ысулын үҙләштереп, донъяһын етеш итеп, эшһеҙлеккә, аҡсаһыҙлыҡҡа зарланмайынса, емертеп донъя көтөүенә һоҡланып ҡарайым. Уның тағы ла бер һыҙаты - үҙе белгәндәрҙе күрше-тирәһендәге малайҙарға ла өйрәтә. Уның ҡулы аҫтында һәр малай өйөнә берәр ултырғыс эшләп ултыртты, ағасҡа тағараҡтар элде. Бына шундай уңған кеше менән күршеләш булыу бәхете тейҙе. Уның һәр саҡ нимәлер эшләүен күреп, үҙебеҙ ҙә тик ултырыуҙан арына башланыҡ, өй-эш-өй юлын ғына тапауҙан ситләшеп, ниндәйҙер шөғөл табып йәшәп ятабыҙ, ә ҡайһы берәүҙәр үҙ шөғөлөн аҡсаға әйләндерә лә башланы. Үндыҡ күршенән. Үҙе лә аҡса эшләй, башҡаларҙы ла өйрәтә, өндәй. Уға ҡарап беҙ теләк булғанда аҡса эшләүҙең төрлө ысулын табырға була икәнлеген аңланыҡ.

**Илнур ШӘФИҒУЛЛИН.**

✓ *Һәммә педагог, бер үк ваҡытта психолог та булырға тейеш, тигән инаныуҙамын. Уҡытыусы, үҙенең һөнәри белеменән тыш, балаларға ҡарата дөрөҫ мөғәмәләлә була белергә тейеш.*



ИНТЕРНЕТТАН



# МИЛӘШЛЕ СЫР

■ Рәсәй биотехнология университеты ғалимдары ҡара миләш емештәре ҡушылған сыр уйлап тапҡан. Ул организмды һалҡын тейеп ауырыуҙан һаҡлай. Яңы сыр тәбиғи һөттән яһала һәм 3-4 ай һаҡлана ала. Сыр тәбиғи продукттарҙан ғына тора, уның файҙаһы - иммунитетты нығытыусы һәм сирҙәрҙән һаҡлаусы витаминдар менән байытылған булыуында. "Сырҙың тәме үҙенсәлекле, шулай уҡ унда ҡара миләш составындағы бөтөн витаминдар бар", - тип билдәләй университеттың Сыр яһау үҙәге директоры Елена Сидорова. Ҡара миләштә микроэлементтар менән минералдар: тимер, фтор, магний, кальций, калий, молибден күп. A, K, E, C, P витаминдары капиллярҙарҙы нығыта. Былардан тыш йод бар, ул боғаҡ биҙе сәләмәтлеге һағында тора. Ғалимдар әйтеүенсә, әлегә был продукт магазин кәштәләренә сыҡмаған.

■ Тешеңде таҙартырға яратмаһаң, йөрәк һәм ҡан тамырҙары сирҙәренә юлығыуыңды көт тә тор, тип иҫкәртә табиптар. Ауыҙ ҡыуышлығы гигиенаһының насар булыуынан баш мейеһе лә зыян күрә икән. Йель медицина мәктәбе ғалимдары билдәләүенсә, ауыҙ ҡыуышлығы сирҙәренә бирешеп барған кешеләргә мейе сәләмәтлеге насарайыуы хәүефе лә янай. 2014 йылдан алып барылған һынауҙарҙа 40 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан. Кариес, теш ҡаҙнаһы сирҙәре булғандарҙың МРТ ярҙамында баш мейеһен дә тикшереп ҡарағандар һәм улар араһында бәйләнеш булыуы раҫланған да инде. Бында насар генетика менән бер рәттән, насар ғәҙәттәр, шулай уҡ диабет сәбәпсе булып торған. Әле был мәсьәлә өҫтөндә эштәр дауам итә.

■ Йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре булғандарҙың барыһында ла тиерлек хәүеф тойғоһо һәм депрессия бар. Манчестер университеты ғалимдары ундайҙарға үҙҙәрен ҡулға алырға һәм психик торошон үҙ-аллы яҡшыртырға тырышырға саҡыра. Өй шарттарында ла хис-тойғолар ҡойоноңа бирелмәй, үҙеңдең хәлеңде анализларға өйрәнеп, башҡаса уны булдырмаҫҡа кәрәк, ти улар. Тап ошондай ҡараш кире тойғоларҙан арынырға булышлыҡ итә, ә кире эмоциялар йөрәк сирленең иң ҙур дошманы. Дарыуҙар менән дауаланғанда ла пациенттың үҙенең хистәрен һәм уйҙарын көйләй алып, хәүеф тойғоһон түбәнәйтеүенә нығыраҡ баҫым яһарға кәрәк. Шунһыҙ дауалауҙың файҙаһы оҙаҡҡа етмәйәсәк.

■ Февраль сәләмәтлек өсөн иң ауыр ай. Быны бер нисә сәбәбе бар. Кеше ҡыштан арый, ҡояш яҡтыһы етмәй, витаминдар ҡытлығы. Февралдә тын юлдары сирҙәре арта, был инде иммунитеттың түбәнәйеүе менән дә бәйле. Кешенең эшкә һәләтлеге кәмей, йоҡоһо туймай башлай. D витамины етешмәүе көйефтең насарайыуына ла килтерә. Был ваҡытта иң тәүҙә йәшәү рәүешегеҙгә иғтибар итегеҙ, тип кәңәш бирә табиптар. Эш араһында организм ял итеп өлгөрөргә тейеш. Физик әүҙемлекте ҡыҫҡартып, уның һаулыҡ өсөн файҙалы булғандарын ғына ҡалдырығыҙ, әйтәйек, тышта йәйәү йөрөгөҙ. Майлы, ҡыҙҙырылған ризыҡ ашамағыҙ, ҡамыр аштары ла көс өҫтәмәй. Быңдай ризыҡтар ҡартайыуҙы ла тиҙәйтә. Емешеләктәргә түгел, мәҫәлән, тоҙланған кәбеҫтәгә өҫтөнлөк бирергә була.

ЗАМАН БАШҠОРТО

# "КҮҢЕЛЕМ ДИҢГЕҘГӘ ТАРТЫЛА..."

**Бөгөнгө ҡунағыбыҙ - Рәсәй ҡораллы көстәренең Хәрби һауа флоты өлкән мичманы, тыумышы менән Баймаҡ районы Темәс ауылы ир-уҙаманы - Искәндәр Иршат улы ИСКУЖИН. Уның йәшәйеш, хәрби хеҙмәт, бәхет, дуҫлыҡ тураһында фекерҙәре, уйланыуҙары уҡыусыға ҡыҙыҡ булыр, тип уйланыҡ.**



**➔ Тыуған яҡ, бала саҡ хәтирәләрең менән бүлеш әле.**

- 1984 йылдың 17 октябрендә Башҡортостандың тәүге баш ҡалаһы - Темәс ауылында донъяға килгәнмен. Ғаиләбеҙҙә өс бала үҫтек. Ике һеңлем бар. Атайым "Һәүәнәк" совхозында водитель булып эшләне, ә әсәйем - ауыл хакимиәте хеҙмәткәре.

Бала саҡтан техника менән ҡыҙыҡһындым. Атайҙың машина йүнәтеүен ҡарап торорға яраттым. Балалар баҡсаһында бер хәл булғайны. Тәрбиәсе апай беҙҙән: "Үҫкәс кем булырға теләйһегеҙ?" - тип һораны. Мин ныҡлы ышаныс менән: "Автокран водителе буласаҡмын!"- тип яуапланым. Көн һайын атайҙың эшенә барам, уның бар хәрәкәттәрен, кешеләр менән нисегерәк эш итеүен ҡарайым. Егет кеше өсөн иң файҙалы, иң мауыҡтырғыс өлкә инде ул - техника. 8 йәшемдә мотоцикл йөрөтөргә өйрәндем. 10 йәшлек сағымда бер ағайым кирбес заводында экскаваторҙа эшләргә өйрәтте. Атайым да төрлө машиналарҙың руле артына мине ултырта торғайны.

Атайым менән әсәйем мине медицина хеҙмәткәре итеп күрергә теләне. Ә минең бала сағым техника, тимер менән бәйле үтте. Минән ниндәй медик сыҡһын инде? Мәктәпте уңышлы тамамлағас, Сибай медицина училищеһына ебәрҙеләр. Ә мин Сибайға барып төшкәс, училище эргәһендәге бер эскәмйәлә имтихандар бөтөүен, абитуриенттар сығыуын көтөп ултырҙым. Улар сыҡҡас,

ПЕДАГОГ ҺӘМ ОСТАЗ

**Быйылғы йылды Педагог һәм остаз йылы тип атанылар. Уҡытыусы халҡы былай ҙа һәр саҡ иғтибарыбыҙ уртаһында инде, улар хаҡында күп кенә яҙалар. Ғүмер буйы ошо өлкәлә эшләгән ғалимдарыбыҙҙың юғары уҡыу йорттарында буласаҡ мөғәллимдәребеҙҙе уҡытыу эшендә ҡулланған алымдары ла бихисаптыр. Үҙем уҡытыусы һөнәренән бөтөнләйгә алыҫ торһам да, ошо хаҡта бер аҙ уй-хистәремде, күргән-белгәнемде, берике кәңәшемде яҙып китергә булдым әле.**

# УҠЫТЫУСЫНЫҢ...

## яңылышырға хаҡы бармы?




Уҡытыусының ниндәй булырға тейешлеге тураһында артыҡ нәсихәт уҡырға йыйынмайым, әлбиттә. Мөғәллимдәребеҙ хаҡында бер аҙ фекерләп алырға "Киске Өфө"нөң 3-сө һанында Радик Өмөткужиндың "Күҙҙәр йомоҡ булғанда ла, күңел күҙе асыҡ булһын" исемле мәҡәләһе сәбәпсе булды. Мауыҡтырғыс был яҙманы ентекләп уҡып сыҡтым. Бер тәжрибәле педагогтың сәғәт урлаған уҡыусыһын уның синыфташтары алдында фаш итмәгәнлеге һәм шул сәбәпле әлеге баланың төҙәлеп, һуңынан үҙе уҡытыусы булып китеүе хаҡында ине ул. Ана шул "кинәйәне киңәйтеп", үҙенең фекерен дә уҡыусының күңеленә үтеп инерлек итеп яҙған автор.

Ошо фәһемле мәҡәлә менән танышҡас, бала саҡтағы күрше ауыл мәктәбе уҡыусыһы менән булған бер фажиғәле хәл иҫемә төштө. Бишенсе синыфта уҡыған бер шуҡ малай уҡытыусының баҡсаһына рөхсәтһеҙ инеп, алма алған мәлдә, баҡса хужаһы уны тотоп алған. Был хаҡта "бурҙың" ата-әсәһенә һәм милицияға хәбәр итәсәге хаҡында ла иҫкәрткән. Әллә ҡурҡышынан, әллә оялышынан, малай үҙҙәренең утын һарайына инеп, асылынып үлгән...

Бер яҡтан уйлаһаң, был уҡытыусының баланы шелтәләүе, ғөмүмән, уға ҡарата тәрбиәүи алымы дөрөҫ һымаҡ. Һис һүҙһеҙ, малай гәйепле бит! Әлеге бала үҙе лә, моғайын, ана шундай инаныуҙа булғандыр. Мин ул малайҙы яҡындан белә инем. Бергә уйнап йөрөгәнебеҙ ҙә бар. Шат, телдәр, зирәк был баланың шундай фажиғәгә тарыуын ошоғаса башыма һыйҙыра алмайым. Булған хәлде, әлбиттә, кире ҡайтарыу мөмкин түгел, ә шулай ҙа... Бындай осраҡтарҙа, минеңсә, "зыян күреүсе" оло кеше әлеге балаға, яҡынса, ошолайыраҡ итеп әйтергә тейеш булғандыр: "Мин был хаҡта бер кемгә лә һөйләмәйәсәкмен. Атай-әсәйеңә лә, хатта иптәштәреңә лә. Тик башҡаса рөхсәтһеҙ сит кеше әйберенә ҡағылаһы булма! Мин һиңә ышанам. Алма кәрәк булһа, бар, инеп йыйып ал, көсөң еткәнсе..." Ошондай һөйләшеүҙән һуң бала кешенең тура юлды тиҙерәк тыбыуына иманым камил. Әлеге алма баҡсаһының хужаһы уҡытыусы булмаған осраҡта, мин, бәлки, был хәлде иҫләмәҫ тә инем. Һәммә педагог, бер үк ваҡытта психолог та булырға тейеш, тигән инаныуҙамын. Уҡытыусы, үҙенең һөнәри белеменән тыш, балаларға ҡарата дөрөҫ мөғәмәләлә була белергә тейеш.

Тағы бер миҫал килтермәк булам. Быныһы - үҙем менән булған хәл. Юҡ, һис бер нәмә урламаным! Бишенсе-алтынсы синыфтарҙа уҡыған сағымда дуҫым менән һәр саҡ иң алғы партала

✔ *Бәғзе бер шаян малайҙарҙың баштарын ҡәләм менән "сүкеп" йә "ҡолағын бороп" тәрбиәләүҙәрен дә күргеләй торғайным. Ундай яҙаны миңә татырға тура килмәне, әлбиттә, әммә әлеге малайҙарҙы ныҡ йәлләй инем.*



үтәлгән бурыс тойғоһо менән автобуста ауыл яғына һыпырттым. Ҡайтҡас, атайым менән әсәйемә, имтиханды бирә алманым, тип кенә әйттем. Ә ике аҙна үттеме, юҡмы, минең ҡырын эш беленде тәки! Ике аҙнанан әсәйем, мине эйәртеп, Сибайға юлланды. Барып индек бер заман училищеға мин "бирә алмаған" имтихандарҙы яңынан бирергә. "Был абитуриенттың беҙгә килгәне булманы", - тип тик торалар. Шулай итеп, мин медицина училищеһынан ҡотолдом.

➔ **Әрмегә, профессиональ хеҙмәткә нисегерәк барып эләгеүең тураһында һөйлә әле?**

- Әрмегә тиклем, хеҙмәт итеп ҡайтам да, ауылда үҙ йортом, хужалығым булыр, ишле итеп мал-тыуар аҫрап, вахта ысулы менән Себерҙә эшләрмен, тип хыяллана инем. Ер эше бик оҡшай үҙемә. 2002 йылдың 2 декабрендә әрмегә алындым. Севастополь ҡалаһында Ҡара диңгеҙ флоты моряғы булып киттем. Өйҙән сығып киткәндә һыуыҡ, ҡар ине, ә тегендә йылы, ағастар япраҡҡа күмелеп ултыра. Аптырап киттем. Ике ай йәш һалдат курсы үттем дә, 2003 йылдың 13 февралендә карапҡа эләктем. Карап ул мәлдә Феодосияла ине. Икенсе көндө үк ниндәйҙер диңгеҙгә сығарҙылар. Тәүҙә әллә нисегерәк ине, йәлап өйрәндем, хеҙмәт оҡшай башланы. Ике айҙан карабыбыҙ Новороссийск ҡалаһына, үҙенең төбәгенә - портына юлланды. Диңгеҙгә бик йыш сыға инек. Башлыса Севастополь, Феодосия, Сочи ҡалаларына барып ҡайта торғайныҡ. 2004 йылда егеттәр менән ҡапыл ғына контракт төҙөргә булып киттек. Дөрөт егет инек. Әйтәйем әле, хәрби булырмын тип ете ятып бер төшөмә инмәй торғайны.

➔ **Контракт менән хеҙмәт итергә ҡалыуыңа атайың менән әсәйең ни тине?**

- Һүҙмә-һүҙ хәтерләмәйем, яңылышмаһам, хат яҙып, уларҙың фекерен һорағайным, улар, һинең үҙ тормошоң бит, үҙең ҡара, беҙ ҡаршы түгел, тигән мәғәнәлә яуап яҙҙы. Бына шулай 2004 йылдың майында, медицина тикшереүе үткәндән һуң, егеттәр менән контрактҡа ҡул ҡуйыштыҡ. Әммә бер йылдан, минән башҡалар, хеҙмәт ителәрә килмәй, ҡайтып китте.

2008 йылда Белгород дәүләт технологик университетының Новороссийск филиалына технология факультетына ситтән тороп уҡырға индем. 2008 йылда Грузия менән Абхазия сыуалышында тыныслыҡ һаҡлау операцияһында ҡатнаштыҡ. Был операцияла ҡатнашыуым өсөн хәрби хәрәкәттәр ветераны таныҡлығын алдым, Президенттың маҡтау ҡағыҙына, "За боевые отличия" миҙалына лайыҡ булдым. 2014 йылда, университетты тамамлауҙың икенсе йылына, икенсе юғары белем алыу өсөн Новороссийск дәүләт хәрби академияһына уҡырға индем. Алдағы дипломым булғанға күрә, шунда уҡ 4-се курсҡа ултырҙым. 2018 йылда "Караптарҙың энергия установкаларын хеҙмәтләндереү" һөнәренә эйә булдым.

➔ **Карабығыҙҙың исеме - сер, тигәйнең, ә хәрби һөнәрең тураһында белергә мөмкинме? Моғайын, капитандан кәм түгелдер?**

- Юҡ, капитан түгел. Мотор командаһы старшинаһымын. Механиктың уң ҡулы, ярҙамсыһы, урынбаҫарымын. Хәрби дәрәжәм - өлкән мичман. Алла бирһә, киләсәктә, механик булһам, офицер дәрәжәһе алырмын. Белемем офицер булыу мөмкинлеге бирә. Ваҡыт күрһәтер.

➔ **"Диңгеҙ ауырыуы" тураһында һөйләп үт әле. Ул һиңә тәьҫир итәме?**

- Ҡайһы бер кешеләрҙең күңеле болғана. Ҡайһы саҡта кеше тик торған карапта ла ауырый. Ел дә юҡ, карап тик тора, ә кеше ҡыйынлыҡ кисерә. Әйтәләр бит, диңгеҙ ауырыуынан бер кем дә үлмәгән. Ә үҙемә килгәндә, бәхеткә, был "сир" миңә тәьҫир итмәй. Әллә нисә тапҡыр дауылға эләккәнебеҙ булды. Ҡайһылары 7 балға етә яҙып ҡуя ине. Йырып сыҡтыҡ, киләсәктә лә бирешмәҫбеҙ. Быйндай ваҡытта йоҡлауы ғына уңайһыҙ. Сәнгелдәктә һымаҡ бәүелтә. Йә баштүбән әйләндерә, йә ятҡан килеш аяҡ өҫтө килтереп торғоҙа.

➔ **Һиңә оҙайлы ваҡыт бер үк кешеләр менән тығыҙ бәйләнештә йәшәргә, эшләргә тура килә. Дуҫлыҡ бармы ул?**

- Бер иштәр бер-береһенә тартыла, тигән һүҙ бар бит. Дуҫың булыуын теләһәң, үҙеңдән башла: башта үҙең дуҫ булырға өйрән. Кем - дуҫ, ә кем эргәңдәге иптәш кенә икәнен ваҡыт үтеү менән тормош үҙе күрһәтә.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

ултыра инек. Маҡтанырға йыйынмайым, әммә мин үҙем гел генә "бишле"гә өлгәштем. Дуҫым да уҡыу алдынғыһы. Бер мәл математиканан сираттағы "контроль эш" яҙҙыҡ. Һәр ваҡыттағыса, мәсьәлә, миҫалдар беҙҙең өсөн бик еңел ине. Еренә еткереп, эшебеҙҙе тапшырып, ҡайтып киттек. Иртәгеһен, һис шикһеҙ, "бишле" өмөт итеп, дәрескә индек. Әммә уҡытыусы икебеҙгә лә ҙур итеп... "икеле" билдәһе сәпәгән ине! "Икегеҙҙең эшегеҙ бер иш. Берегеҙ икенсегеҙҙән күсереп яҙғанһығыҙ!" - тине уҡытыусыбыҙ. Ә минең һәм дуҫым өсөн "икеле" түгел, хатта "өслө" алыу ҙа - оло тетрәнеү! Икебеҙ ҙә "мыш-мыш" килеп иланыҡ. Шуның менән эш бөттө, әммә мин ошо көнгәсә аңлап етмәйем был уҡытыусы ағайҙың ни өсөн беҙгә икеле ҡуйыуын. Беҙҙең икебеҙҙең дә уҡыу отличнигы икәнлегебеҙҙе яҡшы белә ине бит ул. Икенсенән, "икегеҙҙең эше бер иш" тип, әйтәйек, башҡорт йә урыҫ теленән инша, изложение яҙғанда һүҙ йөрөтөргә була. Ә был бит - математика! Миҫал һәм мәсьәләләрҙең сиселеше бер иш була ла баһа! Әгәр миҫалдарҙа бер-ике хата киткән хәлдә, "хатта хаталарығыҙ ҙа бер иш, берегеҙҙең күсереп яҙғаны күренеп тора", тип әйтергә булыр ине...

Һүҙ юҡ, үҙенең дәресен ифрат яҡшы аңлата ине был мөғәллим. Дәрестә уның һөйләгәнен тиҙ генә аңлап, "тота һалып" алам. Ә иртәгеһен, үткән тема буйынса ниндәй генә һорау бирһен йә таҡта янына сығырға кәрәк булһын, шунда уҡ ҡул күтәрәм. Дөрөҫ итеп яуап бирәм. Киләһе һорауға тағы ла ҡулымды һуҙам. Әле генә яуап биргән булһам да. Әммә ана шул мәлдә уҡытыусым минә йыш ҡына: "Мөхәммәт, һин - маҡтансыҡһың! Бер мәртәбә яуап бирҙең дә баһа, тағы ла һонолаһың! Тик кенә ултыр!" - тип, етди генә итеп иҫкәртә. Бөтә класс алдында мин ҡыҙарырға мәжбүр булам. Оло кеше "маҡтансыҡ" тип әйткәс, әлбиттә, ғәрләнәм, илауҙан көскә тыйылып ҡалам. Боғаҙыма ниндәйҙер төйөр килеп тығылғандай тоям. Әгәр ул миңә: "Һинең был һорауға яуапты белеүеңдә шигем юҡ, Мөхәммәт, молодец! Бер аҙ ғына сабыр итеп ултыр. Башҡалар ҙа яуап бирергә тейеш", - тигән һымағыраҡ һүҙҙәр тапһа, был уҡытыусыға ихтирамым бермә-бер артыр ине...

Инде өлкән синыфтарҙа уҡығанымдағы бер ваҡиға ла иҫемдә ҡалған. Ун дүрт - ун биш йәшлек булыуына ҡарамаҫтан, малай кеше бәғзе ваҡыт шаярып та ала торғандыр. Шулай, тәнәфес ваҡытында шаярып йөрөгәндә, уҡытыусының йоҡа фанерҙан яһалған ултырғысын яңылыш ҡына ботинка үксәһе менән "тишә" баҫтым. Дәрестән һуң ремонтлап ҡуйырмын, тип ниәт иттем һәм уҡытыусы дәрескә ингәс, уға үҙемдең эш боҙоуым хаҡында әйттем. "Математик"тан әрләнеремә, әлбиттә, шикләнмәнем, әммә... класс таҡтаһына мөйөш үлсәп һыҙа торған ауыр, дәү транспортир менән уҡытыусым башыма "шуҡылдатыр" тип башыма ла килмәгәйне. Ғәйәт ныҡ ауыртты. Инде ҙур малай булғаным өсөн генә иламай ҡалғанмындыр. Быйндай "тәрбиәүи ысул" хәҙерге уҡытыусыларға ҡарата ҡулланылмайҙыр, моғайын, тигән ышаныстамын. Әйткәндәй, дәрестәр тамамланыу менән әлеге ултырғысты мәктәп оҫтаханаһына алып барып, ҡалын фанер үлсәп ҡырҡып, матур итеп йүнәтеп, хатта өҫтөн йылтырап торған лак менән буяп та ҡуйҙым...

Бәғзе бер шаян малайҙарҙың баштарын ҡәләм менән "сүкеп" йә "ҡолағын бороп" тәрбиәләүҙәрен дә күргеләй торғайным. Ундай яҙаны миңә татырға тура килмәне, әлбиттә, әммә әлеге малайҙарҙы ныҡ йәлләй инем. Шулай ҙа, өйгә ҡайтҡас, ата-әсәйҙәребеҙгә ошо хаҡта бер ни ҙә һөйләмәй торғайныҡ. Уларҙың үҙҙәренән дә шөрләгәнбеҙҙер, моғайын. Балаларын уҡытҡан барлыҡ уҡытыусыны ата-әсә ныҡ ихтирам итә ине. "Уҡытыусы һәр саҡ хаҡ" тигән инаныуҙа булды күпселек. Уҡытыусыға ҡарата юғары органдарға ялыу яҙыу тигән нәмәне лә бөтөнләйгә ишеткәнем булманы. Ниндәй ҙә булһа уҡытыусы өҫтөнән ҡайҙалыр ялыу яҙыуҙы бик насар нәмә тип тә һанайым. Аныҡ берәй мөғәллимдең "битен йыртып", уның етешһеҙлектәрен бар тирә-яҡҡа фаш итеү һис кенә лә ярамай. Тик мәғлүмәт сараларында (бер ниндәй исем-фамилиә күрһәтмәй) бына ошоноң һымаҡ аныҡ миҫалдар килтереү, бәғзе бер ҡыҙыуыраҡтарҙы иҫкәртеүгә, уларҙың бер аҙ "саңын баҫырға" ярҙам итер тип ышанам. Бала теге йәки был педагогтың дәресенән ҡурҡмаһын ине, тимәксемен. Мин уҡыған дәүерҙән инде ярты быуаттан ашыу ваҡыт үтеп киткән. Бөгөнгө көндәге педагогтарыбыҙ юғарыла һанап кителгән һымаҡ "каты" ысулдарҙы ҡулланмайҙыр, моғайын. Ә, бәлки, балаларҙы уҡытыу-тәрбиәләүҙә шул ысулдарҙың ыңғай яғы ла барҙыр? Кем нисек һанай?

**Мөхәммәт ВӘЛИЕВ.**

**Редакциянан: Йылға арнап, "Киске Өфө"лә "Педагог һәм остаз" тигән рубрика асабыҙ һәм уҡыусыларыбыҙҙың ошо изге һөнәргә хеҙмәт иткән кешеләрҙең маҡтаулы тәжрибәһе тураһында яҙып ебәреүҙәренә өмөт итәбеҙ. Уҡытыусыға арналған рубриканы ошондайыраҡ, киләйәле мәҡәләнән башлау ҙа юҡҡа түгелдер. Был рубрикалағы яҙмалар уҡытыусымын тигән уҡытыусының, остаздарҙың матур тәжрибәһен генә түгел, ә... хаталарын да сағылдырырға тейештер, тип уйланыҡ. Кемдер бер аҡыл эйәһе әйткән бит: "Хаталанмаһам, дөрөҫ эшләргә икәнде ҡайҙан белер инем?" Ҡыҫҡаһы, һеҙҙән күләме 2-3 биттән артмаған, мотлаҡ уҡытыусы-остаздың үҙенсәлекле тәжрибәһен сағылдырған мәҡәләләр көтәбеҙ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# АҠСА ҺӘМ ҒАИЛӘ

## Ҡулланыусы кредиттары

Йорт алыу йәки фирма асыу өсөн кредит алыу хупланһа ла, ҡулланыусы кредиттары тормошоғоҙҙо шул тиклем ҡатмарландырасаҡ. Улар һеҙгә бай булырға ҡамасаулыҡ итә. Быйндай кредиттарҙың күпме булыуы мөһим дә түгел, хәйер, быныһы ла ҙур минус булып тора. Улар ниндәй нәтижәгә килтерә, ошо хаҡта уйларға кәрәк.

Бурысы булған кеше, ошо бурысымдан ҡотолһам, бәхетле булыр инем, тип йәшәй. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, быйндай кешеләрҙең күберәк эшләп, күберәк аҡса табырға тигән ынтылышы ла юҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, улар ана шул кисә алған кредиттары өсөн эшләй. Уларҙың үҙҙәренә ышаныстары булмай. Булған аҡсаларынан күберәк тотонорға яратыусыларҙы бер һыҙат берләштерә: улар башҡалар алдында үҙен күрһәтергә ынтыла. Ни тиклем үҙенә ҡуйған баһаһы түбәнерәк һәм үҙенә ни тиклем ышанмай, ундайҙар бурысҡа ла күберәк бата. Ҡулланыусы кредиты булған кеше алған донъяла йәшәй. Ниндәйҙер әйбере бар, әммә ул уныҡы түгел, тимәк, ул әйберҙе юҡ тип иҫәпләргә лә булыр ине. Бурыстан башҡа нәмәһе юҡ тип әйтһәк тә, яңылыш булмаҫ. Ялған тормошта йәшәүҙән дә түбәнлек юҡ йәмгиәттә. Кем үҙенең теләктәрен ауыҙлыҡлай алмай, кредитҡа әйбер артынан әйбер һатып ала, ул шундай тормошта йәшәй. Бурысҡа батҡан кеше, ғәҙәттә, бының өсөн үҙен ғәйепле тип һанамай. Йә банк уға был хеҙмәтте "көсләп таҡҡан", йә ваҡ шрифт менән яҙған. Ошондай тормош мине кредит алырға этәрҙе лә инде. Йәки бай атай менән әсәйең булмағас, тип тә ебәрә. Үҙен-үҙе шулай аҡлау менән генә туктамай ундайҙар.

## Үҙ-үҙеңде алдау

Аҡса туплап һатып ала алмаған телефонды кредитҡа алып, был кеше башҡаларҙы ла алдай. Ул үҙен дөрөҫлөккә тап килмәгән ысынбарлыҡ менән уратып ала. Ул был рәүешле үҙен дә алдай. Кредитҡа алған автомобиле уны уңышлы итеп күрһәтә тип уйлай. Ошолай тышҡы атрибуттар артына үҙенең ысын йөҙөн йәшерә. Беҙҙең йәмғиәттә ҡулланыусының ни тиклем яңылыш фекерҙә икәнен тап автомобиль күрһәтеп тора. Күптәр өсөн автомобиль үҙенең тәғәйенләнешен үҙгәртте. Улар уңышлы булыуҙың күрһәткесенә әйләнде. Йәки, башҡалар мине уңышҡа өлгәшкән тип уйлаһын өсөн, миңә ошо ҡиммәтле автомобиль кәрәк, тип уйлай күптәр. Йәки мин уңышлы булһам, күпкә өлгәшһәм, ошондай автомобиль һатып алыр инем. Тик әлегә былар хыялда ғына, шуға ла минең турала бөгөн үк яҡшы уйлаһындар һәм, бәлки, миңә ниндәйлер файҙалы тәҡдимдәр булһын өсөн мин экономиялап торорға тейеш түгелмен, кредитҡа булһа ла һатып алырға кәрәк. Был минең киләсәгем өсөн мөһим, ти уйлай ундайҙар. Ә һеҙгә быйндай ҡиммәтле автомобиль кәрәкме һуң? Яуабын үҙегеҙ беләһегеҙ инде. Минән кәңәш: автомобилде ҡулаҡсаға ғына һатып алығыҙ. Үҙегеҙҙә булған аҡсаға, кредитҡа түгел. Тағы ла: ике айлыҡ эш хаҡығыҙҙан ҡиммәтерәк булған автомобиль алмағыҙ.

**Бодо ШЕФЕР.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 23 ФЕВРАЛЬ - ВАТАНДЫ ҺАҠЛАУСЫЛАР КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**5-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ампер. Илсе. До. Сәсмәүер. Ғариза. Мут. Елек. Әүен. Эт. Туҡһанбай. Аҡыл. Әхәт. Бина. Дошман. Ихата. Такси. Йола. Нур. Актив. Аҡын. Оран.

**Вертикаль буйынса:** Мортазин. Ситдиҡова. Буранбай. Исем. Олатай. Әжер. Мәскәү. Атака. Эйә. Кино. Рэкет. Көрт. Радио. Ра. Ғәләүетдинова. Аршын. Имән. Абдуллина.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Февраль (Рәжәб - Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (29) дүшәмбе | 6:59 | 8:29 | 13:30 | 16:59 | 18:30 | 20:00 |
| 21 (1) шишәмбе | 6:57 | 8:27 | 13:30 | 17:01 | 18:32 | 20:02 |
| 22 (2) шаршамбы | 6:55 | 8:25 | 13:30 | 17:03 | 18:34 | 20:04 |
| 23 (3) кесе йома | 6:52 | 8:22 | 13:30 | 17:04 | 18:36 | 20:06 |
| 24 (4) йома | 6:50 | 8:20 | 13:30 | 17:06 | 18:38 | 20:08 |
| 25 (5) шәмбе | 6:48 | 8:18 | 13:30 | 17:08 | 18:40 | 20:10 |
| 26 (6) йәкшәмбе | 6:45 | 8:15 | 13:30 | 17:09 | 18:42 | 20:12 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ИҪКӘРТӘБЕҘ!*

## АЛДАНМАҒЫҘ!

Башҡортостанда уҙған тәүлектә мутлыҡ факттары буйынса туғыҙ енәйәт эше ҡуҙғатылған - республикала йәшәүселәр енәйәтселәргә 2 миллион һумға яҡын аҡса күсергән. Мәҫәлән, бер осраҡ Белорет ҡалаһында теркәлгән. Полицияға аҡсаһынан ҡолаҡ ҡаҡҡан 30 йәшлек ҡатын мөрәжәғәт иткән. Уға туристик турҙар буйынса менеджер шылтыратып, осһоҙ хаҡҡа юллама һатып алырға тәҡдим иткән. Ул ҡыҙыҡтырғыс тәҡдимгә ризалашып, "турагент" иҫәбенә 120 мең һум күсергән. Ә "белгес" аҡсаны алғас та юғалған.

"Таныш булмаған кешеләргә аҡса күсермәгеҙ. Банк хеҙмәткәремен тип шылтыратһалар, трубканы һалығыҙ. Шуны онотмағыҙ: мутлашыусылар ялған номерҙар ҡулланырға мөмкин. Социаль селтәрҙә аралашҡанда һаҡ булығыҙ. Таныштарығыҙҙан шикле хәбәрҙәр алһағыҙ, уларҙың шәхси номерына шылтыратып белешегеҙ. Шикле һылтанмаларҙы асмағыҙ, тикшерелмәгән сайттарға инмәгеҙ", - тип белдерҙеләр Башҡортостан Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәтендә.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 февраль "Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева), театрлаштырылған тамаша. 12+
**22 февраль "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**23 февраль "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 18.00 12+
**24 февраль Премьера! "Ҡыҙыл паша"** (Н. Асанбаев), драма. 18.00 12+
**25 февраль "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+
**26 февраль "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21 февраль "Арба"** (Зөһрә һәм Таңсулпан Бураҡаевалар), әкиәт. 11.00 6+
**"Башҡорт туйы"** (М. Буранғолов), романтик драма. 12+
**23 февраль "Звезда героя"** (Ф. Әхмәҙиев, О. Мусина), драма. 18.00 12+
**24 февраль "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00 6+
**25 февраль "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия. 18.00 12+
**26 февраль "У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн. 12.00 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**23 февраль "Приключения доктора Айболита и его друзей"** (К. Чуковский). 12.00, 14.00 0+
**24 февраль "Кошкин дом"** (С. Маршак). 12.00, 14.00 0+
**25 февраль "Три поросенка"** (Д. Гараева). 12.00, 14.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**23 февраль "Батыр даны мәңгелек"** концерт. 18.00 6+
**25 февраль "В ожидании чуда. Органный космос"**. 13.00 0+
**26 февраль "На златом крыльце сидели..."** ғаилә өсөн концерт. 15.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**20 февраль "С чего начинается Родина?"** әҙәби-музыкаль лекторий. 12.00. 13.30 6+
**22 февраль "Эх, Өфө ҡыҙҙары!"** (И. Абдуллин), музыкаль комедия. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**21 февраль "Бөйөклөгө өсөн ҙур эштәрҙең мин әле лә һалдат, яҡташтар"** концерт. 14.00 6+
**23 февраль "Дороги Победы"** концерт. 18.00 6+
**25 февраль "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай), музыкаль комедия. 18.00 12+
**26 февраль "СуперЗаяц"** (И. Чернышев), әкиәт-комедия. 12.00 0+
**"Ҡатын түгел - аждаһа"** (Д. Салихов), комедия. 18.00 16+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**24 февраль** Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында гастролдәр:
**"Таңбатыр"** (М. Ғиләжев), әкиәте. 12.00 0+
**"Мөхәббәтте ергә ҡарап түгел, Йондоҙҙарға ҡарап көткәнмен"** концерт. 12+

## БР Милли музейы

**21 февраль "Эстетика: традиция и современность"** күргәҙмәһе асыла. 15.00 12+
**22, 23, 28 февраль "Батырлыҡ һәм үҙ-үҙеңде ҡорбан итеүҙең өс үрнәге"** дәрес. 15.00 12+
**23 февраль саралары: "Һуғыш фотоларын уҡып..."** 12.00, **"Һалдатҡа бетеү"** 13.00, **"Уралдың боронғо яугиры"** 14.00 6+
**25 февраль** Шашка буйынса турнир. 11.00 6+

ЗАМАН БАШҠОРТО

# "КҮҢЕЛЕМ ДИҢГЕҘГӘ ТАРТЫЛА..."



**(Башы 12-13-сө биттәрҙә).**

**➔ Әйт әле, ә әрмелә хеҙмәт итеү - ул эшме, әллә күңел ялымы? Әрмелә романтикаға урын бармы?**

- Әлбиттә, әрмелә хеҙмәт иткән ауыл кешеһе ауырлыҡты еңел кисерә, бирешмәй. Ғөмүмән, әрмелә хеҙмәт итеү - тәү сиратта һәр ир-егеттең Ватан алдындағы бурысы ул. Әрме минең өсөн романтика түгел. Мин уны ир-егетте һынау һәм ауыр хеҙмәт тип ҡабул итәм. Ә шулай ҙа романтикаға урын юҡ тип тә әйтеп булмай. Ҡайһы саҡта карапты дельфиндар оҙатып килеүен күрәһең. Матур, күңелле!

Беҙ, кешеләр, донъяға тыуыр алдынан да әсәйҙең йөрәге аҫтында, һыуҙа бәүелеп кенә ятабыҙ бит инде. Карап та шулай бәүелтә. Мин карапҡа күптән өйрәндем. Шуға ла унда үҙемде ерҙәгегә ҡарағанда ла тынысыраҡ тоям. Һыуҙағы хеҙмәт менән ер өҫтөндәге хеҙмәтте сағыштыра ла алмайым. Карапта хеҙмәт ауыр, шулай ҙа ҡыҙыҡлы. Диңгеҙ минең йәшәйешемдең бер өлөшө, үҙе тотош бер донъя. Егерме йыл эсендә уға ныҡ өйрәнгәнмен. Шулай ҙа була: причалда оҙаҡ торһаҡ, күңел диңгеҙгә тартыла. "Диңгеҙ йәнле" тигән төшөнсә бар. Мин дә, моғайын, диңгеҙ йәнлелер. Был тойғо диңгеҙгә ғашиҡлыҡты ла, уның ҡеүәтен, көсөн, бөйөклөгөн, диңгеҙҙең бер өлөшө булыуыңды таныуҙы ла үҙ эсенә ала. Йыш ҡына диңгеҙ яры буйлап атлап барам да, туҡтап, уйланып ултырам. Ярҙа китап уҡырға яратам. Диңгеҙ шауы йәнгә ял, тыныслыҡ бирә.

**➔ Белорет ҡыҙы - Гөлназ еңгәй менән табышып ҡауышыуығыҙ нисегерәк булды?**

- Бары тик башҡорт ҡыҙына ғына өйләнәм, тигән әйтеүем ҡасан барлыҡҡа килгәндер, хәтерләмәйем. Әммә был минең күңелемдә ине. Ҡатыным менән уйламағанда, социаль селтәрҙәрҙең береһендә танышып, ышанаһыңмы, юҡмы, тәүге көндән үк һин дә мин аралашып киттек. Әйтерһең, бер-беребеҙҙе ғүмер буйы белгәнбеҙ. Йәндәр күптән таныш булған да, мәлен генә көткән, тиҙәр бит әле... Дүрт айҙан һораттым, тағы өс айҙан никах уҡытып, өйләнештек тә. Былтыр улыбыҙ тыуҙы. Рамазан тип исем ҡуштыҡ.

**➔ Бәхет нимә ул? Һин үҙеңде бәхетлемен, тип әйтә алаһыңмы?**

- Бәхет нимә ул, тиһең инде... Беҙ был донъяға аяҡ-ҡуллы, асыҡ зиһенле булып тыуғанбыҙ икән - иң ҙур бәхет шул. Һәм һәр кемдең даланы үҙенсә, төрлө-төрлө. Ысынында, был донъяла бәхетле йәшәү өсөн сәбәптәр шул тиклем күп. Бәхет һәр саҡ эргәлә, үҙеңдә генә икән ул - һинең һөйөүең, хис-тойғоларың. Бер һүҙ менән генә аңлатырлыҡ түгел.

Эйе, мин - бәхетле! Яратҡан ҡатыным, улыҡайым, ниндәй генә ауыр булһа ла, яратҡан эшем бар. Ҡатыным минең хеҙмәтемдең ауырлығын аңлай. Бөтөн ҡатын-ҡыҙҙарға хас булғанса, минең өсөн ҡурҡа, шомлана, хәүефләнә, шулай ҙа, кире бороп маташмай. Миңә һәр яҡтан теләктәш ул. Ғорурланам! Ошондай үҙегеҙҙе аңлаған, һәр саҡ арҡа терәге булған ҡатындарығыҙҙы һаҡлағыҙ, тим ир-егеттәргә!

Һәм тағы. 70 йәшең тулып, ошо үтелгән ғүмереңдә барлыҡ маҡсаттарың, теләктәреңдең тормошҡа ашыуын аңлаһаң, шул да бәхеттер...

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әңгәмәләште.**

ШИҒРИӘТ

# БАЙРАМ МЕНӘН ҠОТЛАП...

### Ысын ир-егеттәр...

*Класташым Һөйөндөков Йәлил Төхфәт улына.*

Ысын ир-егеттәр һирәк осрай:
Улар әйткән һүҙен тоталар,
Улар һүҙгә һаран, эшкә - йомарт,
Тормош йөгөн төптән тарталар.

Ысын ир-егеттәр киң күңелле,
Ваҡ-төйәккә асыу һаҡламай,
Кәрәк икән, ярҙам ҡулын һуҙа,
Үткән үпкәләргә ҡарамай.

Ысын ир-егеттәр уй-фекерен
Һүҙ ыңғайы илгә фашламай.
Хаталарҙы ул кисерә белә,
Ауырлыҡта дуҫын ташламай.

Ысын ир-егеттең үҙ башы бар -
Ҡабатламай кеше фекерен,
Ул хәҡиҡәт итеп иҫбатламай
Бисә-сәсәләрҙең эс керен.

Ысын ир-егеттең ышығында
Ҡатын-ҡыҙға тыныс, уңайлы,
Балалары уның шат, бәхетле,
Ата-әсәләре ҡараулы.

Ысын ир-егеттең мөхәббәте
Бөтә ғүмеренә бер генә,
Һайлап алған ошо берәүенән
Айыра алыр һалҡын гүр генә.

Ысын ир-егеттәр ил хәстәрен
Иңдәренә һала аһ-зарһыҙ.
Шундай ир-егеттәр тураһында
Хыялланмай ниндәй ҡатын-ҡыҙ!

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**

### Улдар үҫтергән әсәй

Ул үҫтергән әсәйҙәргә
Түҙемлектәр бир, Хоҙай!
Улар йөрәгенә тоҫҡап,
Һәр дәүер ҙә, ҡан, дан көҫәп,
Утлы-ыулы уҡ ҡаҙай.

Улан бағыу - Ил бағыу ул,
Әсә һүҙе - Ил һүҙе.
Ир бала - илдең терәге,
Ышанысы һәм өмөтө,
Ил күҙе һәм Ил йөҙө.

Улдар үҫтергән әсәйҙең
Мең хәстәр - иңдәрендә.
Ер-һыуҙы яттарға бирмәү
Бурысы төшә борондан
Улдарҙың иңдәренә.

Ысын ир булһын уландар,
Булһындар ысын батыр!
Батыр улдар - ил күрке ул,
Яу килгәндә, бахыр ғына
Өңөндә боҫоп ятыр.

Улдар үҫтергән әсәйҙең
Йоҡолары ла уяу.
Ил яҙмышы - ир ҡулында,
Ныҡ булһын уландарыбыҙ,
Илгә булһындар таяу.

Ил дә аяу булһын ине,
Һаҡлаһын үҙ терәген.
Уҡ сығып осто йәнә лә...
Илгә ҡалҡан булайым тип,
Ут эсендә баҫып торам,
Устарымда - йөрәгем...

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА.**

### Әсәләре илар

Юҡ тимәгеҙ беҙҙә аҫыл ирҙәр,
Таж keймәгән улар, күренмәҫ.
Башы булған башҡорт мин-минләнеп,
Күренер өсөн генә үрелмәҫ.

Юҡ тимәгеҙ беҙҙә аҫыл ирҙәр,
Аҫыл ирҙәр бүре шикелле,
Күренер өсөн генә, цирк күрһәтеп,
Майҙан тотоуҙары икеле.

Юҡ тимәгеҙ беҙҙә аҫыл ирҙәр,
Аҫылдары шоңҡар ишеләр.
Улар үрелмәйсә үрҙә булған
Күңелдәре бейек кешеләр.

Юҡ тимәгеҙ беҙҙә аҫыл ирҙәр,
Тәрән йылғалар ҙа аға тын.
Аҫыл ирҙәр ажарланмай ғына
Хәстәрләйҙәр нәҫел ағасын.

Аҫылдарҙың асылын шунан таны:
Мәрхәмәттер - күңел байрағы.
Ә ҡынында изгелекте яҡлар
Ҡылысы бар, тағы ҡайрағы.

Юҡ тимәгеҙ беҙҙә аҫыл ирҙәр,
Егеттәрҙең әсәләре илар.
Башҡорт ҡатындары батыр таба,
Ир-уҙаман тәрбиәләй улар.

Юҡ тимәгеҙ беҙҙә аҫыл ирҙәр,
Әсәләре рәнйер аҫылдарҙың.
Был һүҙҙәрҙе әйтә алған кеше
Милләтенең белмәй асылдарын.

**Гөлнара ХӘЛФЕТДИНОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҮҘЕМДЕҢ КИЛЕН ЯМАН,

## ҡыҙымдың ҡәйнә яман

Ҡомһоҙ ҡоторһа, ҡоҙоҡҡа ҡармаҡ һалыр; ялҡау ҡоторһа, байрамда эшкә барыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Байҙар беҙгә оҡшамаған - улар әҙерәк һалым түләй.

**(Питер де Врайз).**

Ҡатын-ҡыҙҙар бөтә ирҙәр ҙә бер төрлө тип уйлай - бында уларҙың көсө; ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙҙар бөтәһе лә төрлө тип иҫәпләй - бында уларҙың көсһөҙлөгө.

**(Рамон Гомес).**

Дуҫтарыбыҙҙың беҙҙе ни тиклем насар белгәнен беҙ улар бүләк иткән бүләктәр аша аңлай алабыҙ.

**(Зигмунд Графф).**

Ҡайһы бер ирҙәр, идара итеүе еңелерәк булыр, тип, ахмаҡ ҡатын-ҡыҙға өйләнә лә үҙе ахмаҡ хәлендә ҡала.

**(Сэмюэл Джонсон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Муса бәйғәмбәр заманында була был хәл. Бер ярлы утынсы йәшәгән. Көн һайын урманда утынярған, ауыр хеҙмәте өсөн тинләп аҡса алған. Ул арыу-талыу белмәй эшләгән, тормошона хатта зарланмаған да. Тик күршеһенең шул уҡ эште ишәге ярҙамында еңелерәк эшләүенә көнләшкән, был хәл уны сығырынан сығарған.**

**Бер ваҡыт ярлы утынсы Муса бәйғәмбәр янына килеп, үҙенең ауыр тормошона зарын һөйләгән: "Утынды күтәреп йөрөткәндән арҡам ныҡ һыҙлай. Үҙ ғүмеремдә ал-ял күргәнем юҡ. Зинһар өсөн, Аллаһы Тәғәләгә минең турала ла әйт инде. Ул миңә ишәк ебәрһен, миңә еңелерәк булыр..."- тигән.**

**Аллаһ алдына килеп баҫҡанда Муса бәйғәмбәр ошо турала ла һөйләгән. Аллаһ шулай яуап ҡайтарған: "Был ҡол көнләшеү сире менән ауырый. Был сирҙән ҡотолмаһа, бер ҡасан да тыныс йәшәй алмаясаҡ. Барыһынан элек ул башҡаларға көнләшеп ҡарауҙан ҡотолорға тейеш. Ана, уның күршеһенең ишәге ауырып киткән. "Күршемдең ишәге һауыҡһын", тип сүрә уҡыһын, әйт уға. Шунда уға ла ишәк бирербеҙ..."**

**Муса бәйғәмбәр Аллаһтың был һүҙҙәрен утынсыға еткергәс, ҡарттың көнләшеүе тағы ла нығыраҡ үҫкән: "Мин ундай сүрәне уҡый алмайым. Миңә ошолай көн күреүем дә оҡшай. Аллаһтан башҡаса ишәк һорамайым. Миңә күршемдең ишәгенең һауыҡмауы ла еткән", - тигән ул...**

**Бәйғәмбәребеҙҙең хәҙисендә шулай тиелә: "Көнләшмәгеҙ. Утынды ялҡын йотҡан кеүек үк, был хис тә кешенең изге эштәрен юҡҡа сығара".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 23006

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
17 февраль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3267
Заказ - 216

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.